-М. Аҡмулла ис. БДПУла, «Аҡмулла көндәре» сиктәрендә үткәрелгән шиғри конкурста бер уҡыусым (Иштуганов В., 6 кл.) ҡатнашты.

-«Илһам» нәфис һүҙ оҫталары конкурсының район этабында бер уҡыусым (Хисматуллина М., 6 кл.) призер булды.

**Шаһабетдинова Элиза Тимур ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 124-се мәктәбенең**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**




«Башҡорт теле
дәрестәрендә
интерактив уйындар
ҡулланыу»


Теманың актуаллеге
Интеллектуаль яҡтан камил кеше – киң ҡарашлы, отҡор зиһенле, яҡшы хәтерле кеше. Хәҙерге заман мәктәп алдына ҡуйған талаптар араһында нәк ошондай шәхесте тәрбиәләү мөһим урын алып тора.


• Интерактив «һүҙе» инглиз телендә interact (ингл.), унда «inter» - үҙ-ара, «act» - эш итергә. «Интерактивлыҡ» үҙ-ара эш итеү йәки диалог режимында булыу һәләтен аңлата.


**Маҡсаты** – башҡорт теле дәрестәрендә интерактив уйындар ҡулланып, уҡыусының интеллектуаль кимәлен, һәләтен үҫтереү һәм башҡорт теленә һөйөү, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.


Методик эштең **объекты** булып интерактив уйындар, ә **предметы** булып башҡорт теле дәрестәрендә интерактив уйындар ҡулланыу алымдары тора.


Интерактив уйындарҙың күп төрлөлөгөнә ҡарамаҫтан, уларҙы үткәреү ысулы универсаль һәм киләһе алгоритмға нигеҙләнә:
• уҡытыусы темаға һәм класс төркөмөнә ярашлы тәғәйен интерактив уйын һайлай;
• ҡатнашыусылар тәҡдим ителгән проблеманы хәл итеү мәсьәләһе, шулай уҡ өлгәшергә кәрәкле маҡсат менән таныша;
• уҡытыусы уйын ҡағиҙәләре менән таныштыра;
• уйын барышында уҡыусыларҙың, маҡсатҡа ярашлы, үҙ-ара эшмәкәрлеге бара;
• уйын аҙағында рефлексив анализ эшләнә.
elenafranko.ucoz.ru


Методик эштең **гипотезаһы**-
башҡорт теле дәрестәрендә уйын алымдарын ҡулланыу уҡыусыларҙы шәхес булараҡ үҫтереүгә ҙур эмоциональ этәргес булып тораcаҡ.
elenafranko.ucoz.ru


Йомаҡтар:
Эйәлә, бегәлә,
Ак мамыгы түгәлә,
Ҡара күҙе күренә.
Өй артында йәшел үт,
Үҙе үлән, үҙе мут.
Табо бер, башы мең,
Беҙләй ҙә беҙләй,
Бигерәк йәнә түҙмәй,
Гел төмләнә эҙләй.
Мәҡәлдәр
«Тел – күңелдең көзгөһө»,
«Татлы тел таш ярыр»,
«Һүҙ – бер көнлөк, тел – гүмерлек»,
«Тел ярмышы – ил ярмышы»,
«Әсә теле бер булыр»,
«Илак һорарга ла тел карак»,
«Күңеле буштың теле буш»,
«Кеше күрке – йөз, йөзлөң күрке – күз, үйзың күрке – тел, телдең күрке – һүз».
elenaranko.ucoz.ru


1
2
3
4
5
elenaranko.ucoz.ru






LearningApps.org
LearningApps.org
:Padlet
Какой чудесный день!
Сотвори что-нибудь столь же чудесное.
Зарегистрироваться
Установить
ОСЗ. Инофон. Башкирский
ООО «АйТи Агентство ОСЗ»
3,7 ★
10 отзывов
37 МБ


Йомғаҡлау (аҡыллы балаҫ)
elenaranko.ucoz.ru


СЕРТИФИКАТ
ДИПЛОМ
ДИПЛОМ
ДИПЛОМ
ДИПЛОМ
elenaranko.ucoz.ru




**Нәбиева Гөлназ Рәис ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 52-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы**



## Уҡыусыларҙың этномәҙәни компетентлығын формалаштырыуҙа уңышлы алымдар

## Актуаллек

Интернет һәм техник саралар үҫешкән заманда халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре менән матур йолаларын тергеҙеү, телебеҙҙе һаҡлау, йәш быуынға еткереү – тел уҡытыусыларының изге бурысы.

**Этномәҙәниәт** – этнос вәкилдәренең ижтимағи-мәҙәни үҫеше барышында барлыҡҡа килгән матди, рухи, милли һәм эстетик байлыҡтарының тарихи йыйылмаһы, һәр бер халыҡтың быуаттар буйы тупланған рухи хазинаһы

Этномәҙәни компетентлыҡтың әһәмиәте педагогтар һәм психологтарҙың тикшеренеү эштәрендә яҡшы яҡтыртылған. Улар араһында Т.В.Поштарева, Г.Н.Волков, И.И.Вәлиев, К.Ш.Әхиәров, В.И.Баймурзина кеүек ғалимдарҙың хеҙмәттәре бар.



В.И.Хажин: «Туған тел уҡытыу концепцияһының нигеҙендә милли мәҙәниәт торорға тейеш»


Добро за добро
Good for Good
Утһыҙ
төтөн
булмай
Тел
һөйәкһеҙ


Өйөм –
ҡәлғәм
Мой дом –
моя крепост
My home is
my castle
Йөҙ һумың
булғансы,
йөҙ дуҫың
булһын
Не имей
сто рублей,
а имей
сто друзей
Better to have
a hundred
friends
than to have
a hundred
pounds



***«Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү фарыз: беренсеһе – үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды, белеү, икенсеһе – йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө – һандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү»***

1. Килтерелгән өҙөктөң йөкмәткеһен аңлат,
2. Аңлатмалы һүҙлектән аҫаба, ырыу, риүәйәт һүҙҙәренең мәғәнәләрен асыҡла,
3. Үҙ ырыуың төшөнсәһен нисек аңлайһың?
4. Йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу тигән һүҙҙәргә ниндәй мәғәнә һалынған?
5. Уҡыусылар менән ырыуҙар тураһында әңгәмәләшеү һ.б.










## Уҡыусыларҙың этномәҙәни йүнәлеш буйынса кластан тыш сараларҙа ҡатнашыу әүҙемлеге (%)






**«Дәрес» конкурс этабы**

**Ильясова Ләйсән Рафат ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 161-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Класс:*** 5 (3-сө линия).

***Тема:*** Ҡурай моңо. Һандар.

***Дәрес маҡсаттары:***

белем биреү: уҡыусыларҙы ҡурай музыка ҡоралы һәм билдәле ҡурайсылар менән таныштырыу һәм һандарҙы ҡабатлап китеү;

үҫтереүсе: уҡыусыларҙың бәйләнелешле һөйләү телмәрен һәм һүҙлек байлығын үҫтереү;

тәрбиәүи: уҡыусыларҙа мәшһүр ҡурайсыларыбыҙға ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо, ихтирам, тәрбиәләү, патриотик тәрбиә биреү.

***Дәрес төрө***: яңы тема өйрәнеү.

Йыһаздандырыу: тема буйынса слайдтар, ҡурай үҫемлеге һәм музыка ҡоралы, аудиояҙмалар, карта, йәбештереү өсөн ҡурай һүрәттәре.

***Дәрес барышы.***

| Дәрес этаптары | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Уҡыусы эшмәкәрлеге |
| --- | --- | --- |
| I. Уҡыу эшмәкәрлегенә әҙерлек.<br>Уңыш ситуацияһы тыуҙырыу. | *Сәләмләшеү. Уҡытыусы балаларҙы үҙе менән таныштыра һәм башҡорт теле дәресен алып барасағы тураһында әйтә. (1-се слайд “Визит карточка” )*<br>– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Хәйерле көн!<br>Мин Ильясова Ләйсән Рафат ҡыҙы буламын. Бөгөн һеҙҙә башҡорт теле дәресен алып барасаҡмын. | Уҡыусылар уҡытыусы менән һаулыҡ һораша. |

<table>
<tr>
<td></td>
<td>Әйҙәгеҙ әле телдәрҙе шымартып алайыҡ, уҡыусылар.<br>Артикуляцион күнегеү. (2-се слайд “Диалог”)<br>– Ҡурай!<br>– Әү.<br>– Ҡайҙа үҫтең?<br>– Урманда үҫтем.<br>– Уҡыусылар, ошо шиғыр юлдарында нимә тураһында һүҙ бара?<br>- Эйе, ҡурай үҫемлеге менән әңгәмәне ишетәбеҙ.</td>
<td>Слайдта бирелгән диалогты тәүҙә уҡытыусы уҡығанды тыңлайҙар, артабан хор менән уҡыла. Өсөнсө тапҡыр 1,3 юлдарҙы малайҙар уҡый, 2,4 – ҡыҙҙар.</td>
</tr>
<tr>
<td>II. Белемде актуалләштереү.</td>
<td>– Дәрестең темаһын асыҡлау өсөн кроссворд сисеп алайыҡ. (3-сө слайдта кроссворд бирелә)
<table>
<tr><td>Б</td><td>А</td><td>Ш</td><td>Ҡ</td><td>О</td><td>Р</td><td>Т</td></tr>
<tr><td></td><td></td><td></td><td>У</td><td>Р</td><td>А</td><td>Л</td></tr>
<tr><td></td><td>Г</td><td>Е</td><td>Р</td><td>Б</td><td></td><td></td></tr>
<tr><td></td><td>Ф</td><td>Л</td><td>А</td><td>Г</td><td></td><td></td></tr>
<tr><td></td><td>К</td><td>Ө</td><td>Й</td><td></td><td></td><td></td></tr>
</table>
1. Башҡортостандың төп халҡы.<br>2. Башҡортостан ниндәй тау һыртында урынлашҡан ?<br>3. Башҡортостан Республикаһының дәүләт символы.<br>4. Күк, аҡ, йәшел төҫтәрҙән тора.<br>5. Моң һүҙенең синонимы.<br>– Афарин! Ошо һүҙҙәрҙе ниндәй һүҙ берләштерә?</td>
<td>Уҡыусылар слайдта бирелгән кроссвордты сисә. Яуаптар экранда сығып бара.<br><br>– Ҡурай.</td>
</tr>
<tr>
<td>III. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу.</td>
<td>– Уҡыусылар, нимә ул ҡурай?<br>– Афарин, бик күп беләһегеҙ икән. Ҡурай – музыка ҡоралы. Уны ҡурай тип аталған үҫемлектән яһайҙар. (Ҡурай үҫемлеген күрһәтеү).<br>Ҡурай сәскәһе Башҡортостан Республикаһының дәүләт символдарында төшөрөлгән, Башҡортостаның ете мөғжизәһенең береһе.<br><br>– Бөгөн беҙ һеҙҙең менән ҡурай тураһында һөйләшәсәкбеҙ.<br>Тимәк, бөгөн беҙҙен алда ниндәй маҡсат? (Слайдта күрһәтелгән схема буйынса маҡсатты билдәләү).</td>
<td>– Музыка ҡоралы, үҫемлек, Башҡортостандың ете мөғжизәһенең береһе.<br><br>– Ҡурай.<br>Башҡортса яҙырға, уҡырға, тыңларға һәм аралашырға өйрәнәсәкбеҙ.</td>
</tr>
</table>

| | | |
|---|---|---|
| IV.Уҡыу мәсьәләһен сисеү. | – Дәрес барышында беҙгә кәрәк буласаҡ һүҙлеккә иғтибарҙы йүнәлтәйек. *(слайдта һүҙлек бирелә)*<br>*Һүҙлек эше.*<br>Ҡурай – курай<br>Ҡурайсы – кураист<br>Күп йыллыҡ – многолетний<br>Үҫемлек – растение<br>Сит илдәр – зарубежные страны<br>Сығыш яһаған – выступал<br>– Әйҙәгеҙ, яңы һүҙҙәрҙе ҡулланып һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр төҙөп алайыҡ *(уҡыусыларҙың телде белеү кимәленә ҡарап).*<br>– Ҡурай музыка ҡоралы ҡурай үҫемлегенән яһағандар. Үҫемлектең фәнни исеме Реброплодник уральский.<br>– Ҡурай менән яҡыныраҡ танышыр өсөн аудиояҙма тыңлап үтәйек.<br>– Текста ҡурай һүҙе нисә тапҡыр ҡабатлана икән? *(Аудиояҙма ҡуйыла, укытыусы ҡурай үләнен тотоп күрһәтә).*<br>– Текста ҡурай һүҙе нисә тапҡыр ҡабатланды?<br>– Өс тапҡыр.<br>– Ҡурай бер йыллыҡмы әллә күп йыллыҡ үҫемлекме?<br>– Күп йыллыҡ үҫемлек.<br>– Ҡурай ҡайҙа үҫә?<br>– Көнъяҡ Уралда, Башҡортостанда.<br>– Уҡыусылар, ә һеҙ ҡурай тауышын ишеткәне - геҙ бармы? Ҡурай моңон тыңлап бейеп ала-йыҡ әле.<br>***Физминутка эшләү***. Ҡурай көйөнә хәрәкәттәр яһап бейеп алыу (Слайдта ҡурайсы ҡурай уйнай, ҡурай көйө аудиояҙмала бирелә).<br>Ҡурай тауышын ишетеп,<br>Беҙ сығабыҙ болонға.<br>Ҡурайсы менән бергәләп<br>Йырлап-бейеп алырға. | Уҡыусылар яңы һүҙҙәр менән таныша, хор менән бирелгән һүҙҙәрҙе уҡый.<br><br>Уҡыусылар үҙҙәре-нең миҫалдарын килтерәләр.<br>*Ҡурайсы ҡурайҙа уйнай. Күп йылылык үҫемлек. Ҡурайсы сығыш яһаған. Һ.б.*<br><br>Уҡыусылар аудиояҙманы тыңлай. Һандарҙы ҡабатлап китеү.<br><br>Картаға ҡурай үҫемлегенең һүрәте йәбештерелә.<br><br>Уҡыусылар уҡытыусының артынан бейеү элементтарын ҡабатлай. |
| V. Белемде нығытыу (яңы белемде практикала ҡулланыу). | – Ҡурай моңо оҡшанымы?<br>– Ә кем ул ҡурайсы? Ҡурайсылар тураһында тексты уҡып китәйек (дәреслек 75-се бит, 20-се күнегеү).<br>*1. **Тексты укыу.***<br>Иғтибар итегеҙ, текста ниндәй ҡурайсылар тураһында һүҙ бара.<br>– Беҙ һеҙҙең менән сылбыр менән уҡыясаҡбыҙ.<br>2. Тексттың йөкмәткеһенең русса тәржемәһе менән эш («Miro» таҡтаһында тәржемә ителгән һөйләмдәр бирелә).<br>3. Йөкмәтке буйынса һорауҙар (5-7- се слайдттарҙа)<br>– Кем беренсе булып Европа илдәрендә булып сығыш яһаған? (Йомабай Иҫәнбаев). | Уҡыусылар үҙҙәренең хис-тойғоларын еткерә.<br><br>Уҡыусылар бирелгән эш төрҙәрен башҡаралар. |

| | | |
|---|---|---|
| | - Ниндәй ҡурайсылар ҡурай моңо менән күп халыҡтарҙы ҡыуандыра? (Ғата Сөләймәнов, Ишмулла Дилмөхәмәтов).<br>–Донъя картаһы буйлап Азат Айотҡоловтың ниндәй илдәрҙә ҡурай менән сығыш яһағанын билдәләп китәйек.Ҡурай һүрәттәрен донъя картаһы янына сығып йәбештерергә кәрәк буласаҡ. | Картаға ҡурайҙар йәбештерелә. |
| VI. Ял минуты. | Видеофильм ҡарап үтәйек. Ҡурай тураһында йәнһүрәт ҡарап алайыҡ. Йәнһүрәтте ҡарағандан һуң, эш карталарында диалог төҙөйәсәкбеҙ.<br>(**https://www.youtube.com/watch?v=iBKnyoHaKfc**)<br>Ҡурай тураһында диалог төҙөү (эш карталарында)<br>- Ҡурай ҡайҙа үҫә?<br>- Урманда.<br>- Һин ҡурай моңон тыңлағаның бармы?<br>- Эйе, бар.<br>- Ниндә ҡурайсыларҙы беләһең?<br>- Йомабай Иҫәнбаев, Ғата Сөләймәнов, Азат Айытҡолов. | Йәнһүрәт ҡарау. Йәнһүрәттең эстәлеге буйынса эш карталарында диалог төҙөү. |
| VII. Өйгә эш. | 1. Диалогты ятларға<br>2. Ҡурайсы темаһына ребус төшөрөргә.<br>3. Ҡурайсыларға арналған кроссворд эшләп | |
| VIII. Дәресте йомғаҡлау. Рефлексия. Баһалау. | Ҡурай һүрәте төшөрөлгән түңәрәктәр бирелә, ошо түңәрәктәргә уҡыусылар үҙбаһаһын ҡуя. Уҡытыусы уларҙың баһаһы менән килешеүе йә иһә килешмәүе тураһында әйтеп китә | Уҡыусылар үҙбаһа ҡуялар. |

**Ҡушымта. Тема буйынса слайдтар.**

1-се слайд “Визит карточка”.



2-се слайд “Диалог”.




3-сө слайд “Кроссворд”.



4-се слайд “Дәрескә маҡсаттар ҡуйыу өсөн терәк-схема”.




5-се слайд “Текст буйынса һорауҙар”.




Интерактив “Miro” таҡтаһындағы эш төрө.

miro

В дальнейшем наши выдающиеся кураисты Гата Сулейманов, Ишмулла Дильмухаметов радовали мелодией курая многие народы.

Башкирский курай знают и в зарубежных странах.

В странах Европы первым выступил со своим кураем Юмабай Исянбаев.

А заслуженный артист России, народный артист Башкортостана, лауреат Государственной премии имени Салавата Юлаева Азат Аиткулов дал послушать мелодию курая на сценах Дании, Финляндии, Канады, Австралии, Германии,Сингапура, Новый Зеландии, Афганистана, Южной и Северной Америки и Монголии.

Фотолар.






**Шаһабетдинова Элиза Тимур ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 124-се мәктәбенең**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Класс:*** 4 (3-сө линия).
***Тема:*** Һауа торошон белеү ниңә кәрәк? Рәүеш.
***Дәрес маҡсаттары:***

1) һауа торошо тураһында әңгәмә ҡороу, “Рәүеш” темаһын ҡабатлау;

2) уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен, хәтерен, үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу;

3) тирә-яҡҡа иғтибарлылыҡ, күҙәтеүсәнлек, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

***Йыһаздандырыу:*** тема буйынса слайдтар.

***Дәрес барышы.***

***I. Ойоштороу моменты.***

-Һаумыһығыҙ! Кәйефтәрегеҙ нисек? *(Ошо һүрәттәр менән кәйефтәрегеҙҙе күрһәтегеҙ)* Бер-беребеҙгә ҡарап йылмайҙыҡ һәм урындарға ултырайыҡ.
Танышып алайыҡ мин – Элиза Тимур ҡыҙы. Бөгөн һеҙҙә башҡорт теле дәресен алып барасаҡмын.
-Тышта ниндәй миҙгел? Ниндәй ай? Айҙың нисәнсе көнө? *(1 минут)*




***Артикуляцион күнегеү.***

Беҙ бөгөн дәрестә күп уҡыясаҡбыҙ, күп һөйләшәсәкбеҙ. Ә тәүҙә матур итеп башҡортса һөйләшер, уҡыр өсөн телдәрҙе шымартып алайыҡ.

*Ел иҫә,*
*Ел иҫә,*
*Иртән дә иҫә, кис тә.*
*Кемдең,*
*Кемдең күргәне бар*
*Ел була ниндәй төҫтә?*
*(Ш.Биҡкол)*



***II. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу.***

-Уҡыусылар, хәҙер бөтә иғтибарыбыҙҙы аудиояҙмаға йүнәлтәйек.
-Нимә тураһында һүҙ барҙы? Нисек уйлайһығыҙ?




-Тимәк, дәрестең темаһы? (Һауа торошо)
-Эйе, дөрөҫ. Һауа торошо.
-Дәрестең маҡсаты? (________________________________)

***III. Яңы материалды өйрәнеү. Уҡыу проблемаһын сисеү.***

-Уҡыусылар, иғтибар менән экранға ҡарайбыҙ, беҙ һеҙҙең менән тиҙ генә йомаҡтар сисеп алабыҙ.

Ҡыш буйы ятты - ятты ла, яҙын тороп сапты *(ҡар)*.
Йәйен томра эҫелә
Күгәреп болоттар килһә,
Тамсылар булып тамыр,
Был ни була? Был ... *(ямғыр)*.
Ялт-йолт ялтырай,
Ерҙең өҫтө ҡалтырай *(йәшен)*.

-Дәфтәрҙәрҙе асып бөгөнгө датаны һәм клас эшен яҙып ҡуйҙыҡ.

-<u>Таныш булмаған һүҙҙәр менән һүҙлек эшен эшләп алайыҡ.</u>




**IV. Һүҙлек эше:**

ҡояшлы көн – солнечный день
Болотло – облачный
Болотһоҙ – безоблачный
Ямғырлы – дождливый
Ҡар яуа – идет снег
Епшек ҡар – мокрый снег
Яуым-төшөм – осадки

-Бирелгән һүҙҙәр менән берәр һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөп ҡарайыҡ *(уҡыусылар уҡыйҙар)*.
- Беҙҙең төҙөгән һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр барыһы ла һауа торошона бәйле.
-Ә нимә ул һауа торошо?
-Был һорауға яуап табыр өсөн китаптың *90-сы битендәге 1-се күнегеүен сылбырлап уҡыйыҡ.*



Һауа торошо – ул билдәле бер ваҡытта теге йәки был урында булған тәбиғәт күренештәренең торошо. Һауа торошона тағы ла йәшен, томан, йәйғор кеүек тәбиғәт күренештәрен дә өҫтәргә була. Синоптиктар һауа торошо тураһында алдан мәғлүмәт әҙерләй.




Уҡыусылар, беҙҙең Өфөлә лә метеостанция бар.Ул Зорге урамында урынлашҡан.
-**Метеостанция**- ул ҡоро ерҙә урынлашҡан объект, һауа торошон, климатты күҙәтеү һәм һауа торошон, климатты күҙаллау өсөн мәғлүмәт биреү маҡсатында метеорологик үлсәүҙәр өсөн приборҙар һәм ҡорамалдар менән йыһазландырылған объект.



***Ял минуты.***

-Күп эшләп арып киткәнһегеҙҙер, ял итеп алайыҡ. Барыбыҙ ҙа матур итеп баҫабыҙ һәм минең арттан ҡабатлайбыҙ *(барыһы ла экранда сыға)*.

Ҡояш ҡарай йылмайып, *(ҡара-ҡаршы ҡарап, йылмайышалар)*
Иҫәләр йылы елдәр *(ҡулдары менән ел иҫкән хәрәкәт яһайҙар)*
Шатланып йылы көнгә,
Шуҡ турғайҙар бейейҙәр. *(тыпырлап алалар).*

***V. Яңы белемде ҡулланыу.***




-Хәҙер беҙ үҙебеҙ Башҡортостанда һауа торошо нисек икәнен билдәләп ҡарайбыҙ. Йәғни, метеоролог булып торабыҙ. Бының өсөн төркәмдәрҙә лабдиск ярҙамында эш башҡарабыҙ. Йәғни, "Башҡортостанда һауа торошо" тигән темаға проект эше булыр.

***Белемде нығытыу (яңы белемде практикала ҡулланыу).***

- Хәҙер дәреслектәрҙең 3-сө күнегеүен эшләйбеҙ.

Шиғырҙы күсереп яҙып, рәүештәр аҫтына һыҙабыҙ.

***VI. Дәресте йомғаҡлау. Эшмәкәрлеккә рефлексия.***

- Шулай итеп, бөгөн дәрестә нимә белдегеҙ?
- Нимә өйрәндегеҙ?




***VII. Өйгә эш.***

1. Яңы һүҙҙәрҙе ятларға.
2. Һауа торошо тураһында диалог төҙөп, яҙып килергә.
3. Һауа торошон белдергән һынамыштар, юрамыштар яҙырға.



***VIII. Баһалау.***

- Кеçә телефондарын алып, штрих-код ярҙамында инеп, үҙегеҙҙе дәрестә нисек эшләгәнегеҙҙе баһалағыҙ.

- Ошоноң менән дәрес тамам. Һау булығыҙ! Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!!!

**Бикташева Альбина Фәрит ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының Мөхәмәт Исҡужин исемендәге**
**136 - сы башҡорт лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Класс:*** 6 (1-се линия).

***Тема:*** Шәйехзада Бабич. «Башҡортостан» шиғыры.

***Маҡсат:***

Шәйехзада Бабичтың ижадына байҡау яһау һәм «Башҡортостан» шиғырының идея - тематик йөкмәткеһен өйрәнеү.

***Бурыстар:***

***а) уҡытыу:*** текстың йөкмәткеһен үҙләштереү, анализлау, тасуири уҡыу, һорауҙарға яуап биреү, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе үҙләштереү;

***б) үҫтереү:*** уҡыусыларҙың фекерләү эшмәкәрлеген, һөйләү телмәрен үҫтереү, текстҡа ҡарата үҙ фекерҙәрен әйтергә өйрәтеү,

***в) тәрбиәүи:*** тәбиғәт матурлығын, Башҡортостандың гүзәллеген күрә, тоя һәм һаҡлай белергә өйрәтеү, илһөйәрлек тойғоларын, текст аша йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;

***Йыһазландырыу:***

мультимедиа проекторы, дәрестең презентацияһы.

***Дәрес барышы.***

***I. Ойоштороу моменты.***

*Һаумыһығыҙ!*

*Һаумы, һаумы!*

*Һаулашам – сәләм бирәм,*

*“Һаумы” тигән һәйбәт һүҙҙе*

*Бар донъяға еткерәм .*

Әйҙәгеҙ, экранға ҡарап, бер – беребеҙҙе сәләмләйек.

- Бик яҡшы, ултырығыҙ.

Бөгөнгө дәресте мин, 136-сы башҡорт лицейы уҡытыусыһы Бикташева Альбина Фәрит ҡыҙы алып барасаҡмын.

Дәрестә бер-беребеҙгә ярҙам итеп, әүҙем ҡатнашып ултырырһығыҙ, тип ышанам.

***II. Тема һәм маҡсатты билдәләү.***

- Башта кроссенсты ҡулланып, өйгә эште тикшереп үтәйек. Бынын өсөн экрандағы һүрәттәргә бәйле ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрәйек.

**1-се һүрәт** - Был кемдең портреты? *(Эйе, башҡорт халҡының бөйөк шағиры Шәйехзада Бабичтың портреты).*

**2-се һүрәт** – был даталар Ш.Бабич менән нисек бәйләнгән? *(Ш.Бабичтың тормош йылдары).*

**3 – сө һүрәт** – Ниндәй районда тыуған, башланғыс белемен ҡайҙа һәм кемдән алған? *(Дүртөйлө районы Әсән ауылында, башланғыс белемде үҙ ауылы мәҙрәсәһендә атаһынан ала. Уҡырға йәшләй үк зирәк була ).*

**4-се һүрәт** – Был һүрәт Ш.Бабичтың тормош юлының ҡайһы ваҡыты менән бәйле? *(15 йәшенән ҡаҙаҡ далаларына сығып китә, бер йыл самаһы балалар уҡытып йөрөй)*

**5-се һүрәт** – Был мәҙрәсә Ш.Бабичтың тормош юлына ниндәй йоғонто яһай? Ниндәй мәҙрәсәлә уҡый? *(Белемен камиллаштырыу өсөн Өфөгә ҡайта һәм «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. <u>Уҡытыусы һәм остаз йылы</u>.)*

**6-сы һүрәт** – Ш.Бабичтың ошо шиғырынан алынған өҙөктө беҙ ҡайҙа осратҡаныбыҙ бар? *(«Ал да нур сәс халҡыңа һүҙҙәре» «Йәншишмә» гәзитенең девизы булып тора.)*

**7-се һүрәт** – был һүрәт нимә тураһында һөйләй? (*Граждандар һуғышы йылдарында Башҡортостанды бер яҡтан аҡтар, икенсе яғынан ҡыҙылдар талаңы. 1919 йылдың мартында Ш.Бабич фажиғәле рәүештә үлтерелә.*)

**8-се һүрәт** – Был ниндәй һәйкәл? ( *<u>Өфөлә</u> <u>2019 йылда</u> асылған һәйкәл. Шағир Шәйехзада Бабичтың исемен мәңгеләштереү маҡсатында ҡуйылған, премия, «Йәшлек» гәзитендә, урам).*

<u>Һуңынан айырым *9-сы һүрәтте* сығарам</u>

- Нимә күрәһегеҙ?*( Башҡортостандың картаһын).*
- Тимәк, нимә тураһында һөйләшәбеҙ? *( Башҡортостан тураһында).*

- Эйе, бөгөн беҙ дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры Шәйехзада Бабичтың Башҡортостан шиғыры менән танышасаҡбыҙ.
- Башҡортостан шиғырын өйрәнеү өсөн нимә эшләргә тейешбеҙ? *(Уҡып сығырға, тәржемә һәм анализ яһарға...)*
- <u>*Дәфтәрҙәребеҙҙе асып, бөгөнгө датаны, дәрестең темаһын яҙып ҡуяйыҡ.*</u>
- План буйынса эште башлайыҡ.

| | | |
|---|---|---|
|  | **1895 - 1919** |  |
|  |  | **ҠАҘАҠ ДАЛАЛАРЫ**<br> |
|  | **- Һис зарар юҡ, ал, - тине ай,**<br><br>**- Ал да нур сәс халҡыңа;**<br><br>**Мин дә бит төн хаҡына**<br><br>**Алдым ҡояштың нурҙарын.** |  |

**Сирбаева Яҙгөл Айрат ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының айырым фәндәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүсе**
**114-се белем биреү үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Класс:*** 4 (3-сө линия).
***Тема:*** Башҡортостандағы ауылдар һәм ҡалалар.

***Дәрес барышы.***

- ***I. Ойоштороу моменты.***

- Һаумыһығыҙ! Хәйерле көн, уҡыусылар! Шундай матур ҡыҙҙарҙы, батыр егеттәрҙе сәләмләүемә бик шатмын.

- Мин, Сирбаева Яҙгөл Айрат ҡыҙы, бөгөн һеҙҙә башҡорт теле дәресен үткәрәсәкмен. Бер-беребеҙгә күңел йылыһы биреп, бер-беребеҙгә ҡарап, йылы итеп йылмайыйыҡ әле.
-
- ***Артикуляцион күнегеү.***
- Әйҙәгеҙ, телдәрҙе шымартып алайыҡ. Беренсе тапҡыр мин уҡыйым, унан күмәкләп уҡырбыҙ.
-
- ***(Уҡыусылар хор менән уҡый).***
- Афарин! Уҡыусылар, һеҙ йәнһүрәт яратаһығыҙмы?
- Хәҙер мин һеҙҙең иғтибарға йәнһүрәттән өҙөк тәҡдим итәм. Тик һеҙ ошо йәнһүәрәткә ҡарап, бөгөн ни хаҡта һөйләшәбеҙ икәнен билдәләргә тейешһегеҙ.
  - *("Простоквашино" йәнһүрәтенән 2 минутлыҡ ҡала һәм ауыл тормошонан өҙөк күрһәтелә)*
- Күргәнегеҙ бармы был, йәнһүрәтте? Танышмы һеҙгә был?
- Нисек атала әле йәнһүрәт?
- Эйе, бар. Простоквашино.
- Йәнһүрәттә ниндәй ике күренешкә иғтибар иттегеҙ?
- Бер өлөшөндә ҡала, икенсеһендә ауыл күрһәтелә.
- Ә һеҙ ҡайҙа йәшәйһегеҙ?
- Ҡалала.
- Ниндәй ҡалала йәшәйһегеҙ?
- Өфө ҡалаһында
- Һеҙҙең ҡала ҡайҙа урынлашҡан?
- Башҡортостанда
- Һеҙ ауылға барғанығыҙ бармы?
- Эйе, бар
- Ауылда кемдәрегеҙ йәшәй?
- Туғандарым, олатайым, өләсәйем, инәйем, апайым...
- Һеҙгә ауылда оҡшаймы, әллә ҡалаламы?
- Миңә ауыл оҡшай. Миңә ҡала оҡшай.
- Таҡтаға иғтибар итегеҙ! Һеҙ унда ниндәй карта күрәһегеҙ?
- Башҡортостан картаһы.
- Тимәк, беҙ бөгөн нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?
- Афарин, уҡыусылар, матур, тулы яуаптарығыҙға! Беҙ бөгөн Башҡортостан ҡалалары һәм ауылдары тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Белемдәребеҙ менән үҙ-ара ярышасаҡбыҙ.
-
- Дәфтәрҙәрегеҙҙе асып, бөгөнгө дата һәм теманы яҙып ҡуйығыҙ. Беҙ бөгөн эш дәфтәре менән эшләйәсәкбеҙ. Иғтибар итегеҙ - һәр эштән һуң һеҙгә үҙ белемегеҙҙе лә баһалай барырға тура киләсәк. Поля ситендә һәр эш төрөнән һуң һеҙгә тамға ҡуя барыр кәрәк.
- "Мин был мәғлүмәтте беләинем".
- "Мин был мәғлүмәтте яңы дәрестә белдем".
- "Мин аңламаным".

*(Балалар дәфтәргә тема яҙа)*

- Беҙгә бөгөн дәрестә белем өләшеп йөрөүсе лә бар. Тик кем икәнен белер өсөн, бер эште башҡарыр кәрәк. Шул саҡта сер асылыр. Әйҙәгеҙ, алдығыҙҙа ятҡан пазлды төҙөйөк әле. Бөгөн ике команда эшләй. Ҡайһы команда етеҙерәк булыр икән?

*(Иғтибарҙы туплар өсөн пазл төҙөйҙәр)*



- Кем килеп сыҡты?
- Почтальон Печкин.
- Афарин, уҡыусылар! Тимәк, беҙгә бөгөн посылкалар - яңынан-яңы белем таратыусы почтальон Печкин буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта ул үҙе Башҡортостан ҡалалары һәм ауылдары тураһында һеҙҙән мәғлүмәт йыя үҙенә.
- *(Уҡытыусы такта мөйөшөнә Почтальон Печкин һүрәтен элеп ҡуя)*



-Тик килтергән посылкаларын буш ҡына өләшмәй икән. Һеҙҙең тырышлыҡ менән яулап алынасаҡ. Һеҙ әҙерме?

***II. Һүҙлек менән эш.***

-Ана нисек Почтальон Печкин беҙгә ашыға. Беҙгә ашыҡҡан саҡта, дәрестә өйрәнер яңы һүҙҙәрҙе тәржемәләре менән бутаған. Әйҙәгеҙ, парҙарын табайыҡ әле. Ике уҡыусы таҡтала эшләй. Башҡалар урында.

*(Ике командадан берешәр укыусы сығып, парланып таҡтала эшләйҙәр.Уҡытыусы ярҙам итә).*

-Афарин, уҡыусылар! Урындарығыҙға ултырығыҙ.

*(Һүҙлек өҫтөндә эш. Уҡытыусы укый, укыусылар хор менән укый. Яңы һүҙҙәрҙе күсереп яҙып алалар.)*

-Афарин, яны һүҙҙәр белдек, һүҙбәйләнештәр төҙөнөк. Белемгә яңы һүҙҙәр менән нигеҙҙәр һалынды. Шулай итеп, һеҙгә почтальон Печкин тәүге посылкаһын тапшыра.

*(Ике команда үҙ ватмандарына бирелгән һүрәтте йәбештерә).*

1. НИГЕҘ 1. ФУНДАМЕНТ

*Һүҙлектәге һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөү*

-Уҡыусылар, ә ауыл һәм ҡала тормошо ни менән айырыла? Әйҙәгеҙ, бирелгән һүрәттәрҙе яңы өйрәнгән һүҙҙәребеҙҙе ҡулланып, һүрәтләгеҙ әле.

*(Таҡтала эленгән һүрәттәрҙе ала баралар. Һөйләм әйтә баралар).*

Был ауыл. Ауылда саф һауа, матур тәбиғәт.



Был ҡала. Ҡалала бейек таш йорттар бар.



Был ауыл. Ауылда мал көтәләр.



-Афарин, уҡыусылар! Быны беҙ яңы һүҙҙәр менән һөйләмдәр ҙә төҙөнөк. Ә диалог төҙөй беләһегеҙме икән? Әйҙә, шуны ҡарайыҡ әле. Бирелгән диалог репликаларын билдәләп сығығыҙ.

***III. Диалог менән эш.***

-Сәләм! Мин Саша. Һинең исемең нисек?
-Сәләм! Мин Әлиә!
-Һин ҡайҙан килдең?
-Мин Башҡортостандан килдем.
-Миңә Башҡортостан тураһында һөйлә әле.
-Башҡортостан матур һәм бай республика. Башҡортостанда 54 район, 21 ҡала, 4434 ауыл бар.
-Ә иң ҙур ҡала нисек атала?
-Иң ҙур ҡала Өфө ҡалаһы. Өфө – Башҡортостан республикаһының баш ҡалаһы.
-Иң ҙур ауыл да барҙыр.
-Эйе, Ғафури районындағы Сәйетбаба ауылы - иң ҙур башҡорт ауылы. Ә Баймаҡ районында урынлашҡан Темәс ауылы - Башҡортостан Республикаһының тәүге баш ҡалаһы.
-Рәхмәт! Мин йәйгеһен Башҡортостанға ҡунаҡҡа барам.
-Бик яҡшы! Кил, көтәм.

*(Буталған репликаларҙы йыялар)*

-Афарин, уҡыусылар! Диалогты йыйҙығыҙ. Тимәк, Башҡортостанда нисә ҡала бар? Нисә ауыл бар? Иң ҙур ҡала ниндәй ҡала? Иң ҙур ауыл? Картала табып, флажок менән билдәләп ҡуяйыҡ әле. Иң ҙур район ниндәй район? Әйҙә, картала күрһәтәйек.

*(Тактала Өфө, Темәс, Сәйетбаба билдәләнә)*

-Афарин! Белемегеҙ өсөн бына һеҙгә почтальон Печкин посылка тапшыра.
*(Уҡытыусы командаларға өй стеналарын бирә. Уҡыусылар ватманға йәбештереп ҡуя.)*

2. Бүрәнәле стена 2. Кирбесле стена
*(Уҡыусылар ватманға йәбештереп ҡуя.)*

-Уҡыусылар, ҡарағыҙ әле, ҡыҙыҡлы ребус сисер кәрәк. Бәлки берегеҙ был хаҡта хәбәрҙарҙыр? Һүрәттә нимә күрәһегеҙ? Күмертау һәм вертолет? Был ни хаҡта һөйләй икән? Нефтекама һәм автобус, ә улар араһында ниндәй бәйләнеш бар? Ишембай һәм һүрәтләнгән ойоҡтар. Нимәне аңлата икән?
-Афарин, әйҙәгеҙ, картала билдәләп үтәйек.

*(Уҡыусылар, Нефтекама, Ишембай, Күмертауҙы билдәләй)*

-Бына тырышлығыҙ өсөн посылка алығыҙ.

3. Ҡыйыҡ 3. Ҡыйыҡ

***IV. Ял минуты.***

- Әйҙәгеҙ, арып киттек. Бер аҙ ял итеп алайыҡ. Баҫтыҡ. Ауылда ҡунаҡҡа ҡайтһағыҙ, туғандарығыҙға ярҙам күрһәтә beləhегеҙме икән? Ҡарайыҡ әле.

*(Йыр менән күнекмә)*

-Афарин! Эшкә лә, ялға ла сосһоғоҙ икән!

***Текст өҫтөндә эш.***

Башҡортостан – билдәле шәхестәр төйәге. Күпме батыр улдар һәм аҫыл ҡыҙҙар үҫтергән. Ҡырмыҫҡалы районында 112-се Башҡорт атлы дивизияһының командиры, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов тыуған. Ул бик белемле булған, бер нисә сит телдә һөйләшкән. 2022 йылда Өфөлә Совет майҙанында легендар генерал Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйылды.

*(Сынйырлап укыйҙар. Һорауҙарға яуаптар. Тактал Ҡырыҫҡа билдәләнә)*

-Кем ул Шайморатов генерал?
-Ул ҡайҙа тыуған?
-Уға 2023 йылда ниндәй ҡалала һәйкәл ҡуйылған?
-Афарин, тырышлығығыҙ өсөн. Бына киләһе посылка ла килеп етте.

*(Уҡыусылар ватманға ихата йәбештерәләр)*

4. Ауыл өйөнөң ишек алды Подьезд алды

Уҡыусылар, Почтальон Печкин беҙгә бер хат ҡалдырған. Тыңлағыҙ әле.
Әйҙәгеҙ, матур итеп яуап хаты яҙып ебәрәйек әле. Һеҙ Булатҡа ҡайҙа күсеп барырға кәңәш бирерһегеҙ икән.

***Аудиояҙма өҫтөндә эш.***

“Хат башы, яҙ ҡаршы!
Дуҫтар! Һеҙгә Айгөл исемле ҡыҙ хат яҙа. Беҙ Башҡортостанға күсеп ҡайтырға уйлайбыҙ. Тик ҡайһы ҡалаға йә ауылға ҡайтырға белмәйбеҙ. Дуҫтар, беҙгә кәңәш бирегеҙ әле. Һеҙҙән хат көтәм! Һау булығыҙ!
Сәләм менән Айгөл ”

-Уҡыусылар, аңланығыҙмы яҙманы?
-Ниндәй ҡалаға йә ауылға күсеп ҡайтһын? Ҡайҙа саҡырырһығыҙ?

***Ватманда яҙма эш.***

*(Бер команда ауылға саҡырып яҙа, икенсе команда ҡалаға саҡырып хат яҙа.)*

- Афарин, уҡыусылар. Кәңәшле ил-тарҡалмаç. Кәңәш биреп бик яҡшы иттегеҙ.

***V. Рефлексия.***

Бөгөн дәрестә нимә хаҡында һөйләштек?
Һеҙ, ҡыҙыҡлы булды, тип уйлайһығыҙмы дәресте? Билдәләрҙе эш дәфтәренән баһалармын.

***VI. Өйгә эш.***

*Афарин, уҡыусылар! Бөгөнгө өйгә эштәрҙе аңлатып үтәм.*

***VII. Баһалау.***

Бөгөн барығыҙ ҙа ҙур баһалауға лайыҡһығыҙ. Киләсәктә ҡайҙа йәшәһәгеҙ ҙә - ҡалаламы, ауылдамы - һеҙ илһөйәр, телһөйәр егет һәм ҡыҙҙар булып үçерһегеҙ, тип ышанам!

**Сағынбек Ильяс Жарҡымбек улы,**
**Өфө ҡалаһының 9-сы мәктәбенең**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

| | |
|---|---|
| **Класс** | 5 (3-сө линия). |
| **Дәрес темаһы:** | “Башҡорт халҡының милли аштары”. |
| **Дәрес төрө:** | Яңы материалды өйрәнеү. |
| **Дәрес маҡсаты:** | **Белем биреү**: милли аштар менән танышыу; тема буйынса яңы һүҙҙәр үҙләштереү; синонимдарҙы өйрәнеү;<br>**Үçтереүсе:** текстҡа таянып, һөйләү телмәрен үçтереү;<br>**Тәрбиәүи**: башҡорт милли аштарына ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙарын арттырыу. |
| **Йыһазландырыу:** | Мультимедиа проекторы**,** һүрәттәр, дәрес буйынса маршрут бите. |
| **Көтөлгән һөҙөмтәләр:** | **Предмет УУЭ һөҙөмтәләре**: тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, уларҙы бәйләнешле телмәрҙә ҡулланыу.<br>**Метапредмет (предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре**:<br>а) <u>регулятив</u>: уҡытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләү, булған белемдәрен дәрестә ҡуллана алыу, үҙ-үҙҙәрен баһалау;<br>б) <u>танып белеү</u>: Кюар кодтар менән эшләү; кластер төҙөү, маршрут биттәрен тултырыу;<br>в) <u>коммуникатив</u>: темаға ҡарата бәйләнешле телмәр төҙөй белеү, үҙ-ара аралашыу, бер-береһе менән хеҙмәттәшлек итеү.<br>**Шәхси УУЭ һөҙөмтәләре:** үҙаллылыҡ сифаттары үçтереү, туғандарына, дуçтарына, класташтарына иғтибарлы, ихтирамлы була |

| | |
|---|---|
| | белеү. |

*Дәрес барышы.*

***I. Ойоштороу моменты.***

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Миңә ___- се мәктәптә бик аҡыллы, белемле, тырыш уҡыусылар уҡый тинеләр. Шунлыҡтан мин һеҙгә дәрес үткәрергә килдем. Мин һеҙҙең кеүек шәп балаларға Өфөнөң 9-сы мәктәбендә башҡорт телен уҡытам, минең уҡыусыларым һеҙгә сәләм әйттеләр!

- Ултырығыҙ. Кәйефтәрегеҙ нисек? (Яҡшы, һәйбәт).

***Артикуляцион күнегеү.***

- Дәрестә һөйләшеү таҙа, матур, дөрөҫ булһын өсөн, телебеҙҙе шымартып башҡорт теленә күсереп алайыҡ. Унын өсөн беҙгә башҡорт өндәрен дөрөҫ итеп әйтергә кәрәк. Әйҙәгеҙ, ижектәрҙе бергәләп уҡыйыҡ.

*Ҡатыҡҡа ҡаймаҡты ҡалаклап-ҡалаклап ҡойҙом да ҡыуана-ҡыуана ҡояшҡа ҡуйҙым.*

- Уҡыусылар, был тиҙәйткестәге ҡатыҡ, ҡаймаҡ нимәләр ул? (Аҙыҡтар).
- Бик һәйбәт, әйе былар аҙыҡтар, тимәк беҙҙең бөгөнгө темабыҙ аҙыҡтар менән бәйле була, шулаймы? (Әйе).
- Ә хәҙер темабыҙҙы тағы ла нығыраҡ асыҡлар өсөн ошо видеоны ҡарап алайыҡ…
-

***II. Теманы асыҡлау.*** *Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу (видеояҙма ҡарау).*

- Видеояҙмала нимә бешерҙеләр? (Бишбармаҡ). Бишбармаҡ ниндәй аш? (Милли).
- Тимәк, бөгөнгө беҙҙең дәресебеҙҙең темаһы нисек атала? *Башҡорт халҡының милли аштары. (Таҡтаға датаны, теманы яҙыу).*
-

***III. Яңы материалды өйрәнеү. Әңгәмә*** *(фронталь һорау алыу).*

- Уҡыусылар беҙ тағын ниндәй башҡорт милли аҙыҡтарын беләбеҙ?
- Яуаптар.
- Милли аҙыҡтарҙы ниндәй ҙур өс төркөмгә бүлергә мөмкин?
- Ит аштары, һөт аштары, ҡамыр аштары.
- 1. Әйҙәгеҙ, улайһа, уларҙың ҡайһы берҙәре тураһында белемдәребеҙҙе тағы ла нығытыу маҡсатында КЮАР КОДтар менән эшләп алайыҡ ***(КЮАР КОД-тар менән эш).***
- Бик яҡшы, башҡорт милли аштары тураһында белемдәребеҙҙе тағы ла арттырҙыҡ.
- Әйҙәгеҙ яңы уҡыған һүҙҙәрҙе дәфтәрҙәргә яҙығыҙ.
-

***Һүҙлек һәм сағыштырыу эше:***

- бишбармаҡ – бесбармақ
- ҡорот - құрт
- бауырһаҡ - бауырсак
- ит - ет
- һөт - сүт
- ҡамыр - қамыр
- һурпа - сорпа

- тоҙ - тұз
- ҡаҙы -қазы

*- Бына күрәһегеҙме, беҙ башҡорт телен белһәк, башҡа төрки телдәрен дә һәйбәт аңлай башлайбыҙ...*

*Әйҙәгеҙ һүҙҙәрҙе ныҕыраҡ иҫтә ҡалдырып өсөн ошо һүҙҙәр менән диалог төҙөйөк.*

Мәҫәлән:

*- Мин бишбармаҡ яратам! Ә һин?*

*- Ә мин ҙур бәлеш.*

Ҡулланыр өсөн һүҙҙәр: *ҙур бәлеш, сәк-сәк, ҡорот, бал;*

***Интерактив уйын.***

*Баш-мир порталында https://bash-mir.ru/games/38/*

- Арып та киттегеҙ шикелле, әйҙәгеҙ, **ял итеп алайыҡ.**

***IV. Ял минуты.*** *ЭТО ЖЕ КОРОТ.*

- Дәреслегебеҙҙә лә ниндәй яңылыҡ бар икән?

***V. Дәреслек менән эш.***

102-се бит, 8-се күнегеү: *СИНОНИМДАР.*

Синонимдарҙы асыҡлау, дәфтәргә яҙыу. (Ашамлыҡ, аҙыҡ, ризыҡ).

Әйтелеше, яҙылышы төрлөсә булып та, мәғәнәһе буйынса оҡшаш һүҙҙәр **синонимдар** тип атала. **Мәҫәлән:** *татлы, шәрбәт, тоҙло, әсе.*

***VI. Йомғаҡлау, рефлексив анализ.***

- Уҡыусылар, шулай итеп: бөгөнгө дәресебеҙҙә беҙ нимәләр өйрәндек? Әйҙәгеҙ баһалау бауырһаҡтарын күрһәтәбеҙ: һәйбәт бешкән бауырһаҡ - күп нәмә белдем, уртаса бешкән бауырһаҡ - уртаса белемдәр алдым, насар бешкән бауырһаҡ - үкенескә ҡаршы, әҙ генә өйрәнә алдым.
- *Һеҙҙе ошо билдәләргә бәйле баһалайым.*

*Тимәк балалар, беҙ бөгөн һеҙҙең менән милли аштар тураһында бер аҙ мәғлүмәт белдек, бишбармаҡ менән башҡорттар ҙа ҡаҙаҡтар ҙа ҡәҙерле ҡунаҡтарын һыйлап килгән, был аш – муллыҡ, туҡлыҡ билдәһе, бишбармаҡ менән бер рәттән табында ҡорот та тоҙоҡ ролендә ҡуйылған, ә бауырһаҡ булһа, сәй менән бирелгән… Үҙебеҙҙең милли аштарҙы онотмайыҡ һәм уларҙың файҙаһын гел белеп йөрөйөк, хөрмәтле балалар!*

***VII. Өйгә эш.***

*1. Һүҙлек һүҙҙәре менән өс һөйләм төҙөргә.*
*2. Яратҡан милли аш тураһында мәғлүмәт яҙырға.*
*3. Табын темаһына һүрәт төшөрөргә.*

- Һеҙҙең менән танышыуыма ныҡ шатмын, һеҙгә ҙур рәхмәт, һау булығыҙ!

***Ҡушымта. Тема буйынса слайдтар.***

## Ун етенсе март



# Башҡорт халҡының милли аштары








## Һүҙлек (ҡаҙаҡ теле менән сағыштырыу)

Бишбармаҡ - бесбармақ

Ҡорот - құрт

Бауырһаҡ - бауырсақ

Ҡаҙы - қазы

Һурпа - сорпа (бульон)

Ит - ет (мясо)

Һөт - сүт (молоко)

Ҡамыр - қамыр (тесто)

Тоҙ - тұз (соль)


Бишбармак




-Һиңә ниндәй милли ризыҡ оҡшай?
-Миңә...
- Бишбармаҡ, ә һиңә?
Миçал өсөн һүҙҙәр: бәлеш сәк-сәк, ваҡ бәлеш, ҡаҙылыҡ, буҙа, ҡымыҙ.


ИНТЕРАКТИВ УЙЫН
МИЛЛИ АШ-ҺЫУ
РЕСУРСНЫЙ ЦЕНТР ПО НАЦИОНАЛЬНОМУ ОБРАЗОВАНИЮ



**Ҡорот** - байтаҡ төрки халыҡтарға хас һөт аҙығы. Ҡорот ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлеген көйләүсе шифалы ризыҡ. Ул С витаминына һәм башҡа файҙалы матдәләргә бай.

# ЯЛ МИНУТЫ




**102-се бит, 8-се күнегеү.**



Әйтелеше, яҙылышы төрлөсә булып та, мәғәнәһе буйынса оҡшаш һүҙҙәр **синонимдар** тип атала.



**Мәҫәлән:** *татлы, шәрбәт; тоҙло, әсе.*





**Бауырһаҡ** — ҡаҙанға, ҡыҙҙырылған һары майға һалып, даими болғатып, алтынһыу төҫкә кергәнсе бешерелгән, бәләкәй шар рәүешендәге ҡамыр ризығы. Ул йомшаҡ булырға тейеш.



## Өйгә эш:

1. Һүҙлек һүҙҙәре менән өс һөйләм төҙөргә.
2. Яратҡан милли аш тураһында мәғлүмәт яҙырға.
3. Табын темаһына һүрәт төшөрөргә.






**Әхмәдйәнова Фидания Тәфкил ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 94-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

| | |
|---|---|
| **Класс:** | 5 (3-сө линия). |
| **Дәрес темаһы:** | Аҙыҡ-түлек. |
| **Дәрес төрө:** | Яңы материалды өйрәнеү. |
| **Дәрес маҡсаттары:** | **Белем биреү:** тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, башҡортса бәйләнешле телмәр төҙөргә өйрәнеү.<br>**Үҫтереүсе:** башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеү, тасуири уҡыу, фекерләү һәләтен, тыңлап аңлау, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.<br>**Тәрбиәүи:** милли ризыҡтарҙы белеү, икмәккә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү. |
| **Көтөлгән һөҙөмтәләр:** | Предмет УУЭ һөҙөмтәләре: тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, телмәрҙә ҡулланыу.<br>Метапредмет (предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре:<br>а) регулятив: уҡытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләү, булған белемдәрен барлау, баһалау;<br>б) танып-белеү: кәрәкле мәғлүмәтте айыра, күрһәтә, дөйөмләштерә белеү;<br>в) коммуникатив: һөйләмдәр төҙөү, үҙ-ара аралашыу, уҡый белеү.<br>Шәхес булараҡ формалаштырыу УУЭ һөҙөмтәләре: хәҙерге йәмғиәттең интерактив методтар ярҙамында балаларға белем алыуға йүнәлеш алған, дәрестә башҡарған эштәре өсөн яуаплылыҡ тойоусы, тырыш, әҙәпле, белем алыуға ынтылыусы шәхес тәрбиәләү. |
| **Йыһазландырыу:** | Тема буйынса һүрәттәр, компьютер, проектор, мультимедиялы таҡта. |

| **Дәрес этаптары** | **Уҡытыусы эшмәкәрлеге** | **Уҡыусылар эшмәкәрлеге** | **Дәрестең һәр этабында формалаштырылған УУЭ (регулятив, танып белеү, коммуникатив, шәхес булараҡ** |
|---|---|---|---|

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | **формалаштырыу)** |
| I. Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу. | 1. – Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар, малайҙар!<br>– Һеҙҙе күреүемә бик шатмын.<br>- Мин Фидания Тәфкил ҡыҙы булам һәм бөгөнгө дәресте һеҙҙә мин алып барасаҡмын.<br>- Дәресте тел шымартыуҙан башлап ебәрәйек.<br>Ҡа-ҡа-ҡа<br>Ашанығыҙмы<br>**<u>бутка?</u>**<br>Мәк-мәк-мәк<br>Өҫтәлдең йәме<br>**<u>икмәк!</u>**<br>Ма-ма-ма<br>Яратамын<br>**<u>туңдырма...</u>**<br>Һаҡ-һаҡ-һаҡ<br>Күстәнәскә –<br>**<u>бауырһаҡ!!!</u>**<br>Афариндар!<br>Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ҡалын хәрефтәр менән билдәләнгән һүҙҙәр нимә берләштерә?<br>- Бик дөрөҫ билдәләнегеҙ, был һүҙҙәр аҙыҡ-түлек темаһына ҡарай. Тимәк, бөгөн дәресебеҙҙең темаһы – аҙыҡ-түлек.<br>Дәфтәрҙәребеҙҙе асып бөгөнгө датаны, теманы яҙып ҡуйҙыҡ.<br>*Ун бишенсе март.*<br>*Аҙыҡ-түлек.* | Уҡытыусы менән башҡорт телендә иҫәнләшәләр.<br><br>Телмәр аппаратын эшкә әҙерләйбеҙ.<br><br>Тыңлайҙар.<br>Бергәләп ҡабатлайҙар!<br><br><br><br>Балалар үҙ фекерҙәрен белдерәләр.<br>Теманы билдәдәйҙәр.<br><br>Дата һәм теманы дәфтәрҙәренә яҙалар. | Р.: үҙҙәренең уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора белеү, яҡшы, продуктив эшкә ынтылыш формалаша.<br>Ш.: белем алыуға, уҡыуға ҡарата ыңғай ҡараш формалаша. |
| II. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу. | - Һеҙҙең алдығыҙҙа карточкалар ята. Унда аҙыҡ-түлек темаһына ҡараған исемдәр буталып бирелгән. Шулар араһынан: ***Беренсе төркөм*** – | Төркөмдәрҙә эшләйҙәр.<br><br><br><br><br><br>Балалар яуап | Ш.: уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация, уҡыуға, яңылыҡ белеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ формалаша.<br>Р.: уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләргә өйрәнәләр. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | йәшелсәләрҙе, ***икенсе төркөм*** – һөт ризыҡтарын, ***өсөнсө төркөм*** – емештәрҙе йыя.<br>Һеҙгә 30 секунд ваҡыт.<br>- Был һүҙҙәрҙе һеҙ бик яҡшы белеүегеҙҙе күрһәттегеҙ. Уларҙы тормошоғоҙҙа йыш ҡулланаһығыҙмы?<br>-Тимәк, был һүҙҙәрҙе белеү бик кәрәк, тимәк – актуаль.<br>Ә бына беҙ ҡулланған ризыҡтар араһында иң ҡиммәтлеһе нимә?<br>- Дөрөҫ! Икмәк!<br>- Шулай итеп, бөгөн һүҙебеҙ – икмәк тураһында булыр. | бирә.<br><br>-Балалар үҙ фекерҙәрен белдерәләр. | Т.б.: логик фекер йөрөтөү, уҡыу мәсьәләһен табыу, күрһәтә белеү формалаша. |
| IV. Яңы материалды өйрәнеү. Уҡыу мәсьәләһен сисеү. | Хәҙер дәреслектәребеҙҙең 105-се битен астыҡ, 12–се күнегеүҙе таптыҡ.<br>Иғтибар менән тыңлайбыҙ һәм ҡарап барабыҙ. (Алдан яҙҙырылған тексты тыңлайҙар). 30 сек.<br>Балалар, текстың йөкмәткеһен аңланығыҙмы?<br>Ролик ҡарап алабыҙ. Иғтибар менән ҡарап барабыҙ. Һәр слайд һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдәр менән оҙатылып бара.<br>Хәҙер инде текстың йөкмәткеһе бөтәгеҙгә лә аңлашылғандыр, тип уйлайым. Шулаймы? | Дәреслек менән эш.<br>Аудиояҙманы тыңлайҙар.<br>Балалар яуап бирә.<br>Роликты ҡарайҙар.<br><br>Эйе.<br><br><br><br>Һүҙҙәре ҡабатлайҙар, дөрөҫ әйтелеш өҫтөндә эшләйҙәр.<br><br><br><br><br><br>Һорауҙарға яуап бирәләр. | К.: тыңлап һәм күреп текстың эстәлеген аңларға, башҡаларҙы тыңлай һәм әңгәмәгә ҡушыла белергә өйрәнәләр.<br>Т.б.: яңылыҡ белеүгә ынтылыш формалаша. |
| Ял минуты. | Яңы һүҙҙәр:<br>иген – хлеба, | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | ерҙе һөрәләр – распахивают землю,<br>ерҙе тырматыу – землю бороновать,<br>сәсәләр – сеют,<br>өлгөрә – созревает,<br>уралар – жнут (от слова жать),<br>һуғалар – молотят (от слова молоть),<br>он тартыу – молоть муку.<br>Текст буйынса һығымта яһап ҡуяйыҡ:<br>***Икмәк матур, тәмле генә булып өҫтәлебеҙгә килеп еткәнсе бик оҙон юл үтә икән!!!***<br>Ондан тик икмәк кенә бешерәләрме?<br>Һеҙ нимәләр яратаһығыҙ?<br>Үҙегеҙ бешереп ҡарағанығыҙ бармы?<br>Әйҙәгеҙ, бер аҙ ял итеп алайыҡ! | | |
| V. Белемде нығытыу. (практикала ҡулланыу). | Уҡыусылар, һеҙ **икмәк һүҙенең** башҡа **варианттарын** ишеткәнегеҙ, йә булмаһа ҡулланғанығыҙ бармы?<br>*Әпәй, әпей*<br>*Майикмәк*<br>*Көлсә*<br>*Сөсө икмәк - сөсөләй – ҡуликмәк*<br>*Әсикмәк*<br>*Ҡалас*<br>Башҡорт әҙәби теленән башҡа, диалект һүҙҙәр бар, ҡайһы бер осраҡта был һүҙҙәрҙе синонимдар урынына ҡуллана алабыҙ. Бигерәк тә ололар телмәрендә | Парлап эшләйҙәр.<br><br>Үҙҙәренең варианттарын әйтәләр<br><br>Икмәк музейы тураһында мәғлүмәт менән бүлешәләр.<br><br>Уҡыусылар мәҡәлдәрҙең дауамын табып, уҡтар ярҙамында тоташтыра, | Р.: уҡыу мәсьәләһен аңлау, ҡабул итеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү формалаша.<br>К.: һорауҙарға яуап бирергә, башҡаларҙы тыңларға, һөйләмдәр төҙөргә, әңгәмәгә ҡушылырға, үҙҙәренең фекерҙәрен әйтергә өйрәнәләр. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | йыш осрай.<br>**Балалар, һеҙҙең Блокада икмәге** тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Кюар код буйынса мәғлүмәт табып уҡыу.<br>**Икмәк – йәшәү сығанағы! Шуға ла уны ҡәҙерләргә кәрәк!!!**<br>Шуға күрә лә халҡыбыҙ икмәк тураһында бик күп мәҡәлдәр ҡалдырған. Беҙ уларҙы беләбеҙме, ҡарайыҡ әле.<br>1-се күнегеү. Мәҡәлдең дауамын табайыҡ.<br>Һәр төркөмдән бер уҡыусы таҡтала, ҡалғандар дәфтәрҙә эшләй. Таҡтала эшләгән уҡыусылар үҙҙәренең мәҡәлен уҡып ишеттерә. Яуаптың дөрөҫ булыу, булмауын билдәләйбеҙ, мәғәнәһен дә асыҡлап үтәбеҙ.<br>- Уҡыусылар, ребустар сисергә яратаһығыҙмы?<br>Бында ниндәй мәҡәл йәшеренгән икән?<br>Шулай итеп **“Икмәк – бөтәһенә лә баш!”**<br>Бергәләшеп эшләгәс, тиҙ генә был эштең дә осона сыҡтыҡ. Афарин, ҡыҙҙар һәм малайҙар!<br>Балалар, әйҙәгеҙ әле ошо һүҙҙәргә иғтибар итәйек:<br>**Ҡалас, аҡ ҡалас** – булка | мәғәнәһен асыҡлай.<br><br>Телмәребеҙҙә йыш ҡуллана торған һүҙҙәрҙе ҡабатлап, нығытып китәбеҙ.<br><br>Тексты уҡыйҙар, дәфтәрҙәге күнегеүҙе эшләйҙәр, бер-береһенең эштәрен тикшерәләр.<br><br>Телдән яуап бирәләр. | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | **Ҡара икмәк** – черный хлеб<br>**Арыш икмәге** – ржаной хлеб<br>**Бойҙай икмәге** – пшеничный хлеб<br>**Ҡомалаҡ икмәге** – хлеб на хмелю<br>**“Уңыш” , “Сулпан”** - “Уныш”. “Чулпан”<br>Дәфтәрҙәрҙә 2-се күнегеүҙе таптыҡ. Был күнегеүҙе үҙ - аллы эшләйбеҙ. Унда ни бары ике бирем.<br>1. Тексты иғтибар менән уҡып сығырға.<br>2. Һөйләмдә төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙырға.<br>Бөтәгеҙ ҙә эшләп бөттөгөҙ. Хәҙер күршегеҙ менән дәфтәрҙәрҙе алмаштыҡ, эштәрҙе тикшереп баһа ҡуябыҙ. Афарин! Эштәрегеҙ менән ҡәнәғәтһегеҙме?<br><br>Уҡыусылар, ә хәҙер ябай ғына һорауҙарға яуап биреп ҡарайыҡ әле.<br>Аҙыҡ-түлек магазинында?<br>Әсәй нимә һатып алды?<br>Ҡыҙы нимә алды?<br>Ә һеҙ магазинға йөрөйһөгөҙмө?<br>Икмәк һатып алғанығыҙ бармы?<br>Икмәк нисә һум тора?<br>Дәфтәрҙә эш. 3-сө күнегеү. Диалогты дауам ит. | | |

| | | | |
|---|---|---|---|
| VI. Өйгә эш. | 1. Шиғырҙы тасуири уҡырға.<br>2. Яңы һүҙҙәрҙе нығытырға.<br>3. Үҙегеҙҙең яратҡан ризығығыҙ тураһында мәғлүмәт (рецепт) әҙерләргә. | | |
| VII. Рефлексия.<br><br><br><br><br><br><br><br><br><br>VIII. Дәресте йомғаҡлау. | Уҡыусылар, бөгөн дәрестә бик актив булдығыҙ. Һеҙҙең менән эшләү миңә бик оҡшаны. Шуға ла барығыҙҙы ла тәмле бауырһаҡ менән һыйлайым. Дәрестә бөтә эштәрҙе лә еренә еткереп эшләүселәргә “5” билдәләре ҡуям.<br>Ә минең ҡулымда – ике гөлләмә. Һеҙгә ҡайһыһы нығыраҡ оҡшай?<br>- Ни өсөн?<br>- Балалар, күрәһегеҙме, башаҡтар күберәк булғас, ниндәй сағыу гөлләмә килеп сыҡты. Беренсе теләгем – берҙәм булайыҡ! Икенсеһе – бай булайыҡ, бар булайыҡ! Башаҡтар – муллыҡ, йәшәйеш символы. Тыуған еребеҙ киңлектәрендә иген баҫыуҙары мул уңыш бирһен! Сөнки ил ҡеүәте – икмәктә һәм берҙәмлектә!<br>- Дәрес тамам. Бөтәгеҙгә ҙур | -Уҡыусылар үҙҙәренең эштәрен баһалай.<br><br><br><br><br>Уҡыусылар яуап бирә.<br><br><br><br><br>-Һаубуллашалар. | Р.: үҙҙәренең эшмәкәрлегенә баһа бирә белеү, уҡытыусының баһаһына адекват ҡараш формалаша.<br>Ш.: үҙ-үҫеш, баһалау күнекмәһе үҫешә. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | рәхмәт. Һау булығыҙ!! | | |

**Ҡушымта. Тема буйынса слайдтар.**






## Блокада икмәге – йәшәү һәм өмөт сығанағы...




## ... бөтәһенә лә ...





## Икмәк бөтәһенә лә баш!



Өйгә эш.

1. Тексты тасуири уҡырға. 12-се күнегеү, 105-се бит.
2. Яңы һүҙҙәрҙе нығытырға.
3. Яраткан ризығың тураһында мәғлүмәт әҙерләргә.



**Нәбиева Гөлназ Рәис ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 52-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

**Класс:** 5 (3-сө линия).
**Тема:** Тыуған ерем. Яңғыҙлыҡ исемдәр
**Маҡсат:**
Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе иҫкә төшөрөү, ҡабатлау; Һабантуй байрамы тураһында мәғлүмәт биреү;
темаға ҡараған яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу;
тыуған ергә һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

| Дәрес этаптары | Уҡытыусының эшмәкәрлеге |
|---|---|
| I. Сәләмләү (10 сек ) | **СЛАЙД 1**<br>- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!<br>- Мин Нәбиева Гөлназ Рәис ҡыҙы. Һеҙҙе күреүемә бик шатмын. Бөгөнгө эшебеҙ бик уңышлы булыр тигән теләктә дәресте башлайыҡ. |
| II. Артикуляцион күнегеү (1 мин) | - Уҡыусылар, тышҡа күҙ һалығыҙ әле. Бөгөн көн нindәй? (ҡояшлы, яҙ килгән, күңелле)<br>- Эйе, бөгөн матур ҡояшлы көн. Хәҙер шул ҡояш кеүек бер-беребеҙгә ҡарап йылмаяйыҡ, бер-беребеҙҙе сәләмләйек.<br><br> |
| III. Теманы билдәләү (3 мин) | - Уҡыусылар, ә бөгөн беҙ һеҙҙең менән нимә тураһында һөйләшербеҙ икән? Теманы билдәләр өсөн, мин һеҙгә пазл йыйырға тәҡдим итәм.<br>- Йыйып бөттөгөҙмө? Кем пазлды таҡтаға сығып теҙергә һәм уҡып ишеттерергә теләй?<br>***Алтын-көмөш яуған ерҙән***<br>***тыуып үҫкән ил яҡшы***<br>- Рәхмәт, дөрөҫ. Руссаға нисек тәржемә ителә?<br>***Родная земля дороже злата и серебра***<br>- Рәхмәт. Ә был мәҡәлде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Как вы понимаете эту пословицу?<br>- Әлбиттә, шулай. Һәр кемгә үҙенең тыуған ере яҡын, матур.<br>- Уҡыусылар, ә һеҙҙең тыуған ерегеҙ нисек атала? (*тулы яуап* |

*бирһендәр)*

Беҙҙең тыуған *еребеҙ – **Башҡортостан***




- Ә Башҡортостандың баш ҡалаһы нисек атала?

Башҡортостандың *баш ҡалаһы – **Өфө***




- Бик яҡшы. Башҡортостандың тағы ниндәй ҡалаларын беләһегеҙ?

**Стәрлетамаҡ, Күмертау, Сибай, Нефтекама ҡалалары бар.**




- Уҡыусылар, ә был ҡалалар нимәһе менән билдәле, беләһегеҙме? *Чем эти города славятся?*
- Нефтекамала беҙ йөрөгән «Нефаз» автобустары сығарыла




Донъялағы иң тәрән карьерҙарҙың береһе Сибай ҡалаһында урынлашҡан. Уның тәрәнлеге 500 метр, киңлеге – 2 км.




- Күмертау ҡалаһында вертолеттар сығаралар




- Стәрлетамаҡта бөтә донъяға билдәле сода етештереү комбинаты

| | |
|---|---|
| | эшләй. <br> <u>*Башҡортостаныбыҙҙа бөтә донъяға билдәле ҡалалар бар. Беҙ улар тураһында белергә һәм ғорурланырға тейеш.*</u> <br>   <br> - Эшебеҙҙе дауам итәйек, уҡыусылар. Иғтибар экранға. <br> - Уҡыусылар, текста төрлө төҫтәр менән бирелгән һүҙҙәр тураһында нимәләр әйтә алаһығыҙ? *(Имена собственные и нарицательные – Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр).* <br> - Улар нисек яҙыла? *(Яңғыҙлыҡ исемдәр ҙур хәреф менән, уртаҡлыҡ исемдәр бәләкәс хәреф менән яҙыла).* <br> - Ә яңғыҙлыҡ исемдәргә нимәләрҙе индерәбеҙ? *(Что относим к именам собственным – кешеләрҙең исем-фамилияһын, ҡала, йылға, тау, китап-журналдарҙың исемдәрен һб).* <br> - Афарин, бик яҡшы. <br> - Шулай итеп, уҡыусылар, бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләп китәйек әле. Нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ икән? О чем будем говорить сегодня на уроке? <br> *(Тыуған ер һәм яңғыҙлык исемдәр тураһында)* <br> - Афарин, эйе. <br> - Ә хәҙер дәфтәрҙәрегеҙҙе асығыҙ, матур итеп бөгөнгө датаны һәм дәрес темаһын яҙып ҡуйығыҙ. Парта артында дөрөҫ итеп, тура ултырабыҙ. <br> *ТАҠТАЛА ЯҘ:* <u>*Тыуған ер. Яңғыҙлыҡ исемдәр.*</u> |
| IV. <br> Һүҙлек эше <br> (2 мин) | -Уҡыусылар, таҡтаға иғтибар итегеҙ. Унда бөгөнгө дәрестә кәрәк буласаҡ һүҙҙәр бирелгән: <br> *Үҙең матур итеп укы:* <br> Күккә олғашҡан – до небес <br> Көҙгөләй ялтырай – блестит как зеркало <br> Киң күңелле – с широкой душой <br> Һыйындырған – приютил <br> Үҙ ерҙәрен – свои земли <br> Милләт – национальность <br> Татыу – дружно <br> Ҡолға – шест <br> *Яңынан башҡорт һүҙҙәрен генә үҙең укы,* |

| | |
|---|---|
| | *уҡыусылар ҡабатлай артынҙан*<br><br>- Ә хәҙер, уҡыусылар, яңы һүҙҙәр менән тиҙ генә һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр төҙөп китәйек. |
| V.<br>Дәреслек буйынса эш<br>(4-5 мин) | - Бик яҡшы уҡыусылар, афарин.<br>- Хәҙер дәреслектең 68-се битен асып, 6-сы күнегеүҙе табығыҙ. Кем матур итеп тексты уҡып ишеттерергә теләй?<br>*(2 уҡыусы тексты ҡысҡырып уҡый)*<br>*Минең тыуған ерем – Башҡортостан. Башҡортостанда күккә олғашҡан тауҙар, ҡара урмандар күп. Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, Һаҡмар кеүек йылғалар аға. Асылыкүл, Ҡандракүл, талкаҫ күҙгөләй ялтырап ята.*<br>*Башҡортостан – күп милләтле республика. Бында башҡорттар, рустар, татарҙар, сыуаштар һәм башҡа милләт кешеләре үҙ-ара татыу, дуҫ йәшәй. Улар төрлө байрам һәм сараларҙы бергә үткәрә.*<br>- Яҡшы, рәхмәт.<br>- Уҡыусылар, текста ниндәй аңлашылмаған һүҙҙәр осраны?<br>- Беренсе абзацта һүҙ нимә тураһында бара? (Эйе, беҙҙең тыуған еребеҙ, Башҡортостан тураһында). Уның күлдәре, йылғалары күп.<br>- Икенсе абзацта нимә тураһында һүҙ бара? (Республикала халыҡтар дуҫ йәшәй, байрамдарҙы бергә үткәрәләр).<br>- Бик яҡшы, уҡыусылар.<br>- Ә хәҙер һуңғы һөйләмгә иғтибар итегеҙ әле. Республикабыҙ халҡы төрлө байрамдарҙы бергә үткәрә, тип әйтелгән унда. Ә республикабыҙҙың бөтә милләттәре лә берҙәм байрам иткән ниндәй байрамдарҙы беләһегеҙ?<br><br>*<u>Яңы йыл, Һабантуй, Рождество, Масленица, Нардуған</u>*<br><br>- Эйе, уҡыусылар, был байрамдар төрлө халыҡтарҙыҡы булһа ла, беҙ уларҙы бергә байрам итәбеҙ, эйеме?<br>- Ә Һабантуй тураһында нимә беләһегеҙ? Ул ҡасан һәм нисек үткәрелгән? *(яуаптарын тыңла)*<br>- Эйе, дөрөҫ, уҡыусылар.<br>- Һабантуй – Һабан байрамы (Праздник плуга) тигәнде аңлата. Ул, яҙғы баҫыу эштәре бөткәс, үткәрелә – проводится после весенних посевных работ. Хеҙмәтсәндәр ауыр эштән һуң ял итә, иң яҡшы хеҙмәт батырҙары бүләкләнә.<br>- Уҡыусылар, был байрамда төрлө ярыштар ҙа үткәргәндәр. |

| | |
|---|---|
| | <br><br>- Еңеүселәргә бүләктәрҙе алдан бөтә ауыл менән әҙерләгәндәр. Йәш егеттәр быына ошондай <u>ҡолға (шест)</u> тотоп, өйҙән-өйгә йөрөп, бүләк өсөн төрлө әйберҙәр йыйған – таҫтамал, яулыҡ һ.б. Байрам көндө уларҙы ярыш еңеүселәренә биргәндәр.<br>- Мин дә һеҙҙе бөгөн ярышҡа саҡырам. Дәрестә әүҙем, актив эшләп ултырһағыҙ, мин һеҙгә баһаларҙы ошо ҡолғаға эләсәкмен. Килештекме?<br>Әле тексты матур итеп уҡығанығыҙ, һорауҙарға тулы, матур яуаптар биргәнегеҙ өсөн мин һеҙгә беренсе бүләгемде бирәм.<br><br>*Ҡолғаға бүләк эл* |
| Текст менән эш<br>(2 мин) | <br>- Уҡыусылар, ә хәҙер текст өҫтөндә эште дауам итәйек. 1-се төркөм текстан – яңғыҙлыҡ, 2-се төркөм – уртаҡлыҡ исемдәрҙе дәфтәрҙәрегеҙгә яҙып алығыҙ<br><br>- Яуаптарығыҙҙы уҡып ишеттерегеҙ *(һәр төркөмдән 1-2 кеше уҡый).*<br>- Бик яҡшы, рәхмәт.<br><br>*ҠОЛҒАҒА бүләк эл* |
| Яңы белемде | - Уҡыусылар, һеҙҙең алда ошондай һөйләм төҙөү конструкторҙары ята. Шуны ҡулланып, һөйләмдәр яҙығыҙ. Һөйләмдәрҙә яңғыҙлыҡ исемдәр |

| | |
|---|---|
| практикала нығытыу<br>(4-5 мин) | булыуы мотлаҡ (используя конструктор, составьте предложения с именами собственными).<br>- Һөйләмдәрегеҙҙе уҡып ишеттерегеҙ *(2-3 һөйләмде тыңлап кит)*<br>- Бик матур һөйләмдәр килеп сыҡҡан. Әйҙәгеҙ, һәр төркөмдән берәр һөйләмде таҡтаға яҙып, яңғыҙлыҡ исемдәрҙең аҫтына һыҙайыҡ<br>*(таҡтала яҙалар, ярҙам ит)*<br><br>*Ҡысҡырып укыт яҙғанды*<br>- Афарин, ҡыҙҙар- малайҙар. Минән тағы бер бүләк<br>*ҠОЛҒАҒА бүләк эл*<br>- Ә хәҙер уйнап, ял итеп алайыҡ.<br>**ФИЗМИНУТКА**<br>*(музыка уйнай, укыусылар укытыусы артынан төрлө бейеү хәрәкәттәрен ҡабатлай)*<br>- Ҡалай матур бейейһегеҙ. Бүләк бирмәй булмай инде!<br>*ҠОЛҒАҒА бүләк эл* |
| VI.<br>Рефлексия<br>(2 мин) | - Афарин, бик күңелле итеп уйнап, ял итеп алдыҡ. Хәҙер иғтибар таҡтаға. Викторина һорауҙарына яуап бирәбеҙ.<br>**(яуаптарын йүгереп сығып блдәләйҙәр)**<br>- Бик яҡшы, уҡыусылар. Афарин. Ә минән – тағы ла бер бүләк<br>*ҠОЛҒАҒА бүләк эл*<br>- *Беҙҙең ҡолғабыҙ ҡалай бай!!!* |
| | - Уҡыусылар, дәрес һеҙгә оҡшанымы?<br>- Нимәләр белдегеҙ? Нимә өйрәндегеҙ?<br>- Һеҙҙең өсөн яңылыҡ булдымы?<br>- Яҡшы, рәхмәт. |
| VII.<br>Өй эше биреү<br>(1 мин) | - Уҡыусылар, хәҙер өйгә эш яҙып алығыҙ:<br><br> |
| VIII.<br>Йомғаҡлау<br>(5 мин) | - Уҡыусылар, ҡарағыҙ әле, беҙҙең ҡолғабыҙ ҡалай бай, матур, сағыу булып китте. Тимәк, һеҙ дәрестә тырышып эшләгәнһегеҙ! Ул һеҙҙең белемегеҙҙең баһаһы, дәрестәге эшегеҙҙең күрһәткесе бит! Бөгөнгө кеүек һәр ваҡыт та дәрестәрҙә тырышып эшләп, ошондай матур, бай |

баһалар алыуығыҙҙы теләйем.

- Уҡыусылар, хәҙер тағы берҙе тышҡа күҙ һалайыҡ.
  Тыуған еребеҙгә яҙ еткән, тәбиғәт уянған матур саҡ. Ошо яҙғы сағыу Ҡояш апайға мөрәжәғәт итеп, күңел түрендә йөрөткән иң изге теләктәребеҙҙе әйтеп, ошо ҡолғаға үҙегеҙҙең дә бүләктәрегеҙҙе элеп ҡуйығыҙ.

**Хәрәкәттәр күрһәт, бергәләп ҡысҡырып уҡығыҙ:**




*(уҡыусылар теләктәрен ҡысҡырып әйтәләр, ҡолғаға бүләктәрен эләләр)*

- Донъялар имен булһын!
- Ауырымайыҡ!
- Атай-әсәй һау булһын!
- Бәхетле булайыҡ!
- Дуҫтар күп булһын!
- Ҡояш йылмайып торһон!
- Ерҙә һуғыш булмаһын!
- Уҡытыусыларыбыҙ һау булһын!
- Яҡшы уҡыйыҡ!
- Башҡорт теле йәшәһен!
- Башҡортостан сәскә атһын!
- Халыҡтар дуҫ булһын!

- Афарин, уҡыусылар. Бик матур теләктәр әйттегеҙ. *Теләктәрегеҙ Хоҙайҙың "Амин!" тигән сағына тура килеп, ҡабул булһын, Алла бирһә.*
- Был ҡолғаны мин ошо кабинетта ҡалдырам. Ул кабинеттың ҡото булып, һеҙҙе яҡшы уҡырға, үҙегеҙ әйткәнсә, дуҫ, берҙәм булырға өндәп торһон. Һәр ваҡыт шулай күҙҙәрегеҙ осҡон сәсеп, йөрәгегеҙ дәртләнеп уйнап торһон.
- Һеҙҙең менән эшләү миңә бик оҡшаны Рәхмәт. Һау булығыҙ.

**«Кластан тыш сара» конкурс этабы**

**Ильясова Ләйсән Рафат ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 161-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Тема:*** Атайсалға изге ғәмәлдәр йылы (дәрес – йыйын).
***Маҡсат:*** Уҡыусыларҙа атайсалға ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Шәжәрәләр тураһында мәғлүмәт биреү, уҡыусыларҙа үҙҙәренең ғаиләһенең шәжәрәһенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

***Йыһазландырыу:*** тема буйынса слайдтар, глобус, ағас һүрәтен йыйыу өсөн карточкалар.

***I. Ойоштороу мәле.***

Сәләмләшеү.

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Барығыҙҙы ла “Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр” йыйынында сәләмләйем!

- Тыуған ерегеҙ?
- Башҡортостан!
- Милләтегеҙ?
- Башҡорт!
- Туған телегеҙ?
- Башҡорт теле!

***II. Белемде актуалләштереү.***

***1.*** Мәғлүмәти саралар менән бәйләнеш булдырыу, тәрбиәүи сараның актуаллеген билдәү**.**

– Башҡортостан Республикаһының башлығы, Радий Хәбиров, 2023 йылды “Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр йылы” тип иғлан итте. Һәр кем кесе Ватанына ниндәйҙер файҙа килтерерә ала, - тип яҙа “Йәшлек” гәзите 15.12.2022 һанында.

***2. Проблемалы һорау ҡуйыу. Әңгәмә ойоштороу.***



– Уҡыусылар, ә нимә ул атайсал? (слайдта логотиптар бирелә). Ул ҡайҙа урынлашҡан? (глобусҡа күрһәтеү)
– Минең атайсалым ҡайҙа? Уҡыусылар, һеҙҙең алдығыҙҙа сәскә формаһында булған карточкалар ята, шул карточкаларға үҙегеҙҙең атайсалығыҙҙы яҙып, таҡтаға сығып йәбешетереп ҡуйығыҙ.

Уҡыусылар сәскә һүрәттәренә үҙҙәренең ҡалаһын, олаталары-өләсәләре йәшәгән районларҙы, ауылдарҙы яҙа. (Уҡыусылар үҙҙәренең сығышы менән Башҡортостандың ниндәй районларынан икәнен әйтәләр). Проект эшенең тәүге өлөшө - ергә карточкаларҙы беркетәләр.



– **Уҡыусылар, беҙ атайсалыбыҙ сәскә атһын өсөн ниндәй изге эштәр башҡара алабыҙ? (Экранда слайд бирелә)**




Уҡыусылар слайдҡа ҡарап яуап бирәләр.

***III. Дәрестең маҡсатын билдәләү.***

– Эйе, бик күп изге эштәрҙе беләһегеҙ икән. Бөгөн һеҙҙең менән атайсалыбыҙҙа "Изгелек ағасын" үҫтерәсәкбеҙ.
– Уҡыусылар, ә башҡорт халҡының тарихында ағас менән бәйле нимәләрҙе хәтерегеҙгә төшөрә алаһығыҙ? (уҡыусылар яуап бирә).

– Шәжәрә, башҡорт ырыуҙарының ағасы булған.

**IV. Төп өлөш.**

**1. Шәжәрә менән таныштырыу.**

– Шәжәрәләге ағастың тамырҙары халҡыбыҙҙың үткәне, олоно – бөгөнгөбөҙ, ботаҡтары – киләсәгебеҙ булған. Беҙҙең “Изгелек ағасыбыҙ”ға иғтибар итәйек әле. Уның да тамырҙары тыуған ергә береккән. Улар шундай көслө. Уҡыусылар, ә һеҙҙең тамырҙарығыҙ кемдәр? (Яуаптар) Шәжәрә – нәҫел тарихы тигәнде аңлата. Башҡорттарҙа һәр кешенән үҙенең ете быуынын белеү талап ителгән.

Кем булған олатайың,
Олатайыңдың атаһы?
Уларҙан тыш нәҫелеңдә,
Йә, кемдәр булған тағы?

– Изгелек ағасының тамырҙары ныҡлы булһын өсөн олатайҙарығыҙ тураһында һөйләп китегеҙ *(уҡыусылар карточкалар буйынса һөйләй)*.
– Афарин, ҡалай яҡшы беләһегеҙ үҙегеҙҙең тамырҙарығыҙҙы.
– Берәүҙәр ата-бабаларының исемдәрен хәтерендә йөрөткән. Икенселәре исемләп яҙа барған. Шәжәрәне берәүҙәр ағас, икенселәре ағас ҡояш рәүешендә эшләгән. Ҡайһылары ябай яҙманан торған. Бына, этно күргәҙмәгә ҡарағыҙ әле. Бына бында мин үҙемдең шәжәрәмде алып килдем (*күргәҙмә менән таныштырыу).*
– Мин үҙемдең сығышым менән ғорурланам. Беҙҙең ғаилә – педагогтар династияһынан.
– Әйҙәгеҙ хәҙер, уҡыусылар, шәжәрәләр тураһында шиғри юларҙы уҡып китәйек. (Уҡыусылар шәжәрә тураһында яҙылған плакаттарҙы уҡый һәм таҡтаға элә баралар).
–




***Плакаттар:***
*Шәжәрәмдә - сал тарихы бабаларҙың,*
*Бөгөнгөм дә, киләсәгем, балаларым.*

*Шәжәрә - ул сал тарихҡа бағыр тәҙрә,*
*Күҙ яҙҙырһаң, шул тәҙрәнән атыр йәҙрә.*

*Шәжәрә ул йәшәү тантанаһы,*
*Һулар һауа, тупраҡ, ғәзиз ер,*

*Ул тамырым буйлап аҡҡан ал ҡан,*
*Бороңғо ла, йәш тә, хәҙерге.*
Һығымта. Үҙендең шәжәрәңде өйрәнеү, уны дауам итеү изге эшме уҡыусылар?

2. ***Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады менән эшләү.***

Ағастың олоно – ул бөгөнгөбөҙ. Ул һеҙҙең ата-әсәләрегеҙ. Ул һеҙҙең ғаиләгеҙ. Һеҙҙең алдығыҙҙа төрлө темаға арналған мәҡәлдәр ята, шуларҙың араһынан ғаилә мөнәсәбәттәре тураһында мәҡәлдәрҙе табып ағас олонона беркетәйек.

Мәҡәлдәр яҙылған карточкалар:

*Татыу ғаилә – ил күрке.*
*Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе.*
*Ул – һөйөнөс, ҡыҙ – ҡыуаныс.*
*Малайға тәрбиә биреп - ил тәрбиәләйһең,*

*Ҡыҙға тәрбиә биреп - милләт тәрбиәләйһең.*
*Байлыҡ – бер айлыҡ, һаулыҡ – ҙур байлыҡ.*

***Атайсалға изге эштәр.***

– Ағасыбыҙҙың ботаҡтары япраҡ ярырға ваҡыт етте. Ағас ботаҡтарын япраҡтарына һеҙ атайсалығыҙға киләсәктә ниндәй эштәр эшләргә теләр инегеҙ - шуны яҙығыҙ һәм ағастың ботаҡтарына йәбештерегеҙ. (Уҡыусылар атайсалға эшләйәсәк изге эштәре тураһында ҡул формаһында киҫелгән япраҡтарға яҙып, ағасҡа беркетеп баралар).
– Уҡыусылар, ҡарағыҙ әле беҙҙең “Изгелек ағасыбыҙ” ҡалай матур булып үҫеп китте. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ә ни өсөн уның япраҡтары ҡул формаһында? (яуаптар).

**V. *Рефлексия.***

- Эйе, сөнки киләсәк уҡыусылар һеҙҙең ҡулда. Киләсәктә эшләйәсәк изге эштәрегеҙ еңел булһын өсөн берҙәм булығыҙ. Әйҙәгеҙ, түңәрәк яһап ҡулға ҡул тотонайыҡ.
- Ҡарағыҙ әле, мин глобус тотоп торам. Түңәрәктең уртаһына килеп глобусты барығыҙ ҙа тотоп тороғоҙ. Уҡыусылар, һеҙ үҫеп төрлө яҡтарға таралырһығыҙ, бәлки. Төрлө һөнәр эйәләре булырһығыҙ. Тик һәр ваҡыт атайсалығыҙҙы, тамырҙарығыҙҙы иҫегеҙҙә тотоғоҙ. Атайсалығыҙға ҡайтып изге эштәр башҡарығыҙ.
-



**Сағынбек Ильяс Жарҡымбек улы,**
**Өфө ҡалаһының 9-сы мәктәбенең**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Тема:*** Атайсалға изге ғәмәлдәр йылы.
(тәрбиәүи сәғәт)

***Маҡсат:*** Уҡыусыларҙа атайсалға ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

***Йыһазландырыу:*** тема буйынса слайдтар, ҡурай һүрәтен йыйыу өсөн карточкалар.

**I. *Ойоштороу мәле.***

Сәләмләшеү.

– Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Барығыҙҙы ла тәрбиәүи сәғәттә күреүемә шатмын!
– Әйҙәгеҙ ошо видеояҙманы ҡарап үтәйек.
–



- Видеола нимәләр күрҙек? (Тәбиғәт, тыуған ер).
- Әйе, тыуған ер, ошо төшөнсәне икенселәй нисек атарға мөмкин - кем белә?
- (Атайсал!)
- Әлбиттә, дөрөҫ әйтәһегеҙ!

***II. Белемде актуалләштереү.***

1. Яңы мәғлүмәт аша тәрбиәүи сәғәттең актуаллеген билдәү.

– Бөгөн мин һеҙҙе «Атайсал» проекты менән таныштырам, ул беҙҙең Башҡортостан Республикаһында, ил башлығы, Радий Хәбиров, быйыл иғлан иткән “Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр йылы” тигән ҡарар сиктәрендә барлыҡҡа килгән ҙур проект.



2. Проблемалы һорау ҡуйыу. Әңгәмә ойоштороу.

– Уҡыусылар, әйҙәгеҙ тағын бер видеояҙманы ҡарап алайыҡ.

–



– Ниндәй тауыштар ишеттек? (һыу аға, урман шаулай, һ.б. ).
– Ә хәҙер күҙҙәрегеҙҙе 30 секундҡа йомоғоҙсы? Тынлыҡ, эйеме?
– Уҡыусылар, әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙең атайсалыбыҙҙы яҡламаһаҡ, беҙ ваҡыт үтеү менән тәүге видеола ишеткән тауыштарҙы ишетмәй ҡалыу хәүефе бар.

Беҙҙең ағай-апайҙар тәбиғәтте яҡлау, һаҡлау өсөн ниндәй эштәр башҡаралар икән? Танышып китәйек («Атайсал» проекты).




– Тимәк атайсалыбыҙ тәбиғәтен яҡлар өсөн беҙ һеҙҙең менән ни эшләй алабыҙ?
– Ошо һорауға һеҙ нисек яуап бирер инегеҙ?
– Таҡтала ҡурай таждары эленгән. Алдығыҙҙа ятҡан таждарға файҙалы эш төрҙәрен яҙып таҡтаға магнит менән йәбештерәбеҙ. *(14 бала, 2 кешенән 7 төркөм булдыра, һәр бер төркөмгә берәр һорау бирелә, мәҫәлән: урманды һаҡлау өсөн ни эшләй алам, оло йәштәге кешеләр өсөн ни эшләй алам? Яуаптарҙы таждарға яҙалар.*



– Афарин балалар! Барығыҙ ҙа изге эштәр эшләргә әҙер икәнлегегеҙҙе күрһәттегеҙ!
– Тимәк, беҙ бәләкәй генә булһаҡ та, бик ҙур эштәр башҡара алабыҙ!
– Ә хәҙер әйҙәгеҙ башҡорт халҡының гимны булып киткән “Уралым” йырын баҫып тыңлап алайыҡ.



- Атайсалыбыҙ йәшәһен! Ҙур рәхмәт! Һау булығыҙ!

**Әхмәдйәнова Фидания Тәфкил ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 94-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Тема:*** Атайсалға изге ғәмәлдәр йылы.

Изгелек булһын атығыҙ!
Изгелек булһын атығыҙ!
Кеше булһын затығыҙ;
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ! (“Урал батыр” эпосы).

- Һаумыһығыҙ, балалар.

Һеҙ йәнһүрәттәр яратаһығыҙмы?
Әңгәмәбеҙҙе бөгөн бер йәнһүрәттән өҙөк ҡарауҙан башлайыҡ. Был йәнһүрәт “Доньяны нисек ҡотҡарырға?” тип атала.
Иғтибар экранға.







- Таныш әңгәмәме? Үҙегеҙҙе күрәһегеҙме?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- Һеҙҙең дә әсәйҙәрегеҙ менән ошондай һөйләшеүҙәр булғаны бармы?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...

Балалар, Азаматтың әсәһе һеҙгә оҡшанымы? Һеҙҙең әсәйҙәрегеҙ ҙә шундай иғтибарлы, хәстәрлекле һәм дә һеҙҙе яраталыр, тип уйлайым.
Беҙ Азамат менән танышыуҙы дауам итәбеҙ.



- Һеҙҙең дуҫтарығыҙ бармы?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- Ә вертуаль дуҫтарығыҙ?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- Ни өсөн Ләйсән Азаматты зомби тип атай?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- Һеҙгә ошондай Азамат оҡшаймы?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- Ә Ләйсән оҡшанымы?

Ләйсән бына нимә ти беҙгә, тыңлап ҡарайыҡ әле!




- Уҡыусылар, һеҙ Ләйсәндең фекере менән килешәһегеҙме?
- Уҡыусыларҙың яуаптары.
- Ләйсәндең һүҙҙәре һеҙҙе битараф ҡалдырмағандыр тип уйлайым. Был проблема һеҙҙе лә борсойҙор, тип уйлайым.

Мин һеҙгә ике һорау әҙерләнем, QR- код ярҙамында гугл формала яуап биреп үтегеҙ әле.

1. Тәбиғәтте күберәге кемдәр бысрата:
   а) балалар, үҫмерҙәр
   б) йәштәр
   в) өлкәндәр
2. Тәбиғәттең бысраныу сәбәптәре?
   а) кешеләрҙең тәрбиә кимәленең түбән булыуы
   б) сүп һауыттарының етерлек кимәлдә булмауы

Рәхмәт яуаптарығыҙға. Һеҙҙең фекерҙәр минең өсөн бик мөһим (яуаптарҙы анализлап китәм).

- Тәбиғәт – беҙҙең йәшәү урыныбыҙ. Ул беҙҙе һоҡландыра, тынысландыра, моңландыра, ашата, кейендерә, дауалай. Уның файҙаһын күп күрәбеҙ. Ә һеҙ тәбиғәтебеҙгә файҙа килтерә алаһығыҙмы?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- 2023 йыл Башҡортостаныбыҙҙа “Атайсалға – изге ғәмәлдәр” йылы тип иғлан ителде. Был турала ишеткәнегеҙ булдымы? Ғөмүмән, Атайсал һүҙен нисек аңлайһығыҙ?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- Һеҙ бик дөрөҫ уйлайһығыҙ, афарин! Шулай уҡ һеҙ ирекмәндәр тураһында ла беләһегеҙҙер, тип уйлайым. Сөнки декабрь айында ғына ошо темаға берҙәм класс сәғәттәре үтте. Һеҙҙең арала ирекмәндәр бармы?
- Уҡыусыларҙың яуаптары...
- Улар бик күп йүнәлештә эштәр алып баралар. Ошо ирекмәнлек эше күптәргә буласаҡ һөнәрен һайларға булышлыҡ итә. Мин һеҙгә үҙебеҙҙең мәктәп ирекмәндәре тураһында ролик ҡарап алырға тәҡдим итәм.




- Күреүегеҙсә,  ирекмәндәр төрлө йүнәлештә бик файҙалы эштәр башҡаралар. Был бит һәр беребеҙҙең ҡулынан килә. Һеҙҙең арала ирекмәндәр бармы? Мин һеҙгә ирекмәндәр хәрәкәте тураһында мәғлүмәттәр тупланған буклеттар әҙерләнем. Һеҙ улар менән аҙаҡ иркенләп таныша алаһығыҙ. Әйткәндәй, 14 йәштән ирекмән кенәгәһе алырға мөмкин. Унда һинең ниндәй сараларҙа ҡатнашыуыңды теркәп барасаҡтар. Ирекмәндәрҙең эштәре юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингәндә өҫтөмә балл бирә.

- Һеҙҙең алда ирекмәндәрҙең символы ята, бөгөнгө әңгәмәнән һуң һеҙҙең “Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр” башҡарыу, йәки ирекмәндәр хәрәкәтенә ҡушылыу теләге барлыҡҡа килһә,  ошо йөрәктәрҙе матур итеп йәбештереп ҡуйығыҙ. Шунда уҡ Атайсалға ниндәй изге ғәмәлдәр ҡылыр инегеҙ - яҙып ҡуйығыҙ.




Күреп торам, бөтәгеҙ ҙә изге ғәмәлдәр ҡылырға әҙерһегеҙ, афарин! Был бик ҡыуанысլы: һеҙҙең изгелекле, игелекле, ихлас, ярҙамсыл икәнегеҙҙе  күрһәтә. Берҙәмлектә – көс икәнен иҫегеҙҙән сығармағыҙ!
Беҙҙең әкиәт геройы Азамат  ни эшләй икән? Белгегеҙ киләме? Һеҙ был йәнһүрәттең тулы вариантын өйгә ҡайтҡас ҡарай алаһығыҙ. Мин һеҙҙең һәр берегеҙгә башҡорт

йәнһүрәттәрен еңел генә табыу өсөн QR - код тупланған ошондай китапсыҡтар бүләк итәм! Ял ваҡыттарығыҙҙа ғаиләгеҙ менән ҡарай алаһығыҙ.

- Бөгөнгө әңгәмәбеҙҙе мәшһүр “Урал батыр” эпосынан өҙөк менән йомғаҡлап ҡуяйыҡ:




Бөгөнгө әңгәмәлә әүҙем ҡатнашҡанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Атайсалдың лайыҡлы ул һәм ҡыҙҙары булып үҫерһегеҙ тигән өмөт - теләктәр менән һаубуллашам. Уңыштар һеҙгә! Һау булығыҙ!

**Нәбиева Гөлназ Рәис ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 52-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Тема:*** Атайсалға изге ғәмәлдәр йылы.
(кис ултырыу)
***Маҡсат:*** Башҡорт халҡының милли кейемдәре менән таныштырыу;
уҡыусыларға үҙ халҡының тарихи һәм мәҙәни ҡиммәтәрен аңларға ярҙам итеү;

Атайсалға ихтирам, уға һөйөү, бер – береңә дуҫлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

<u>*Ҡыҙҙар ярымтүңәрәк булып ултырған*</u>

Гөлназ Рәис ҡыҙы килеп инә:

- Оой, ҡыҙҙарым йыйылған бит. Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар.
- Һаумыһығыҙ, Гөлназ апай.

<u>*Күлдәген өйөрөлөп күрһәтә*</u>

- Минең күлдәгем оҡшаймы һеҙгә, ҡыҙҙар? Матур бит, эйеме?
- Ә был ниндәй халыҡтың милли кейеме, беләһегеҙме? (башҡорт)
- Әлбиттә, был башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейеме.
  Һәр халыҡтың милли кейеме, борондан килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре бар. Улар уны һаҡлап, быуындан-быуынға тапшыра килә.

*(курсаҡтар янына бар)*

- Ҡыҙҙар, ә кейемгә ҡарап кешенең милләтен билдәләп буламы?
- Эйе, әлбиттә. Әйҙәгеҙ әле, ошо ҡурсаҡтарҙың милләтен билдәләп ҡарайыҡ

*(бергәләп милләтен билдәләгеҙ)*

- Бик яҡшы, ҡыҙҙар. Ә бөгөн беҙ һеҙҙең менән башҡорт халҡының милли кейеме тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Борон башҡорттарҙың, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙың кейгән кейеменә ҡарап, уның тураһында бик күп мәғлүмәт белеп булған.



- Экранға иғтибар итегеҙ әле. Ошо ҡыҙҙар нимәһе менән айырыла? Уларҙың кейеменә ҡарап, улар тураһында нимә әйтеп була, кем белә?
- Беренсе ҡыҙ кейәүгә сыҡмаған. Беҙ быны баш кейеменә һәм сәсенә ҡарап әйтә алабыҙ – кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар сәсен икегә ярып үргән. Кейәүгә сыҡҡан көндә уның сәстәрен тағатып, бер толом итеп үрер булғандар һәм башына толомон ҡаплап торған ошондай баш кейемен – ҡашмау кейҙергәндәр.



- Ҡашмауҙы тәңкәләр, таштар, ҡабырсаҡтар менән биҙәгәндәр. Ҡашмау сәсте яман күҙҙән, ҡара көстәрҙән ҡаплаған. Шулай уҡ кейемдәге тамғаларға ҡарап, уның затырыуын билдәләп булған. Ә был бик мөһим булған. Шулай уҡ ҡыҙҙың ғаиләһенең матди хәлен, йәғни, ярлымы-баймы икәнен дә билдәләп булған.
- Ә хәҙер һеҙ кейгән кейемгә ҡарап бындай мәғлүмәттәрҙе белеп буламы? *(Юҡ, әлбиттә)*
- Шулай уҡ, күреүегеҙсә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемендә көмөш тәңкәләр бик күп булған. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

*(көмөш тәңкәләр, уларҙың сыңлауы ҡатын-ҡыҙҙы күҙ тейеүҙән, ҡара көстәрҙән, ен-зәхмәт ҡағылыуҙан һаҡлаған)*

- Ҡатын-ҡыҙҙар ни тиклем бай булһа, тәңкә-биҙәүестәре лә шул тиклем күп булған. Беләһегеҙме, элекке ваҡытта бай ҡатындарҙың байрам кейемдәре 13 килограмға тиклем барып еткән!!!



- Ә был фотола ир-егеттәрҙең кейемдәре күрһәтелгән. Улар баштарын төлкө тиреһенән тегелгән бүрек, өҫтөнә күлдәк, камзул йә елән, киндер ыштан, аяҡтарына ситек кейгән.
- Матур булғанмы кейемдәр?

- Әлбиттә. Хатта мәҡәлдә лә «Ағас күрке япраҡ, әҙәм күрке - сепрәк», тип әйткәндәр бит.

<u>*Һандыкты сығар*</u>

- Ҡыҙҙар, ә мин бөгөн һеҙгә серле һандыҡ менән килдем. Эсендә нимә икән, нисек уйлайһығыҙ?

*(яуаптарын тыңла)*

- Әйҙәгеҙ, асып ҡарайыҡ.

*(түшелдеректе ал)*

- Ҡыҙҙар, был нимә ул, кем белә? *(яуаптарын тыңла)*



- Әйе, ҡыҙҙар, был – түшелдерек. Түшелдеректе шулай уҡ һаҡал тип тә, селтәр тип тә йөрөтәләр. Ҡатын-ҡыҙҙың түшен ел-ямғырҙан, яман күҙҙән һаҡлап торған ул. Әлеге ваҡытта уны матурлыҡ өсөн, биҙәнеү элементы итеп күберәк ҡулланалар.

*(Заготовкаларҙы ал һандыҡтан)*

- Ҡыҙҙар, бында тағы ла нимәлер бар – ҡайсы, энә, туҡыма. Тәңкәләр. Былар нимәгә кәрәк икән беҙгә?

*(яуаптарын тыңла)*

- Әйе, ҡыҙҙар, хәҙер беҙ һеҙҙең менән түшелдерек эшләйәсәкбеҙ

*(кәрәк-яраҡтарҙы тарат)*

- Мин һеҙгә түшелдерек эшләр өсөн кәрәк-яраҡтарҙы әҙерләп алып килдем. Тиҙ генә таратып алығыҙ.

*(үҙеңдең түшелдеректе күрһәт)*

- Ошондайыраҡ итеп эшләйәсәкбеҙ. Һеҙ уны аҙаҡ мәктәптә үткәрелгән төрлө байрамдарҙа тағып йөрөй алаһығыҙ.

*(Үҙеңдең янына саҡыр, нисек тәңкәләрҙе тағырға, нисек энә тоторға аңлат. Тегә башлағыҙ).*

- Ҡыҙҙар, элекке ваҡытта беҙҙең өләсәйҙәр ошолай итеп кистәрен йыйылып төрлө ҡул эштәрен тотоп ултырыр булған. Был борондан килгән йола. Кис ултырыуҙы көҙгө һалҡын һәм ҡышҡы кистәрҙә ойошторор булғандар. Һәр кем үҙ ҡул эштәре, бешкән аштары менән йыйылған. Кисәлә милли уйындар уйнағандар, таҡмаҡтар әйткәндәр, халыҡ йырҙары йырлағандар, бейегәндәр. Һуңынан сәй эскәндәр.
- Беҙ ҙә һеҙҙең менән йырлашып алайыҡмы әллә?

*(йырҙы ҡуй. Үҙең иплэп кенә йырлап ултыр.*

*Ҡыҙҙар эргәһендә йөрө, ярҙам ит.)*

- Ҡана, ҡыҙҙар, эштәрегеҙҙе күрһәтегеҙ әле.
- Ай-һай, уңғандарым. Ҡалай матур итеп эшләп ҡуйғанһығыҙ. Афарин. Йә, тағып та күрһәтегеҙ инде.
- Эй, уңғандарым, ҡалай матур итеп эшләп тә ҡуйғанһығыҙ. Үҙегеҙгә килешеп тора.
- Үҙегеҙгә оҡшанымы һуң? Байрамдарҙа тағып йөрөрһөгөҙ, йәме.
  Эшләп өлгөрмәгән ерен өйҙә үҙегеҙ эшләп бөтөгөҙ.
- Ҡыҙҙар, бөгөнгө кис ултырыуыбыҙ оҡшанымы һеҙгә? Байрамдарҙа йә булмаһа көндәлек кейемдәрегеҙҙә ошондай матур түшелдеректәр тағып йөрөргә теләр инегеҙме?
- Әйе, ҡыҙҙар. Хәҙерге заман менән бергә атлау кәрәк, был мөһим. Әммә халҡыбыҙҙың бай тарихын, йолаларын, төрлө традицияларын да белергә, киләсәк быуындарға һаҡлап тапшырырға ла кәрәк. Сөнки үҙенең үткәнен белмәгән халыҡтың киләсәге лә юҡ. Ошоларҙы онотмағыҙ, йәме, ҡыҙҙар.
- Ҡыҙҙар, минә һеҙҙең менән эшләү бөгөн бик оҡшаны. Һәр ваҡыт шулай матур. Рухлы булып ҡалығыҙ. Матур итеп ҡатнашып ултырыуығыҙ өсөн рәхмәт.

**Бикташева Альбина Фәрит ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының Мөхәмәт Искужин исемендәге**
**136 - сы башҡорт лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Тема:*** Атайсалға изге ғәмәлдәр йылы.

***Маҡсаттар:***

Балаларҙың дуҫлыҡ тураһындағы белемдәрен киңәйтеү; үҙ фекерҙәрен әйтергә өйрәтеү; уҡыусыларҙа әҙәп-әхлаҡ сифаттарын тәрбиәләү; дуҫлаша белеү, дуҫлыҡты һаҡлау, коллективта аралашыу күнекмәләрен тәрбиәләү.

***Йыһазландырыу.***

1. Ҡурай макеты
2. Һүҙҙәр яҙылған карточкалар.

***Ойоштороу моменты.***

Хәйерле көн, ҡәҙерле уҡыусылар!

Бөгөн һеҙҙең класта класс сәғәтен мин үткәрәм. Танышып китәйек: минең исемем Альбина Фәрит ҡыҙы. **Сәләмләү**



Ярай, бик яҡшы. Хәҙер эшкә тотонабыҙ.

Балалар, бөгөнгө дәрестең темаһын асыҡлар өсөн, йомаҡтарҙы сисеп, ҡурайҙың таждарын асыр кәрәк. (йомаҡтар сиселә бара, ҡурай таждарына яҙылған хәрефтәр беркетелә бара).

1. Башҡортостандағы иң ҙур йылға? *(Ағиҙел)*.
2. Ирәмәл нимә атамаһы? *(Тау)*.
3. Башҡорттоң ғүмер буйы тоғро юлдашы булған йорт хайуаны *(Ат)*.
4. Башҡортостандың Учалы районында табыла торған таш исеме ***(Й**әшмә)*.
5. Башҡортостандың милли батыры *(Салауат Юлаев)*.
6. Башҡортостандың йәш ҡалаһы *(Ағиҙел)*.
7. Өфөләге мәсеттең баш хәрефе *(Ләлә-тюльпан)*.

- Шулай итеп, балалар, ниндәй һүҙ килеп сыҡты? *(Атайсал)*.
- Ә нимәне аңлата был һүҙ? *(Ярҙам итеү...)*
- 2023 йыл Башҡортостан Республикаһында ниндәй йыл тип иғлан ителде? ( Р.Ф. Хәбиров тарафынан 2023 йыл Башҡортостан Республикаһында «Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр йылы» тип иғлан ителде).

- Уҡыусылар, беҙҙең Атайсалыбыҙ өсөн изге эштәр башҡарған ниндәй билдәле кешеләрҙе беләһегеҙ? (С.Юлаев, М.Шайморатов, **М.Рәхимов).**




- Ә ниндәй эштәр ул башҡарҙы? (меңәрләгән мәктәп асты, юлдар төҙөнө, өйҙәр төҙөнө...)

- Эйе, М.Рәхимов оло шәхес. Ул - башҡорт халҡының бөйөк улы, бар ғүмерен тыуған республикаһына һәм Рәсәйенә хеҙмәт итеүгә арнаны, илһөйәрлек өлгөһө булды. М. Рәхимов 20 йыл Башҡортостанға етәкселек итте. Ауылдарға иғтибар итте, социаль инфраструктураны үҫтерергә ынтылды. «Урал» мәрхәмәтлек фонды беҙҙең лицейға ремонт эшләне. Хәҙер ошо матур, йылы лицейыбыҙҙа уҡыйбыҙ. Беҙҙең мәктәп музейында М.Рәхимовтың портреты иң өҫтә тора. Беҙ уға бик рәхмәтлебеҙ.

- Ә һеҙ Атайсалыбыҙ өсөн ниндәй изге эштәр башҡарғанығыҙ бар? ( ҡоштарға кормушкалар,ололарға ярҙам иттек...) *(ВИДЕО, ФОТО)*

- Эйе, ысынлап та, изге эштәрҙе һәр кем башҡара ала. Ә уның өсөн нимә кәрәк? *(Теләк кәрәк)*

- Хәҙер төркөмдәрҙә эшләп алайыҡ. 3 төркөм.




***ДЕПУТАТТАР*** (*Әгәр һеҙ депутат булһағыҙ, Атайсалға ниндәй изге эштәр тәкдим итер инегеҙ).*

1. Әгәр мин депутат булһам, тәбиғәтте һаҡлау буйынса изге эштәр ойошторор инем.
2. Әгәр мин депутат булһам, бик күп объекттар, бюджет дауаханалар төҙөтөр инем.
3. Әгәр мин депутат булһам, Башҡортостанда, туризмды үҫтереү буйынса изге эштәр эшләр инем.
4. Әгәр мин депутат булһам, тыуған телде үҫтереү буйынса изге эштәр эшләр инем.

***ВОЛОНТЕРҘАР*** *(Ниндәй ярҙам күрһәтер инегеҙ).*

1. Өлкәндәргә күберәк иғтибар итергә.
2. Махсус операцияла ҡатнашҡан батырҙарыбыҙға ярҙам итергә, уларҙың ғаиләһенә ярҙам күрһәтергә.
3. Тәбиғәтте һаҡлау өсөн төрлө эштәр ойошторорға (субботник, ағастар ултыртырға).

***РЕКЛАМА БИРЕҮСЕЛӘР*** *(Ҡылымдарҙы ҡулланып реклама төҙөгөҙ).*

*Атайсалды яратығыҙ*
*Атайсалды һаҡлағыҙ*
*Атайсалды ҡәҙерләгеҙ*
*Атайсалға изге эштәр эшләгеҙ.*

- Бик яҡшы.
- Әйҙәгеҙ тағы ла ҡысҡырып уҡып ишеттерәйек.
  - Иҫегеҙҙә тотоғоҙ матур итеп төҙөгән шиғырҙы.

***Йомғаҡлау.***

Уҡытыусы: - Шулай итеп балалар, бөгөн класс сәғәтендә беҙ һеҙҙең менән нимә тураһында һөйләштек?

Ышаныслы дуҫың булыу – ул ҙур байлыҡ, шул байлыҡты һаҡларға, юғалтмаҫҡа тырышығыҙ. Дуҫтарығыҙҙы юғалтмау өсөн бына бөгөн дәрестә үҙегеҙ төҙөгән дуҫлыҡ ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа тырышығыҙ. Һәм шулай уҡ үҙегеҙ ҙә дуҫығыҙға яҡшы дуҫ булыу өсөн бөгөн үҙегеҙ төҙөгән яҡшы дуҫ моделенә тап килергә тейешһегеҙ.

- Шуға юҡҡа әйтмәйҙәр "Дуҫһыҙ кеше - ҡанатһыҙ ҡош".

Уҡытыусы: - Бөгөн дәрестә миңә һеҙҙең менән эшләүе бик күңелле булды, бөтәгеҙгә лә ҙур рәхмәт!

**Сирбаева Яҙгөл Айрат ҡыҙы,**
**- Өфө ҡалаһының айырым фәндәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүсе 114-се белем биреү үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***Тема:*** Атайсалға изге ғәмәлдәр йылы.

- *Хәйерле көн, жюри ағзалары, конкурсанттар, коллегалар!*

Бөгөнгө бәйгелә үҙ эшенең оҫтаһы булып танылған, тәжрибәле, талантлы уҡытыусыларҙы сәләмләүемә шатмын! Йорт именлеге, күңел тыныслығы теләйем. Яратҡан эшегеҙ кинәнес килтерһен, ә бөгөнгө оҫталыҡ класы артабан да кинәнеп эшләргә дәрт-илһам бирһен!

Халҡыбыҙҙа "Һөйлә миңә - мин онотормон, күрһәт – иҫтә ҡалдырырмын, ҡыҙыҡһындыр - өйрәнермен" тигән аҡыллы фекер бар. Һеҙгә күрһәтер, ҡыҙыҡһындырыр өсөн бөтәгеҙҙе "Өйгә эш аша башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация уятыу" ип аталған оҫталыҡ класына саҡырам.

*Слайд (тема)*

Хөрмәтле коллегалар, мин бөгөн фокус-группа менән эшләмәйем. Бөтәгеҙҙе лә әүҙем оҫталыҡ класымда ҡатнашырға саҡырам. Хәҙер мин һеҙгә өйгә эш карталары таратып бирәм. Һеҙгә бер минутта ошонда бирелгән өйгә эштәрҙе хәл итер кәрәк. Кем был өйгә эште нисек хәл итер? Ниндәй юлдар табыр? Кем етеҙерәк булыр? Рәхим итегеҙ! Ваҡыт китте!

*Слайд (ваҡыт тауышы)*

Рәхмәт! Бирелгән ваҡыт үтте. Яуаптар булырмы? Коллегалар, иғтибарҙы шуға йүнәлткем килә. Был өйгә эш карталарын алғас, күптәрегеҙ аптырап ҡалды. Кемдер интернет аша хәл итергә телефонға үрелде. Кемдер мәктәп йылдарында үтелгән физика фәнен иҫенә төшөрөргә тырышты. Һыҙыҡ өҫтөнә алам: беҙ башҡорт теленән өй эше биргәндә, тап ошо хаҡта телде бала нисек белә тигән һорауға яуапты ситтә

ҡалдырабыҙ. Сит милләт балаһына башҡорт теленән бирелгән өйгә эш әле һеҙгә тәҡдим ителгән физиканан өйгә эш ише булыуы мөмкин. Һәм артабан был теманы дауам итеп, иғтибарҙы экранға йүнәлтәйек.

*Слайд (видео)*

-Тимәк, тәҡдим ителгән видеола һеҙ ниндәй проблемалар күрәһегеҙ?

*-Ата-әсә һәм бала өйгә эш арҡаһында бер-береһен үпкәләтә;*

*-Өйгә эштең көндәлектә һәм электрон журналдарҙа ике төрлө яҙылыуы ата-әсәләрҙә предметҡа ҡарата кире ҡараш тыуҙыра;*

*-Өйгә эш ҙур ваҡытты ала;*

*-Бала ата-әсәйһеҙ өйгә эште хәл итә алмай.*

-Рәхмәт, коллегалар! Эйе, кис ата-әсәләр эштән ҡайтҡас, өйгә эштәрҙе тикшереү башлана, ата-әсәләр чаты йәнләнә, уҡытыусыға смс-хәбәрҙәр яуа башлай, күҙ йәше лә, үпкә һүҙе лә китә. Көн дә кис. Тап ошондай ҡуласала әйләнәбеҙ. Бер үк ҡуласа... Ябыҡ ҡуласа.

*(Таҡтаға ҡуласа йәбештерә)*

-Туҡтауһыҙ әрләшеүҙәр, аңлашылмаусанлыҡ, юғалған ваҡыт арҡаһында был ҡуласала ФӘНГӘ НӘФРӘТ, КИРЕ МӨНӘСӘБӘТ, ПАССИВ ҠАРАШ тыуа. Уҡытыусы, ата-әсә, уҡыусы ошо ҡуласала. Нисек быны йырып сығырға? Өйгә эште биреүҙе нисек ойоштороръа? Өйгә эш аша уҡыусыла һәм ата-әсәлә телгә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт уятыуҙың ниндәй юлдарын табырға?” ошо һорауҙарға беҙ бөгөн яуап эҙләйбеҙ.

Шулай итеп, оҫталыҡ дәресемдең маҡсат һәм бурыстарын һеҙ экранда күрәһегеҙ.

*Слайд (максат)*

“Башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың орфоэпик һәләтен үҫтереү” темаһы буйынса уңышлы һәм отошло эш алымдары менән уртаҡлашыу.

*Слайд (бурыс)*

Оҫталыҡ класында ҡатнашыусыларға профессиональ үҫеш өсөн шарттар тыуҙырыуға юл күрһәтеү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация уятыу өсөн ҡыҙыҡлы күнегеүҙәр системаһын булдырырға өйрәтеү, уларҙы практикала ҡулланыу юлдарын күрһәтеү.

Нимә ул өйгә эш? Ҡасан уйлап сығарылған? Бер аҙ һүҙлеккә иғтибар итәйек.

*Слайд (һүҙлек)*

Өйгә бирелгән эш баланың эҙләнеүен, үҙ аллы эшмәкәрлеген, ҡыҙыҡһыныуын туплау, үҫтереү, һәләтен асыу **маҡсатында** ойошторолорға тейеш. Өйгә эштәрҙе “күҙ буяу” өсөн генә биреү кәрәкмәй!

Хөрмәтле коллегалар, мин артабан оҫталыҡ класын дауам итеү өсөн һеҙҙе өс төркөмгә саҡырам. Урынлашығыҙ. Һеҙҙең алда пазлдар. Ошо пазлдарҙы йыйып, кем ниндәй группала эшләй икәнен аңлар.



-Рәхим итегеҙ. Тимәк, һеҙ ниндәй төркөмдә эшләйһегеҙ?

-Һеҙ ниндәй төркөмдә?

-Яҡшы. Төрлө группала төрлө күҙлектән бөгөн өйгә эштәрҙе эшләп ҡарайбыҙ. Өйгә эштәрҙе күңелле бер шөғөлгә әйләндереп ҡарайбыҙ.

- Быйылғы йыл Башҡортостанда ниндәй йыл тип иғлан ителде?

- Эйе, “Атайсал өсөн изге ғәмәл ҡылыу” йылы. Бөгөн оҫталыҡ класында ла ошо йылға бәйле эштәр булыр.

- Һәр төркөмгә өйгә эш карталары тәҡдим итәм. Бына ул карталар минең ҡулда.

*(Өйгә эш картаһын уҡый. Тарата.)*

- Төркөмдәр әҙерләнгәнсе, мин һеҙгә өйгә эштең һаулыҡҡа йоғонтоһо хаҡында ла һөйләп китмәксемен.

- Һүҙ һеҙгә. Әле тәҡдим ителгән өйгә эштәр нигеҙендә һеҙгә лайфхактар булдырҙым һәм уны уҡып китмәксемен.

- Хөрмәтле уҡытыусылар, ә хәҙер ошо лайфхактарға ла нигеҙләнеп ике ҡыҙыҡлы өйгә эш тәҡдим итегеҙ.

-Уҡыусылар, һайлап алығыҙ.

-Һеҙ был өйгә эштәрҙе һайлап алғанда, нимәгә иғтибар иттегеҙ.

-Һеҙ өйгә эшкә әҙерләнегеҙ.

-Хөрмәтле ата-әсәләр. Мин һеҙгә лайфхак уҡыйым.

Тимәк, әйҙәгеҙ, һүҙ һеҙгә нисек итеп быны тормошҡа ашырырға?

Рәхмәт.

Өйгә эштәр әҙер. Беҙгә, әлбиттә, баһалау кәрәк. Баһалағанда, биш йә дүрт тип кенә түгел, ә ни өсөн икәнен әйтеп тә баһалау кәрәк.

*Рефлексия.*

Мәҡәлдәр менән

Түңәрәк йырылды һәм ныҡлы отоусы таяҡҡа әйләнде. Түңәрәк күңелгә әйләнде өс таған булып.

Бөткөһөҙ мәшәҡәт менән тулы ҡуласа түгел икән дә, был беҙҙең түңәрәк күңел

икән. Юғары маҡсаттар менән янған, изге ғәмәлдәр ҡылып, йәшәүҙән йәм табып йәшәгән, ҡәнәғәт түңәрәк күңел икән...

Атайсалға изге ғәмәл ҡылыу өйҙән башлана, мәктәптән башлана. Минән башлана, һинән башлана. Яҡшы һүҙҙән, оло ышаныстан, изге ғәмәлдәр башлана.

**«Оҫталыҡ дәресе» конкурс этабы**

**Ильясова Ләйсән Рафат ҡыҙы,**
**Өфө калаһының 161-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***“Алтын кәрәҙ”***

Оҫталыҡ дәресе алдынан ҡатнашып ултырыусыларға эш карталары, буклеттар таратып бирелә.

***I. Ойоштороу мәле.***

Экранда “Алтын кәрәҙ” оҫталыҡ дәресенең видеологотибы сыға, музыка уйнай, уҡытыусы оҫталыҡ класын шиғри юлдар менән башлап ебәрә.

Мин халҡымдың сәскә күңеленән,
Бал ҡортондай ынйы йыямын.
Йыямын да - йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

– Һаумыһығыҙ хөрмәтле жюри ағзалары, коллегаларым, фокус төркөм! Һеҙҙе “Алтын кәрәҙ” методик оҫтаханаһына саҡырам!



Мин, Ильясова Ләйсән Рафат ҡыҙы булам, Өфө ҡалаһының 161-се лицейының башҡорт теле һәм әҙәбите уҡытыусыһымын.

Уҡытыусы һөнәрен - тынғыһыҙ эшләгән, берҙәм, тырыш булған бал ҡорттарына тиңләр инем… Шуға ла оҫталыҡ дәресемде “Алтын кәрәҙ” тип атаным. Бергәләп методик кәрәҙҙәрҙе тултырырбыҙ (*буш кәрәҙҙәр төшөрөлгән слайд күрһәтелә*).




Бөгөн мин һеҙҙең менән, башҡорт дәүләт теле дәрестәрендә предмет-ара бәйләнеш булдырыу өсөн үҙ практикамда уңышлы тип тапҡан, эш алымдарым менән уртаҡлашырға теләйем. *(Оҫталыҡ дәресенең маҡсаттары слайдта сыға.)*




***II. Оҫталыҡ класының маҡсатын, бурыстарын һәм актуаллеген билдәләү.***

– Коллегалар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, башҡорт теле дәрестәрендә предмет-ара бәйләнеш булдырыу бөгөнгө көндә актуалме? *(фокус төркөм үҙҙәренең фекерен әйтә).*

***Һығымта:*** яңыртылған ФДББ стандарттары шарттары буйынса уҡыу процессы "үҙлөкһөҙ белем алыу" концепцияһын бойомға ашырыуға ҡоролған. Уҡыусыларҙы беҙ төрлө яҡтан да киң ҡарашлы булған шәхес итеп тәрбиәләргә тейешбеҙ.

***III. Төп өлөш.***

– Бөгөнгө оҫталыҡ дәресемдә, тәбиғәт темаһын өйрәнгән ваҡытта ҡулланылған эш алымдарын ҡарап үтәсәкбеҙ. Бөгөн шуларҙың бер нисәһендә туҡтап китергә теләйем.

Уҡыусыларымдың яратып башҡарған уйыны "Ҡар бабай" эшләү.

***1-се алым. "Ҡар бабай эшләү" уйыны.***

***Эштең биреме.*** *Интерактив "Миро" таҡтаһын күрһәтеү.*

*"Ҡар" һүҙенә ҡушып, ағас исемдәрен килтереп сығарырлыҡ ҡар өйөмдәрен һайлап алығыҙ. Уларҙы ҡар бабай формаһында урынлаштырығыҙ (бер ҡатнашып ултырыусы сығып ҡар бабай яһай).*

Был алымды башланғыс кластарҙа ағастар, ҡышҡы урман, ҡоштар темаһын үткәндә ҡулланабыҙ. Ул “Миро” таҡтаһында уйын формаһында ойошторола.

*– Һеҙ ниндәй ағас исемдәрен таптығыҙ? Яуаптар: карама (вяз), карағай (сосна), ҡарағас (лиственница).*

*– Ошо ағастарҙың ҡайһылары ылыҫлы ағастарға инә?*

*–Коллегалар, ә бында нимә исемдәре йәшеренгән?( кош исемдәре).*

***Һығымта:*** Ошо алымды ҡулланып, ниндәй предмет менән башҡорт теле араһында бәйләнеш булдырҙыҡ? *(Слайдта бер кәрәҙ тула)*

Яуап: биология.

– Киләһе алымдарҙы текст өҫтөндә эшләгәндә ҡулланабыҙ. Коллегалар, ә хәҙер күнегеүҙәр йыйынтығының 11-се битен асығыҙ, эш картаһын алығыҙ.

***2-4 -се эш алымдары “Текст менән эшләү” буйынса*.**

Уҡыусыларҙы төрлө эксперттарға бүлеү. (*карточкаларҙа яҙылған, уҡыусыларҙың алдына ҡуйыла)*

- *Тел белгестәре,* һеҙ тексҡа исем бирәһегеҙ, һүҙлек эше менән эшләйһегеҙ.
- *Биология фәне белгестәре, “Синтез-таблица”һы менән эшләйһегеҙ, торна һүрәтен билдәләйһегеҙ.*
- *География фәне белгестәре, карта буйлап сәйәхәт итәсәкһегеҙ. Тексҡа таянып, торналарҙың төрлө илдәрҙә ниндәй символ булғанын күрһәтәһегеҙ.*
- Тексты бер тапҡыр уҡып сыҡҡас, һәр төркөмгә эштәр бирелә.
- “Карта буйлап сәйәхәт” (Торна һүрәттәрен картаға беркетеү)
- Торналар төрлө илдәрҙә нимәне символлаштырған?
  Картаға беркетеү.
  Египетта – ҡояш ҡошо
  Боронғо Римдә – торналарҙы күреү яҡшыға юралған
  Ҡытайҙа – оҙаҡ йәшәүҙе
  Японияла – үлемһеҙлек, бәхет, сәскә атыу
  Рәсәйҙә – Аллаһ ҡоштары
  Башҡортостанда – изге ҡош



*Шулай итеп текст өҫтөндә эшләгән ваҡытта башҡарған бер нисә алымды күрҙек.*

***Һығымта.*** Текстың йөкмәткеһен хәтерҙә ҡалдырыу өсөн синтез-таблицалары, карта буйлап сәйәхәт, тиҙ генә эшләнә торған һүҙлек эше ойоштороу отошло.

- *Коллегалар, бында беҙ ниндәй башҡорт теле дәресендә ниндәй предметтарға күпер һалдыҡ?*
- *Рус теле, биология, география, этнография.*
  *(слайдттағы кәрәҙҙәр тултырыла бара)*

**5-се алым "Серле әйберҙәр".**

- Һеҙҙең алдығыҙҙа Әй буйы (төньяҡ-көнсығыш) башҡорттарының кейем элементы булған тамбурлы сигеүе менән биҙәлгән алъяпҡыс. Әгәр ҙә беҙ халҡыбыҙҙың әйберҙәрен төптән өйрәнә башлаһаҡ, уларҙа тәрән мәғәнә ятҡанын күрәбеҙ. Әйҙәгеҙ әле әйтеп ҡарағыҙ, ниндәй серҙәр һаҡлай икән тамбулы сигеүле алъяпҡыс?




Яуаптар:

1. Был алъяпҡыс Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондарында Силәбе, Свердловск өлкәһендә йәшәгән башҡорттарының кейем элементы.

2. Алъяпҡыстың өҫкө өлөшө ҡатын-ҡыҙҙың календары булған.

3. Альяпҡыстағы ҡара ерлек – тыуған ерҙе, тупраҡты символлаштыра.

4. Алъяпҡысытың итәк өлөшө ғаиләне берләштереүсе шәжәрә булып торған.

– Эйе, Алъяпҡыстың итәгенә шәжәрә сигелгән. Әйле буйы башҡорттарының легендаһына нигеҙләнеп, алъяпҡысты сиккән ҡатын-ҡыҙ үҙенең ырыуын ҡомалаҡ һәм ялан сәскәләре аша күрһәткән.

Алъяпҡыстың серҙәрен сискәндә беҙ ниндәй фәндәргә күпер һалдыҡ.

Ҡатнашыусылар яуап бирә. Слайдтағы кәрәҙҙәр тулып бара.

***IV. Рефлексия.***



***V. Йомғаклау.***

Һүҙемде йомғаҡлап, Рәми Ғариповтың һүҙҙәре менән бөтөрөп ҡуйырға теләйем.

Сәскәләргә биҙәк кәрәкмәй ул,

Биҙәкһеҙ ҙә улар матурҙар

Ижадығыҙ нисек шытҡан булһа,

Улар шулай сәскә атырҙар.

Оҫталыҡ класына әҙерләнгән таратма материалдар.






Эш картаһы.

***Тема: Торналар.***

***1. Тексты уҡығыҙ.***

Торна – иң ҙур осар ҡош. Аҡ һәм һоро торналар була. Уларҙың муйыны һәм аяғы оҙон. Баштары ҙур түгел, суҡыштары тура һәм осло. Улар күбеһенсә һаҙлы урындарҙа йәшәйҙәр. Торналар бик матур була.

Боронғо Египетта торналарҙы ҡояш ҡошо тип атағандар. Улар был ҡоштарҙы яратып, хатта өйҙә лә аҫрағандар. Боронғо Римдә торналарҙы күреү яҡшыға юралған. Ҡытайҙа был ҡош оҙаҡ йәшәү атрибуты булып һаналған. Японияла ул үлемһеҙлек, бәхет, сәскә атыу символы булған. Рәсәйҙә торналарҙы Аллаһ ҡоштары тип атағандар. Башҡорттар торнаны изге ҡош тип йөрөтә.

Күп халыҡтарҙың торналар тураһында легендалары һәм әкиәттәре бар.

*(Интернет селтәренән)*

***2. Тексттың темаһын билдәләгеҙ:*** ________________________________________

3. ***Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙең тәржемәһен табығыҙ.***

суҡыштары тура – разводили
һаҙлы урындар – клюв прямой
осар ҡош – летающая птица
аҫрағандар – священная птица
үлемһеҙлек – заболоченные места

изге ҡош –                                   бессмертие

***4. Текстағы һүҙҙәрҙе ҡулланып таблицаны тултырығыҙ.***

| Торнаның | Ниндәй? |
|---|---|
| Муйыны (шея) | |
| Башы (голова) | |
| Суҡыштары (клюв) | |

***5. Башҡортостанда торналар нимәне символлаштырған?***

Торна ________________________________________________

***6. Ниндәй һүрәттә торна төшөрөлгән?***



1.



2.



3.

**Сирбаева Яҙгөл Айрат ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының айырым фәндәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүсе**
**114-се белем биреү үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

Хәйерле көн, хөрмәтле жюри ағзалары! Коллегалар!

Мин - Сирбаева Яҙгөл Айрат ҡыҙы, 114-се белем биреү үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһымын. Һеҙҙе тел уҡытыусыларының конкурсында – рух бәйгеһендә сәләмләүемә шатмын!

Уҡытыусы – бөйөк һөнәр, ниндәйҙер дәрәжәлә хатта уникаль һөнәр. Беҙ һәр беребеҙ үҙебеҙҙең белем, тәжрибә, күңел йылыһын укыусыларыбыҙға өләшәбеҙ. Шуның менән донъяны нурлайбыҙ.

Уҡытыусылыҡ булмышыма ярашлы һорауҙар ҡуям, туҡтауһыҙ үҫеш юлында булырға ынтылам, уҡытыуҙа яңы алымдар, яңы йүнәлештәр эҙләйем, фаразлайым, һығымта яһайым. Уҡытыусы булараҡ, мине нимә шатландыра, нимә борсой, нимә уйландыра? Һеҙҙең менән бүлешәһе уйҙарым ошо хаҡта.

Теманың актуаллеге. Бөгөнгө көндә республикала башҡорт телен өйрәнеү һәм уҡытыу торошо яңы бейеклеккә күтәрелде. Был тенденцияға ауаздаш булып, укыу йорттары үҙенең материаль-техник базаһын нығытты, заманса техник һәм методик әсбаптар менән байытты. Бөгөнгө көндә гаджеттарҙа белем биреүсе, өйрәтеүсе бик күп программалар киң

ҡулланыла. Был күренештәр ҡыуандыра. Тик шулай ҙа башҡорт теле дәрестәре менән бәйле уйландырыр һорауҙар, хәл ителәһе мәсьәләләр етерлек әле.

Хәтерегеҙҙәлер, бер йыл элек блогер Светлана Насырова "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге сәхифәһендә әсбаптар тураһында һүҙ башланы. Был һүҙҙе шунда уҡ бик күп ата-әсәләр эләктереп алып, башҡорт теленән бирелгән өйгә эштәр хаҡында оҙон-оҙаҡ әңгәмәгә төшөп киткәйнеләр. Ата-әсәләр башҡорт теленән өйгә эштәр ауырлығына, башҡорт теленән инглиз теле дәреслектәре һымаҡ өйгә эш китаптары булмауына, бирелгән өйгә эштең файҙаһыҙ булыуына, күп өйгә эштәр күсереп кенә яҙыуға ҡоролған булыуына зарландылар. Башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ был әңгәмәгә битараф ҡала алманым. Интернетта ҙур шау-шыу уятҡан был һорау артабан минең методик темам итеп билдәләнде: "Өйгә эштәр аша башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация уятыу".

*Слайд (тема)*

Башҡорт теленән өйгә эштәргә етди иғтибар етмәүе мине нык борсой. Интернет селтәрендә блогер Светлана Насырова үҙенең сәхифәһендә ҡорған әңгәмәлә башҡорт ата-әсәләре ризаһыҙлығын күрһәтте. Ә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе төрлө милләт балаларының ата-әсәләрен алғанда? Был осраҡта улар ни әйтер ине икән?... Күҙ алдына килтерегеҙ... Ошо тема өҫтөндә эшләгәндә икеле фекерҙәр ишетергә тура килде: "Өйгә эштәр мәсьәләһе тар мәсьәлә", "Был актуаль түгел". Ә инде ҡайһы бер мәктәптәрҙә башҡорт теленән өйгә эштәрҙең бирелмәй икәнен белеү бигерәк тә әсендерҙе. Хөрмәтле коллегалар, башҡорт теленән ике-өс билдәләре ҡуймайбыҙ, ә хәҙер өйгә эштәр ҙә бирмәһәк?!. Ғаризалар яҙҙыртып, яулап алған телебеҙҙең бәҫен үҙ ҡулдарыбыҙ менән төшөрәбеҙ бит.

Ә бит өйгә эштәр - уҡыусыларҙың мәктәптә алған белем һәм күнекмәләрен нығытыу, үҙаллылығын үҫтереү сараһы. Уҡыусыларҙы башҡорт теленә өйрәтеү, ата-әсәләрҙә телгә ыңғай ҡараш тыуҙырыу туранан-тура өйгә эштәр менән бәйле һәм был бик мөһим мәсьәләләрҙең береһе. Ошонан сығып педагогик эшмәкәрлегемдең маҡсаты билдәләнде – башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация уятыу өсөн ҡыҙыҡлы күнегеүҙәр системаһын булдырыу.

*Слайд (маҡсат)*

Был маҡсаттан сығып, ошондай бурыстар ҡуйылды:

өйгә эш күнекмәләр системаһын булдырыу, йыйыу, ҡулланыу;

уҡыусыларҙа башҡорт теленә ҡарата иғтибар, хөрмәт, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

*Слайд*

Тема өҫтөндә эшләү түбәндәге этаптарға бүленде һәм уларҙың ваҡыты билдәләнде:

Беренсе этап. 2021 – 2022 уҡыу йылының беренсе ярты йыллығы. Эштең теоретик нигеҙен барлау, проблема тәрәнлеген асыҡлау, фәнни ғәмәлгә таянып өйрәнеү.

Икенсе этап. 2021 – 2022 уҡыу йылының икенсе ярты йыллығы һәм 2022 – 2023 уҡыу йылының беренсе ярты йыллығы. Методик теманы практик нигеҙҙә өйрәнеү, уның һөҙөмтәһен асыҡлау. Был этап үҙ сиратында шундай өлөштәргә бүлеп ҡаралды:

1. Ата-әсәләрҙең өйгә эшкә ҡарашын асыҡлау өсөн анкета үткәреү.

2. Өйгә эш нигеҙендә уҡыусыларҙың башҡорт теленән өлгәшен асыҡлау маҡсатында диагностика үткәреү.

3. Ирешелгән һөҙөмтәләрҙе барлау өсөн контроль диагностика үткәреү.

Өсөнсө этап. 2022 – 2023 уҡыу йылы. Эш тәжрибәһенә йомғаҡ яһау, йәғни, мәктәптең методик ойошмаһында өйрәнелгән тема менән сығыш яһау, асыҡ дәрестәр үткәреү, эш тәжрибәһен өйрәнеү буйынса методик йыйынтыҡ булдырыу.

*Слайд*

Эш процесында “Өйгә эш нисек бирелергә тейеш?”, “Өйгә эш аша уҡыусыла һәм ата-әсәлә телгә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт уятыуҙың ниндәй юлдары бар?”, “Өйгә эштәр нисек баһаланырға тейеш?” тигән һорауҙар өҫтөндә эшләнем.

Бирелгән өйгә эштәрҙә төрлө кәмселектәрҙе асыҡлау маҡсатында ата-әсәләр араһында анкета үткәрелде. Анкета һорауҙарын һеҙ экранда күрәһегеҙ. Һәм анкетанан сығып, өйгә эш биреүҙә ниндәй етешһеҙлектәр осрай икәнен әйтеп үтәйек:

-күп осраҡта өйгә эш дәрестән сығырға ҡыңғырау булғас, ашыҡ-бошоҡ бирелә;

-өйгә эштәр аңлатып әйтелмәй;

-өйгә эш дәреслектәге теге йә был күнегеүҙе күсереп яҙыу йә текстарҙы уҡып сығыу менән генә сикләнелә;

-өйгә эштәр күңелһеҙ, ҡыҙыҡһындырмай;

-өйгә эштәр һоралмай һәм баһаланмай ҡала.

Эйе, ысынлап та өйгә эштәрҙе “күҙ буяу” өсөн генә биреү кәрәкмәй!

Минеңсә, өйгә бирелгән эш баланың эҙләнеүен, үҙ аллы эшмәкәрлеген, ҡыҙыҡһыныуын туплау, үҫтереү, һәләтен асыу маҡсатында ойошторолорға тейеш.

Мин “Күңелле өйгә эштәр” тип аталған картотека булдырҙым. Был картотека башҡорт дәүләт телен өйрәнеүсе башланғыс кластар өсөн тәғәйенләнгән. Бар өйгә эштәр эш программаһына ярашлы һәм йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлгән. Бер класта белем алыусы уҡыусыларҙың белем кимәле төрлө булғанын иҫәпкә алып, бер темаға өйгә эштәр өс төрлө вариантта тәҡдим ителгән.

Хөрмәтле жюри ағзалары, һеҙҙең алдығыҙҙа был карталар бар. Шулай уҡ экранда күрәһегеҙ. Иғтибар итәйек.

Күреүегеҙсә, был карталар сағыу һәм үҙенә йәлеп итеп тора. Был карталарҙы уҡыусыларға өйҙәренә биреп ҡайтарам. Ата-әсәгә өйгә ниндәй эш биределде тип чаттарҙан, электрон журналдан эҙләү кәрәкмәй. Өйгә эш карталары балаларҙың ҡулдарында.

Шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алыу мөһим. Башҡорт теле олимпиадаһында тест һорауҙары, диалог төҙөү тигән эш төрҙәре осрай. Минең ошо йүнәлештәге эштәр, тимәк, олимпиадаға ла бер әҙерлек булып тора. Эшемдең һөҙөмтәһен һеҙ экранда күрәһегеҙ.

Иғтибар иткәнһегеҙҙер, өйгә эштәрҙең береһе вайндар эшләү ине. Был вайндар ғаиләлә башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтә. Иғтибар экранға.

Ошондай вайндар ҡарағандан һуң, әлбиттә, һәр өйгә эште баһалайым. Электрон журналда комментарий яҙам: “Афарин! Һоҡланғыс ғаилә!” Әлбиттә, һәр кемдең йылы һүҙҙән күңеле күтәрелә. Минең был комментарийҙар ҙа уҡыусыларыма һәм ата-әсәләргә бик оҡшай, уларға дәрт өҫтәй.

Сығышымды тамамлап шуны әйткем килә, өйгә эш дәрестең бер этабы ғына тип ҡарамайыҡ! Бәлки, ул тотош бер тормош мәктәбелер! Өйгә эш уҡыусыларыбыҙҙы ҡыҙыҡһындырһын, үҫтерһен, ҡанатландырһын!

*(Өйгә эштәрҙең башҡорт телен өйрәнеүҙә һөҙөмтәһе бармы икәнен асыҡлау өсөн инеш диагностика һәм сағыштырыу диагностикаһы үткәрҙем. Әле сирек алдынан үткәрелгән диагностика уңыштар барлығын күрһәтә).*

**Сағынбек Ильяс Жарҡымбек улы,**
**Өфө ҡалаһының 9-сы мәктәбенең**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

***“Башҡорт телен төрки телдәре менән сағыштырып өйрәнеү технологияһын камиллаштырыу”***

*(ҡаҙаҡ теле миҫалында)*

- ***МАҠСАТ:*** Бөгөнгө «Оҫталыҡ дәресе»ндә башҡорт халҡының телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен ҡаҙаҡ халҡының теле, әҙәбиәте һәм мәҙәниәте менән сағыштырыу ярҙамында уҡыусыларҙа башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу арттырыуҙа отошло һәм ҡыҙыҡлы алымдар менән уртаҡлашырмын.

*1.* ***ТЕЛ.*** Хәҙер мин һеҙгә бер эш төрөн тәҡдим итәм. М. Аҡмулланың шиғырҙарынан өҙөктәр тыңлайыҡ. Һеҙҙең алдығыҙҙа һүрәттәр ята, шуларҙы шиғырҙарҙың йөкмәткеһенә тап килтерегеҙ.

***Яҙ***

Ҡыҫмаҡ үтеп, ҡыш үткән һуң, килде яҙ,
Ҡайҡыулашып, килде осоп өйрәк-ҡаҙ.
Ян-януар йәшел үләнгә сығып,
Көллө ғәләм шатланышып булды мәж;

***Көҙ***

Яҙғы йәшел ерҙең төҫө уңғанын,

Һыуыҡ һуғып, урмандарҙың туңғанын

Күреп күңелең, эсең бошор, һарғайып,

Япраҡтар төшөп ерҙә һулығанын.

Ер йөҙөндә йәшлек күрке ҡалмайҙыр,

Биткә ыжғыр, һыуыҡ елдәр ыулайҙыр.

***Һыу***

Һыу ағалыр, күперәлер гөрөлдәп,

Ҡыш – ҡаталыр, көҙ – яталыр дерелдәп.

Ҡайсаҡ ташып, ҡайсаҡ ашып ярынан,

Ҡайсағында һыуала әкеренләп.







-Һүрәткә ҡарап шиғырҙа һүҙ нимә тураһында барғанын бер-ике һөйләм менән әйтегеҙ.

-Эйе, бик яҡшы.

-Ә ошо шиғырға ниндәй исем бирерһегеҙ?

-М. Аҡмулла ла был шиғырҙарын “Яҙ, көҙ, һыу” тип атаған.

-Шиғырҙағы ике һүҙҙе алырға ла, мәҫәлән: **януар, ғәләм** *“Ихтика”* платформаһында мәғлүмәт табабыҙ.

- *Рәхмәт, был эште бик яҡшы билдәһенә башҡарҙығыҙ. Бындай эштәр уҡыусыларҙа мәғлүмәтте аңлы үҙләштереүгә ярҙам итә, тиҙ табыу һәләтен үҫтерә, рефлексия һәм һүҙлек өҫтөндә эш ваҡытында ҡулланырға отошло.*

**2. *ӘҘӘБИӘТ.*** Уҡыусыларҙың белемдәрен байытыу маҡсатында, дәрестәремдә уҡыусыларға түбәндәге эш төрөн тәҡдим итәм. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә һеҙҙең менән был эште эшләп ҡарайыҡ.

- *QR-кодтар* эшләү алымы аша, Мифтахетдин Аҡмулла тормошон, ижадын, исемен мәңгеләштереү тураһында яңы мәғлүмәттәр өйрәнеү.

- *Бындай эш алымдары уҡыусыларҙа, беренсенән, ҡыҙыҡһындырыу тыуҙырһа, икенсенән, белемдәрен арттыра, аң-даирәне киңәйтә (кругозор).*

*QR-кодтар таратыла;*

*QR-кодта Аҡмулланың портреты, шиғыры, биографияһы.*

**3. *МӘҘӘНИӘТ.*** Башҡорт телен предмет-ара бәйләнеш аша өйрәтеү ҙә бик отошло алымдарҙың береһе. Башҡорт телен йыр дәрестәре менән бәйләп өйрәнеү ҙә ыңғай һөҙөмтә бирә.

*Әсә тураһында йыр.*



*Әле лә башкорт казак мөнәсәбәттәре дауам итә.*

*Йырлайбыҙ.*

***Көтөлгән һөҙөмтәләр:***

- Уҡыусыларҙың башҡорт халҡының мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныуҙары арта; уҡыу сифаты үҫә.

4. **ФОЛЬКЛОР.** *(Әйтеш жанрҙары булған) Башланған әйтеш һүҙҙәрен дауам итеү.*

*Ҡаҙак сәсәндәре лә, башкорт сәсәндәре лә әйтешкәндәр.*

*Әйҙәгеҙ үҙегеҙҙе сәсән итеп хис итәйек.*

*Мин башлайым һеҙ дауам итәһегеҙ:*

*Илебеҙ булһын тыныс.*

*Ҡынында булһын кылыс…*

- Уҡыусылар фольклор менән ҡыҙыҡһына;
- Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығы арта.



**Бикташева Альбина Фәрит ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының Мөхәмәт Исҡужин исемендәге**
**136 - сы башҡорт лицейынын башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы**

Хәйерле көн, хөрмәтле жюри ағзалары, коллегалар!

***"Билингвизм шарттарында укыусыларҙың туған телендә фекерләү эшмәкәрлеген үҫтереү"***

***Эшемдең максаты:*** *билингвизм шарттарында проблемалы укытыуга нигеҙләнеп укыусыларҙың туған телендә фекерләү эшмәкәрлеген үҫтереү үҙенсәлектәрен асыклау, эффектлы укытыу алымдарын күрһәтеү.*

Бөгөн мин үҙемдең оҫтаханамда һеҙҙең менән Әхнәф Байрамовтың “Выждан ғазабы” әҫәре буйынса, проблемалы уҡытыуға нигеҙләнеп, әҙәби әҫәргә анализ яһауҙың ҡайһы бер алымдары менән уртаҡлашып китергә теләйем. Мин әҫәргә тулы анализ биреүҙе маҡсат итеп ҡуйманым, ә дәрестә уҡыусыларҙың фекерләү әүҙемлеген үҫтереүгә булышлыҡ иткән, проблемалы һорауҙар күтәргән алымдарға ла туҡталып китәсәкмен.

Хөрмәтле коллегалар, мин һеҙҙе ике төркөмгә бүлдем. Төркөмдәрегеҙҙә бер-берегеҙ менән кәңәшләшеп, ярҙам итешеп эшләрһегеҙ, тип уйлайым. Фекерҙәрегеҙ уртаҡ булһын.

Һеҙ мастер класс башланғансы хикәйәнең йөкмәткеһе менән таныштығыҙ, текст алдығыҙҙа ята.

Әйҙәгеҙ әҙәбиәт теорияһынан әҫәрҙең сюжет өлөштәрен иҫкә төшөрөп үтәйек. Мин уҡыусыларҙың хәтерендә аңлайышлы һәм еңел иҫтә ҡалһын өсөн ябай ғына ошондай эш төрҙәрен ҡулланам.

*(слайдта Ҡояш һүрәттәре)*

Ҡояш урынына мөмкин алма ағасын алырға. (слайдта күрһәтеп кителә). Бына ошондай предметтар аша сюжет элементтарын ябай ғына итеп аңлатырға була.( жюриға әйтеп китергә)

- *Таң атып килә* – Был сюжеттың ниндәй өлөшө? (Ваҡиғалар барған урын, ваҡыт)
- ***Экспозиция***
- *Ҡояш нурҙары күренә башланы?*
- Экранда хикәйәнең йөкмәткеһе буйынса һүрәттәр күрәһегеҙ, шул һүрәттәрҙең ҡайһыһы төйөнләнеү моментына тура килә? *(Төйөнләнеү)*
- Ни өсөн ошо һүрәт төйөнләнеү өлөшөн күрһәтә?
- Яуап бирәләр
- ***Һығымта:*** әҫәрҙең төйөнләнеү өлөшөн һүрәт аша күрһәтеү отошло алымдарҙың береһе, беренсенән, күргәҙмәлелек аша хикәйәнең ошо өлөшө нығыраҡ хәтерҙә ҡала, икенсенән, ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтерергә ярҙам итә.
- Шулай итеп, эшебеҙҙе артабан дауам итәбеҙ.
- *Ҡояш үргә күтәрелгәндән күтәрелә бара?* Был сюжет элементының ҡайһы өлөшөн хәтерләтә?
- ***Ваҡиғалар үҫешен.***
- Әйҙәгеҙ, ике телдә ваҡиғалар үҫешен хәтергә төшөрөп үтәйек. (Төркөмдәр алмашлап, урысса рус теле уҡытыусыһы һәм башҡорт телендә яуап бирәләр).
- <u>Бер уҡытыусы әйтә</u>: Ғилемхан хикәйәнең башында бер төрлө булһа, аҙағында икенсе кеше булып күҙ алдына баҫа.
- Әйҙәгеҙ, дауам итеп, беренсе төркөм башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән **“Выждан ғазабы”** һүҙбәйләнеше нимәне аңлатҡанын, ә башҡортса - русса һүҙлектән тәржемәһен табығыҙ.
- Икенсе төркөм, һеҙ, интернетка инеп, рус телендә, ***әҙәби геройҙың психологик портреты*** төшөнсәһе нимәне аңлатҡанын таба, башҡортсаға тәржемә эшләй.

*(Слайд)*

| 2-се төркөм | 1-се төркөм |
|---|---|

| | |
|---|---|
| Әҙәби геройҙың психологик портреты төшөнсәһе нимәне аңлатҡанын таба, башҡортсаға тәржемә эшләй. | Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән. “Выждан ғазабы” һүҙбәйләнеше нимәне аңлатҡанын таба. |

***Төркөмдәрҙең яуаптарын тыңлайбыҙ.***
***1-се төркөм.***

“*Выждан ғазабы” – нык уйланырға мәжбүр иткән, рухи яктан интектергән ауыр эске кисерештәр. (Слайд)*

***2-се төркөм.***

В отличие от обычного портрета, главная цель которого – представить человека, психологический портрет связывает внешность героя с особенностями его внутреннего мира.

- *Ғәҙәти портреттан айырмалы рәүештә, психологик портрет геройҙың тышҡы ҡиәфәтен уның эске донъяһының үҙенсәлектәре менән бәйләй. (Слайд)*

- Ә был “Выждан ғазабы” әҫәренә ҡарата урыҫ әҙәбиәтенән ниндәй әҫәр беләһегеҙ? (Рассказ “Телеграмма” Константин Паустовский) (Дочь игнорирует свою маму, занимается своими делами, ей всё некогда. Мама умирает, дочь не успевает приехать на похороны. После этого она испытывает настоящие угрызения совести) интертекстуаллек (интертекстуальность).

- ***Һығымта:*** Хөрмәтле коллегалар, ошо урында предмет - ара бәйләнеш булдырыла һәм сағыштырыу алымы ҡулланыла, ошо алымдар аша ике телдең дә әҙәбиәт теорияһы өйрәнелә.

- *Ҡояш иң юғары нөктәһенә менеп етте?*
- Экранда хикәйәнең кульминацион өлөшөн күрһәткән һүрәт төҙөйбөҙ. Был һүрәтте пазлдарҙан йыйырға кәрәк.
  https://online-puzzle.ru/own_puzzle
- ***Кульминацияны*** һөйләгән һүрәт килеп сыға.
- Ни өсөн ошо һүрәт кульминация өлөшөн һүрәтләй? *(яуап бирәләр)*

- ***Һығымта:*** Был эш төрө баланың әҫәрҙең йөкмәткеһен белеү - белмәүен, аңлағанмы-юҡмы икәнлеген асыҡларға ярҙам итә.

- *Ҡояш йәйлап ҡына байый башланы?*
- Был күренеш сюжеттың ҡайһы элементы? *Сиселеше*

- Ике төркөмгә һүҙҙәр сылбыры бирәм. Ошо һүҙҙәрҙән әҫәрҙең сиселеше тураһында белдергән һөйләм (мәҡәл) төҙөгөҙ.

- *Намыҫ йәштән - оят баштан (1-се төркөм)*
- *Ғәйебеңде таныу - ярты төҙәлеү (2-се төркөм)*
- Ә рус телендә ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ?
- 1. Есть совесть, есть и стыд, а стыда нет, и совести нет.
- 2. Нечистая совесть спать не даёт.
- 3. Совесть без зубов, а загрызёт.
- 4. Совесть с молоточком: и постукивает, и послушивает.
- Яҡшы.

***Һығымта:*** Әҫәрҙең сиселеш өлөшөн асыҡлау өсөн, урынлы ғына мәҡәл ҡулланыу һәм аңлатып китеү, файҙалы эш төрҙәренең береһе. Баланың фекерләүе лә үҫешә, телмәре лә байый.

- Шулай итеп, хөрмәтле коллегалар, минең бөгөнгө оҫтаханамда билингивизм шарттарында уҡыусыларҙың туған телендә фекерләү эшмәкәрлеген үҫтереү һәм әҙәби әҫәргә анализ яһау алымдары, эш төрҙәре күрһәтелде. Һеҙ бөгөн минең "Оҫталыҡ класы"мдан нимәгә өйрәндегеҙ? Һеҙгә оҡшанымы?

- ***Рефлексия*** (ҡояш һүрәте менән мин бөтөрөп ҡуям, һәр уҡытыусыға 3 төрлө ҡояш нурҙарын бирәм. Һары – оҡшаны, аҡ – бик оҡшап етмәне, зәңгәр - оҡшаманы ).

(Тағы ла әйтеп китергә була )

Рефлексияны мөмкин:

1. Төрлө смайликтар менән эшләргә;

2. Гаджет менән тест формаһында;

3. Венн диаграммалары ярҙамында образдарға ҡылыҡһырлама (характеристика) биреү.

- Тимәк, бөгөнгө оҫтаханам һеҙгә оҡшаған. Үҙегеҙ өсөн күп нәмә алғанһығыҙ, өйрәнһегеҙ. Һеҙгә барыһы өсөн дә ҙур рәхмәт.

Уҡыусы йәнле телмәре уйындар менән ни тиклем иртәрәк танышһа, уның һүҙ байлығы тиҙерәк арта. Дәрестә мәҡәл – әйтемдәр, тиҙәйткестәр, һынамыштар ҙа әүҙем ҡулланыла. Был йәнле һөйләү телен үҫтерә, баланың фекерләүен әүҙемләштерә.

**Нәбиева Гөлназ Рәис ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 52-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

*Хәйерле көн, хөрмәтле жюри ағзалары, коллегалар!*

Иғтибарҙы экранға йүнәлтәйек.

*(видеояҙманы ҡуй)*

Күреүебеҙсә, респонденттар бөтә һорауҙарға ла дөрөҫ кенә яуап бирә алманы. Бигерәк тә йәш быуын вәкилдәре халҡыбыҙҙың ҡомартҡылары, әҙәби мираҫы менән һирәк ҡыҙыҡһына. Хәҙерге көндә мәғлүмәти-коммуникацион технологиялар, гаджеттар, компьютер технологиялары алға киткән заманда был көнүҙәк проблемаларҙың береһенә әйләнде. Халҡыбыҙҙың матур йолаларын тергеҙеү, әҙәби мираҫын йәш быуынға еткереү – башҡорт теле уҡытыусыһының изге бурысы.

Шулай итеп, һеҙҙең иғтибарға «Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ» темаһына *оҫталыҡ дәресемде* тәҡдим итәм.

***Эшемдең маҡсаты:*** башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың этномәҙәни компетентлығын формалаштырыусы отошло алымдар менән таныштырыу, эш тәжрибәм менән уртаҡлашыу. Бурыстарҙы һеҙ слайдта күрәһегеҙ.

"Урал батыр" эпосы ижад ителгән осор менән беҙ йәшәгән заман араһында тиҫтәләгән быуат ята. Әҫәрҙә бөгөнгө көнгә ауаздаш фәһемле фекерҙәр бихисап, сөнки ул – тәрән фәлсәфәүи әҫәр.

Эпоста башҡорт халҡының асылы, тарихы, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йәшәү мәғәнәһе, изгелек һәм яуызлыҡ, үлем һәм үлемһеҙлек кеүек мәңгелек төшөнсәләр үҙенсәлекле итеп сағылдырылған.

Беҙ бөгөн шул әҫәргә таянып, үҙемдең практикамда йыш ҡулланған алымдарҙы ҡарап китәсәкбеҙ. Эште төркөмдәрҙә башҡарасаҡбыҙ.




- Беренсе төркөм пазл йыйып, эпоста бирелгән мәҡәлде уҡып ишеттерәсәк. Бының өсөн һеҙгә тәүҙә ребусты дөрөҫ сисер кәрәк. Ребус шулай уҡ һеҙҙең алдығыҙҙа ла бар.

*Урында эшләйҙәр, аҙаҡ таҡтаға сығып беркетәләр.*

- Икенсе төркөм, һеҙ таҡта янына сығып, ошо пазлды йыяһығыҙ. Рәхим итегеҙ.

*(таҡтаға сығар)*

- 1-2 төркөмдәр эштәрен башҡарғансы, 3-сө төркөмгә Wordvoll системаһында интерактив күнегеүҙәр эшләргә тәкдим итәм. Әлбиттә, уҡыусыларҙың телмәрен шымартыу, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйттереү маҡсатынан сығып, һорауҙарҙы уҡыусыларҙың үҙҙәренән уҡытабыҙ, яуаптарын тыңлайбыҙ. Коллегалар, рәхим итегеҙ.

*(ике кешене сығар, һорауҙы уҡыйҙар, дөрөҫ яуапты әйтәләр)*

- Рәхмәт, коллегалар. Ә бындай эште беҙ ниндәй маҡсаттан сығып эшләтәбеҙ? *(теманы ҡабатлайҙар, иҫкә төшөрәләр. Бәйләнешле телмәр үҫешә. Хәтер һәм фекерләү кеүәһе үҫешә).*
- Эйе, дөрөҫ. Рәхмәт, коллегалар.
- Хәҙер төркөмдәрҙең эштәрен тикшереп китәйек. Беренсе төркөм, рәхим итегеҙ. Йыйған тексығыҙҙы тасуири итеп уҡып ишеттерегеҙ әле.

*(ҡысҡырып уҡыйҙар)*

- Был юлдар тураһында нимә әйтә алаһығыҙ? *(эпостан өҙөк)*
- Кемдең һүҙҙәре ? *(үлемһеҙ карттың һүҙҙәре)*
- Эйе, әлбиттә. Рәхмәт, коллегалар.

- Ғөмүмән, пазлдарҙы төрлөсә эшләргә була. Визитка этабында күрһәтеп киткәнемсә, икенсе яғына мәҡәл йә текстарҙы рус һәм инглиз телендәге тәржемәләрен бирергә лә мөмкин. Шулай уҡ, йөкмәткеһенә тура килтереп, һүрәт тә бирергә була.
- Хәҙер һеҙ ошо пазлды әйләндереп ҡуйығыҙ әле. Рәхмәт.
- Ниндәй һүрәттәр алынған? *(эпос персонаждары һәм ундағы географик атамалар)*
- Коллегалар, әммә был эште лә беҙ маҡсатһыҙ эшләтмәйбеҙ. Һүрәттәрҙең урынлаштырылыу тәртибен дә уйлап ҡуйыр кәрәк. Ниндәйҙер логикаға ҡоролған булһалар, бигерәк тә уңышлы була.
- Бына был һүрәттәрҙең урынлаштырылыу тәртибе тураһында нимә әйтә алаһығыҙ? *(һәр юлда сюжет линияһы бирелгән, йәғни теге йәки был геройҙың үткән юлы. Һәм балалар өсөн иң ҡыҙыҡ момент – шул геройҙар менән бәйле теге йәки был географик объекттарҙың, уларҙың атамаларының килеп сығышы күренеп тора. Ошо пазлға ҡарап ҡына, улар күп ваҡыт үткәс тә эпостың эстәлеген еңел генә итеп иҫкә төшөрә ала. Предмет-ара бәйләнеш булдырыла – география, астрономия, һынлы сәнғәт һ.б. предметтар менән)*
- Хәҙер икенсе төркөмдөң эшен ҡарап китәйек. Коллегалар, ребусты сисә алдығыҙмы? Ниндәй мәҡәл килеп сыҡты? Йәбештерегеҙ мәҡәлегеҙҙе. *(батыр атанан ҡот йыйған, матур әсәнән һөт имгән)*

*сығып таҡтаға мәҡәлде беркетәләр, ҡысҡырып уҡыйҙар*

- Мәҡәлдең мәғәнәһен дә аңлатып китһәгеҙ, бик яҡшы булыр ине (ата-әсә тәрбиәһе тураһында. Бала ғаиләлә нимә күреп үҫә, тормошта ла шундай була).
- Дөрөҫ, рәхмәт. Ә ошо мәҡәлгә мәғәнәһе буйынса тап килгән тағы ниндәй мәҡәлдәрҙе беләһегеҙ? *(атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән тун бескән)*
- Ә эпоста тағы ниндәй мәҡәлдәр осрай? Иҫләйһегеҙме? *(яуаптарын ишетмәйсә, слайдты асма!!!)*
- Коллегалар, ә бындай эш төрҙәрен ниңдәй маҡсатты күҙ уңында тотоп эшләтәбеҙ?

*Уҡыусыларға ҡыҙыҡ, ялҡмайҙар.*

*Фекерләү ҡеүәһе, хәтерҙә ҡалдырыу еңеләшә,*

*предмет-ара бәйләнеш булдырыла, бәйләнешле телмәр үҫешә.*

Эйе, дөрөҫ, рәхмәт.

Шулай уҡ, коллегалар, һәр ваҡытта класта төрлө балалар ултырғанын күҙ уңында тотор кәрәк. Мәҫәлән, мөмкинлектәре сикле (үҙенсәлекле балалар тип тә әйтәбеҙ), йәғни, инклюзив белем алыусы уҡыусылар бар икән, уларға индивидуаль эштәр бирергә кәрәк. Уларға пазлдарҙы еңеләйтеп эшләйбеҙ, әлбиттә. Унда текстан еңелерәк һөйләмдәр алырға була. Йәки, мәҫәлән, текстан геройҙарҙы яҙырға тип әйтергә була һ.б. Әммә улар иғтибарҙан ситтә ҡалып, үҙҙәрен ситләтелгән итеп тойорға тейеш түгел.

Ундай балаларға бигерәк тә сенсор үҙләштереү яҡын. Йәғни, предметты тотоп ҡараһалар, хәтерҙәренә нығыраҡ һалына. Шундай предметтарҙы дәрескә тотоп килеү ҙә бик уңышлы буласаҡ.

Коллегалар, шулай уҡ минең уҡыусыларым «5 секунд» уйынын бик яраталар. Был бигерәк тә дәрес башында үткән теманы, йә һүҙлек һүҙҙәрен ҡабатлау, иҫкә төшөрөү маҡсатында ҡулланыу бик отошло.

*(карточкаларҙы күрһәт)*

Ошондай карточкаларҙа һүҙҙәр йә ҡыҫҡа ғына һорауҙар яҙам. Улар 5 секунд эсендә һүҙҙәрҙе тәржемә итәләр йә һорауға яуап бирәләр.

- Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә уйнап алайыҡ.

*«5 секунд» уйыны*

Афарин, коллегалар. Матур итеп ҡатнашып ултырғанығыҙ өсөн рәхмәт. Оҫталыҡ класым оҡшанымы? Үҙегеҙҙең тәьҫорттарығыҙ менән бүлешеп, теләктәрегеҙҙе лә әйтеп китһәгеҙ, бик шат булыр инем.

Рәхмәт, коллегалар. Яуаптарығыҙ һәм матур теләктәрегеҙ өсөн.

Шулай итеп, ошо алымдарҙы ҡулланып, рус мәктәбендә лә бөйөк эпосыбыҙҙы ла анализларға була. Иң мөһиме – ошо әҫәр аша беҙ баланың күңеленә яҡшылыҡ һәм изгелек, ата-әсәгә ҡарата хөрмәт, киң күңеллелек һәм ихласлыҡ, һүҙендә тороу кеүек төшөнсәләрҙе һалырға тейешбеҙ. Бала уларҙы һеңдерә һәм уның аңында улар ниндәйҙер бер образ булып ята. Тора-бара ул образдар йыр йә шиғыр булып тыуырға ла мөмкин. Ә кемдер уны, ошо фотолағы кеүек, арт-объект итеп тә тыуҙырырға мөмкин.



Был графити ҡасан һәм ҡайҙа барлыҡҡа килгән, кем белә?

2022 йылдың сентябрь айында Аксаков урамының 60-сы йортонда эшләнгән ул. Авторҙары – рус рәссамы Антон Заболотний һәм ҡатыны.

Тимәк, ошо рус милләте вәкилдәренә ҡасандыр тап башҡорт теле уҡытыусыһы аңдарына ошо образды алып барып еткерә алғандыр, тигән уй тыуа. Сөнки был эпос тик башҡорт теле дәрестәрендә генә үтелә.

Тимәк, киләсәк быуында ышаныс һәм өмөт бар, тигән матур уйҙар менән,ең һыҙғанып, тағы ла дәртләнеберәк яраткан эшебеҙҙе дауам итергә генә ҡала.

- Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

**Әхмәдйәнова Фидания Тәфкил ҡыҙы,**
**Өфө ҡалаһының 94-се лицейының**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы**

Һаумыһығыҙ. Мин Әхмәдйәнова Фидания Тәфкил ҡыҙы ***“Әкиәттә - хәҡиҡәт”*** темаһына оҫталыҡ дәресе тәҡдим итәм.

Эшемдең маҡсаты һәм бурыстары.




“Баланың тәүге фәне – әкиәт.
Әкиәт – тәүге тәрбиәсеһе.
Ул балаға иң аңлайышлы донъя”.

Рәми Ғариповтың был һүҙҙәре менән килешмәйсә булмай. Меңәр йылдар дауамында ҡулланылып, яҡшы һөҙөмтәләр биргән әкиәттәр һис ҡасан актуаллеген юғалтмаясаҡ. 5-9 кластар өсөн дәреслектәрҙе ентекле өйрәнгәндән һуң тыуған фекерҙәрем менән бүлешеп үтмәксемен.




Әкиәттәрҙе мин кешелек донъяһы ҡаҙанышы булған мәшһүр “Урал батыр” эпосын өйрәнеүгә, аңларға булышлыҡ итеүсе инеш итеп күрәм. Д. Бүләков һүҙҙәре менән әйткәндә: “Йылғалар кескәй инештәрҙән башланған кеүек, ҙур эштәр ҙә бәләкәсенән барлыҡҡа килә”. Әкиәттәрҙәге образдар меңәр йылдар аша үтеп беҙҙең тормошобоҙҙа ла бик ҙур урын алып тора, шул уҡ ваҡыта баланың кескәй йөрәгенә, күңеленә үтеп инеп халҡыбыҙҙың ижади һәләттәрен, тормошҡа ҡараштарын, ынтылыштарын, идеалдарын билдәләргә ярҙам итә.

Әйҙәгеҙ әле коллегалар әңгәмәләшеп алайыҡ.

- Әкиәттәрҙе ни өсөн уҡырға тейешбеҙ?

Тематик йәһәттән уларҙы 4 төркөмгә бүлеп ҡарарға күнеккәнбеҙ. Әйҙәгеҙ шуларҙың һәр береһенә туҡталып үтәйек.

*Тылсымлы әкиәттәр.*

- Улар ни өсөн кәрәк?
- Баланы уңышҡа алып киләме?
- Ошо әкиәттәрҙә бөгөнгө технологик прогрестарҙы күрәбеҙ түгелме? *(Слайд 5)*

Осоусы баластар – самолет һ.б.,
Тиҙ йөрөүсе итектәр – сапоги скороходы,
Скатерть самобранка – кейтеренг бизнесы һ.б.

Тылсымлы әкиәттәр белем алыуға мотивация тыуҙыра, креатив фекерләүҙе үҫтерә, төрлө йүнәлештә эҙләнеүҙәргә, асыштарға килтерә.

*Хайуандар тураһында әкиәттәрҙе ни өсөн уҡырға тейешбеҙ?*

Улар иғтибарлыҡты, күҙәтеүсәнлекте арттыра. Тормошта үҙ урыныңды табырға йүнәлеш бирә. Йәмғиәттә беҙҙе уратып алған кешеләрҙең психологияһын, бигерәк тә "битлек кейгәндәрҙең" ысын йөҙөн күрә белергә, һаҡ булырға өйрәтә, ғөмүмән тормошҡа әҙерләй.

*Тормош-көнкүреш әкиәттәре.*

Тәрбиә йәһәтенән иң көслө йүнәлеш тип әйтһәк, хата булмаҫтыр. Әйҙәгеҙ, миҫал өсөн 7 класс дәреслегенә ингән "Алтын башаҡ" тигән башҡорт халыҡ әкиәтенә туҡталып үтәйек. Йөкмәткеһен барығыҙ ҙа беләләр тип уйлайым.

Әсә – улдарын алдай, хәйләгә бара.

- Ни өсөн?

Хәйлә ярҙамында әсә – конфликт тыуҙырмай ғына – проблеманы хәл итә. Мәжбүр итмәй, ипләп кенә "байлыҡ – еңел бирелмәгәнлекте" аңлатыуға ирешә, дөрөҫ йәшәргә йүнәлеш бирә. Бик матур тәрбиә өлгөһө, тип һығымта яһай алабыҙ. Шулай итеп, был әкиәттә әсәйҙәрҙең хәстәрлеген, зирәклеген күрҙек.

Әлбиттә, тормош-көнкүреш әкиәттәрендә зәһәр үгәй әсәне лә, төрлө характерлы геройҙарҙы осратабыҙ. Тәрбиә нигеҙҙәре ғаиләлә һалынғанына ишаралай улар. Был төркөмгә ҡараған әкиәттәрҙе хаҡлы рәүештә әсәйҙәр, йәки тәрбиә мәктәбе – тип атарға була.

*Батырҙар тураһында әкиәттәр.*

Әйҙәгеҙ бергәләп һорауҙарға яуап эҙләп ҡарайыҡ.

- Башҡорт халҡы үҙ батырын ниндәй итеп күрә?

Улар – батыр, матур, ғәҙел, ҡыйыу, еңеүсе, халҡына хеҙмәт итеүсе, изге маҡсаттар менән йәшәй. Беҙҙең әкиәттәрҙә үс алыу, үлтереш пропагандаһы юҡ.

- Батша ҡыҙы нисек итеп кейәү һайлай?
- Кейәү егете ниндәй 3 шартты үтәргә тейеш?

Көрәшә, мәргәнлеген һынай, йомаҡ- һорауға яуап ҡайтара.

- Ни өсөн тап ошо ярыш төрҙәре һайланған, нисек уйлайһығыҙ?

Тәүге ярыш егеттең физик сәләмәтлеген күрһәтә – көслө, күҙе яҡшы күрә...
Икенсе ярыш егеттең психиэмоциональ яҡтан тотороҡло булыуын дәлилләй – үҙ-үҙен ҡулда тота, һалҡын ҡанлы, маҡсатлы...
Ә инде өсөнсө шартты үтәп егет тапҡырлығын, зирәклеген, аҡыллы, белемле икәнен иҫбатлай.

Тимәк, батша ҡыҙы ошондай ир-егет менән яҙмышын бәйләп бәхетле киләсәккә иҫәп тота: беренсенән – сәләмәт быуын (балалар) ҡалдырасаҡ, икенсенән – киләсәктә яҡлаулы һәм һаҡлаулы буласаҡ, мәргән уҡсы ғаиләһен ас ҡалдырмағаны көн кеүек асыҡ, аҡылы булған кеше – тормошта бер ваҡытта ла юғалып ҡалмай.

Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙе өйрәнгәндән һуң уларҙы “Атайҙар мәктәбе” тип атау урынлы булыр ине тигән фекер тыуа. Бер ҙә юҡтан ғына халҡыбыҙ “Атанан күргән – уҡ юнған” – тимәгән.

Әкиәттәр тураһында һүҙ сыҡҡанда, беҙ шулай уҡ быуындар бәйләнеше тураһында оноторға тейеш түгелбеҙ. Элек-электән өләсәйҙәр әкиәт аша бала күңеленә тәрбиә орлоғо сәскән. Ошо йолаларҙы ҡабат тергеҙергә кәрәк. Мәҫәлән, “Һаумы, һаумы, әкиәт” конкурсында “Иң шәп әкиәтсе өләсәй” номинацияһы булдырыу уларҙы әүҙемләштерер ине.

Был тема, әкиәт текстары һеҙгә таныш булғас, әңгәмә еңел һәм ҡыҙыҡлы бара. Ә уҡыусылар менән дә шулай эшләү өсөн уларҙың текст йөкмәткеһен белеүе мотлаҡ. Шул саҡта ғына фекер алышыу, дисскуссия ҡыҙыҡлы була, уҡыусыларҙың әүҙемлеге арта. Уларҙағы фантазияның иге-сиге юҡ. Нисек кенә итеп балаларҙы әкиәт уҡырға йәлеп итергә тигән һорау тыуа. Беҙ балаларға әкиәт уҡырға кәрәк тип әйткәндән генә улар әкиәт уҡый башламаясаҡ. Белем биреүҙә эҙмә-эҙлелек, дауамсылыҡ булыу мотлаҡ.

Бөгөнгө көндө китапты, телевизор, компьютер һәм башҡа техник саралар алыштыра. Уларҙы ла беҙ үҙебеҙҙең файҙаға ҡуллана алабыҙ. Ошондай шарттарҙа уҡыусыларҙа китапҡа ҡарата һөйөү тәрбиәләүҙе әкиәттәрҙән (йәнһүрәттәрҙән) башлау иң отошлоһо тип уйлайым.

Мин үҙ эшемдә ҡыҙыҡһындырыу сараһы итеп юғары сифатлы ҡушымталар, видеолар, йәнһүрәттәр ҡулланам. Шуларҙың бер-нисәһенә туҡталып үтәйек.

1. Кескәйҙәр өсөн “Балалар” проекты. Авторҙары Рүзилә һәм Илдар Кинйәбулатовтар. Улар бигерәк тә башланғыс кластарҙа балаларҙы тел мөхитенә йәлеп итеүҙә ҙур ярҙамсы. Дәрестең төрлө этаптарында ҡулланырға була. *(Слайд)*
2. “Хәйләкәр төлкө” мобиль ҡушымтаһын да отошло тип уйлайым. Уҡыусыларға ул бик оҡшай. Бала үҙенә оҡшаған эш төрөн һайлай ала, ә иң мөһиме уның ике телдә булыуы. Тәжрибә буйынса әйтә алам, уҡыусылар тәүҙә башҡорт телендәге вариантты һайлайҙар, сөнки улар үҙҙәренең башҡорт телен аңлау кимәлен тикшерә. Уларҙы дистанцион уҡытыу мәлендә ҡулланыу отошло, өйгә эш итеп тә биреп була. Бындай форматтағы ҡушымталарҙың күберәк булыуын теләр инем.
3. “Әкиәт китабы” Тамыр студияһы төшөргән тапшырыуҙар шәлкеме. Уларҙы мин тел уҡытыусылыры өсөн генә түгел, ата-әсәләр өсөн дә хазина тип атар инем. Сөнки бында йәнең теләгәнде табып була – йырҙар ҙа, һорауҙарға яуаптар ҙа, милли колоритлы декорациялар, ә иң мөһиме – тел мөхите.

   Был материалдар ярҙамында һүҙлек, тәржемә эштәре, тыңлап - ҡарап аңлау, диалогтар төҙөү кеүек эштәр башҡарып була. Иң әһәмиәтлеһе – фекер алышыуҙа тыуған ҡыҙыҡлы энгәмәләр, фекерҙәр баланы уйландыра, әүҙемләштерә.
4. Шулай уҡ уҡыусылар өсөн ҡыҙыҡлы, заманса “Бал ҡорттары” шәлкемендәге йәнһүрәттәрҙән өҙөктәр ҡулланыу эшебеҙҙә ыңғай һөҙөмтәләргә килтерә. Сөнки бында көндәлек тормошта була торған, йәки булырға мөмкин һөйләшеүҙәрҙе күрәбеҙ. Ә улар баланың йәшәйешенә, күңел торошона бик яҡын. Шуға уларҙың тәьҫире көслө. Бөгөнгө көндә уҡыусыларҙа ыңғай эмоциялар уятыу еңелдән түгел. Был йәнһүрәттәр ярҙамында күреп, тыңлап аңлау, тәржемә итеү, диалогтар ҡороу, сәхнәләштереү алымдарын еңел һәм ҡыҙыҡлы итеп ойоштороп була.

   Минең уйымса, булған ошондай әйберҙәрҙе ҡулланмау – гөнаһтыр ул.

Бөгөн беҙ рухи ярлылыҡтан ҡотолоу юлдарын эҙләйбеҙ.

Уҡыусыларҙы әүҙемләштереүсе, телгә, әҙәбиәткә ылыҡтырыусы бер сихри көс бар. Ул да булһа, халыҡ педагогикаһының аҫыл өлгөләре – әкиәттәр. Улар заманса йәнһүрәт формаһында булһа бигерәк тә отошло. Быны Хөкүмәтебеҙ тарафынан булдырылған программалар, гранттар, эштәр дәлилләй. Быйыл түҙемһеҙләнеп “Төньяҡ Амурҙары” әкиәтенең экрандарға сығыуын көтәбеҙ! Бөгөнгө көндә генә түгел, халҡыбыҙ өсөн рух, атайсал, тыуған ер темаһы һәр саҡ актуаль булған. Аямай йәнен ғәзиз ерен һаҡлаған.




Быуаттар аша беҙгә мираҫ булып ҡалған халыҡ педагогикаһының хазиналарын йәш быуынды тәрбиәләүҙә файҙаланыу мөмкинлектәре бихисап. Уларҙы системалы рәүештә, дөрөҫ, һөҙөмтәле ҡулланһаҡ, дәрестәребеҙҙең сифаты күтәлелер ине. Киләсәктә белемле, тәрбиәле, ижади шәхестәр тәрбиәләй алырбыҙ.

Коллегаларымдың эшен саҡ ҡына булһа ла еңеләйтер өсөн башҡорт телендәге йәнһүрәттәргә QR-код эшләп, уларҙы бер урынға тупланым. Һеҙ уларҙы минең шәхси сайтымда таба алаһығыҙ.

Хөрмәтле коллегаларым! Һеҙгә башҡорт батырының тоғро юлдашы акбуҙаттай талмаҫ ҡанатлы, уҡыусыларығыҙ өсөн илһам сығанағы, милләттебеҙҙең бәҫен күтәреүсе, телебеҙ һағында арыу-талыуҙы белмәҫ уҡытыусы остаздар булырға яҙһын!

**Пресс-конференция «Һорау йыл уҡытыусыһына»**.

***Һеҙҙең өсөн кем ул остаз? Үҙегеҙҙе остаз тип әйтә алаһығыҙмы?***

***Ильясова Л.Р.:*** Уҡытыусылыҡ минең ҡанымдан килә. Мин педагогик династиябыҙҙың өсөнсө быуыны вәкиле. Беренсе остаздарым – өләсәйем Вәриҙә Нурый ҡыҙы Ғатауллина һәм әсәйем Розалия Разаҡ ҡыҙы Йомағужина. Улар миндә баласаҡтан уҡытыусы һөнәренә ҡарата һөйөү уятты, ә инде уҡытыусы һөнәренә эйә булып, мәктәптә эшләй башлағандан бирле һәр ваҡыт кәңәшсе, ярҙамсы булып торалар. Тағы ла, үҙемдең коллегам, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Миләүшә Нурулла ҡыҙы мине эшемдә ҡанатландырыусы, дәртләндереүсе. Ошондай остаздарым булыуы менән бәхетлемен!

Үҙем дә йәш коллегаларыма башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың серҙәрен өйрәтәм. Бер нисә йыл рәттән ошо бәйгелә ҡатнашҡан коллегаларыма, эш тәжрибәһе менән уртаҡлашып, ярҙам итеп килдем.

***Башҡорт теле уҡытыусыһы башҡорт телен донъя кимәленә нисек сығара ала?***

***Ильясова Л.Р.:*** Әлбиттә, уҡыусылары аша. Әгәр, уҡытыусы балаға башҡорт теленә ҡарата һөйөү уятһа, ул бар донъяға данлай алырҙай шәхес буласаҡ.

***Алдынғы тәжрибәне республикаға әүҙем таратыу өсөн нимәләр эшләргә була?***

***Ильясова Л.Р.:*** Эш тәжрибәм менән уртаҡлашыу маҡсатында үҙемдең эш практикамда ҡулланған эш карталарын туплап "Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) телен өйрәнеүсе 5-6 кластар өсөн күнегеүҙәр йыйынтығын" сығарыуға ирештем. Үҙемдең шәхси сайтым бар. Унда үҙемдең эш тәжрибәм менән уртаҡлашам. Киләсәктә инде электрон күнегеүҙәр йыйынтығы эшләргә тигән хыялым бар.

***Ни өсөн конкурста ҡатнашырға булдығыҙ?***

***Ильясова Л.Р.:*** Мәртәбәле бәйгегә тәүге тапҡыр сығыуым. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн уҙғарылған профессиональ конкурстарҙа даими ҡатнашып киләм. Үҙемдең эш практикам менән уртаҡлашыу, профессиональ яҡтан тағы ла белемде камиллаштырыу маҡсаты менән "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсына сыҡтым.

***Конкурста ниндәй яңылыҡтар алдығыҙ. Кемдең эш тәжрибәһе бигерәк тә ныҡ оҡшаны?***

***Ильясова Л.Р.:*** Конкурс барышында коллегаларым тәҡдим иткән яңы уҡытыу технологиялары, алымдары менән танышып, эш тәжрибәмде тағы ла бер баҫҡысҡа күтәрҙем. Республикабыҙҙың төрлө район һәм ҡалаларынан, башҡорт телен өйрәнгән региондарҙан килгән коллегаларымдың сығыштарын һоҡланып тыңлап, улар менән аралашып, эш алымдары менән бүлештек. Бигерәк тә Гөлназ Рәис ҡыҙы Нәбиеваның башҡорт халыҡ педагогикаһына таянып эшләгән эш алымдары, Гүзәл Дамир ҡыҙы Ноғоманованың һәм Гөлсибәр Исҡәнйәр ҡыҙы Шакированың дәрестә ҡулланған интерактив уйындары ҡыҙыҡһындырҙы.

***Мәғариф һәм фән министры булһағыҙ, белем биреү өлкәһендә ниндәй үҙгәрештәр индерер инегеҙ?***

***Ильясова Л.Р.:*** Мәктәпкә килгән йәш белгестәргә иғтибар бирер инем. Уларға методик яҡтан ғына түгел, ә матди яҡтан да ҙур ярҙам булғанда ғына, уҡытыу системаһында күберәк йәш белгестәребеҙ ҡалыр ине.

***"Башҡортостан уҡытыусыһы" журналын яҙҙыраһығыҙмы? Журналдан ниндәй ярҙам көтәһегеҙ?***

***Ильясова Л.Р.:*** Эйе, журналдың һәр һанын көтөп алам. Бала саҡта уҡ ҡыҙыҡһынып әсәйемдең эш өҫтәленән алып уҡып бара торғайным. "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы миңә студент йылдарында ла, практика үткән ваҡытта ла, бөгөн дә ҙур ярҙамсы, заман менән алға илтеүсе.

***Журналға ниндәй үҙгәрештәр индерер инегеҙ? Ниндәй темаға мәҡәләләр кәрәк?***

***Ильясова Л.Р.:*** Журналдың эстәлегенә ингән бүлектәр менән тулыһынса ҡәнәғәтмен.

***Кем ул заман уҡытыусыһы?***

***Әхмәдйәнова Ф.Т.:*** Мин үҙемде заман уҡытыусыһы тип уйлайым. Ошо мәртәбәле конкурстың финалына килеп етеүем быны дәлилләй. Заман уҡытыусыһы уҡыусыларына бар яҡтан дә өлгө булырға тейеш.

***Уҡытыусы булмаһағыҙ, кем булыр инегеҙ?***

***Әхмәдйәнова Ф.Т.:*** Мин уҡытыусы һөнәрен һайламаған булһам, журналист булыр инем. Сөнки мин ҡыҙыҡһыныусан кеше. Бар яңылыҡтарҙың үҙәгендә булып, уларҙы киң ҡатлам уҡыусыларына тәүгеләрҙән һәм дөрөҫ итеп халыҡҡа еткерер инем. Ҡайҙа ғына, кем булып эшләһәм дә, Республикамды, халҡымды данлар инем.

***Нимә ул рух һәм башҡортлоҡ?***

***Әхмәдйәнова Ф.Т.:*** Башҡортлоҡ – ул кешенең булмышында, һәр күҙәнәгендә була торған Хоҙай тарафынан бүләк ителгән бер сер. Ул кешене ғүмере буйына оҙатып бара. Ул кешенең эшендә лә, ашында ла, шатлығында ла, ҡайғыһында ла, исемендә лә, есемендә лә, йырында ла, бейеүендә лә сағылыш таба. Минең уйлауымса, рух һәр кемдә лә була торған юғары ҡиммәттәр тупланмаһы. Кемдәлер ул ярлы, кемдәлер бик бай, үкенескә ҡаршы, милләттәштәребеҙҙең күбеһендә ул әлегә "йоҡлай". Уны байытыр йәки уятыр өсөн милләттәребеҙҙе бергә туплаҙай саралар үткәреү, йола-байрамдарҙы тергеҙеү кәрәктер. Минеңсә, милләттең көсө лә, киләсәге лә берҙәмлек менән рухҡа бәйле. Берҙәм, рухлы башҡорттар булайыҡ!

***Һөнәрегеҙҙә иң ауыры нимә?***

***Әхмәдйәнова Ф.Т.:*** Мин һәр саҡ милли үҙаңы ныҡ булған, ғаилә ҡиммәттәрен юғары баһалаған милләттәргә һоҡланып ҡарайым. Сөнки был халыҡтарҙа телгә, мәҙәниәткә, йолаларға булған талаптар тотороҡло рәүештә үтәлеп килә. Ә беҙҙең халыҡҡа, киреһенсә – оялсанлыҡ, артыҡ түҙемлек, күндәмлек хас. Башҡорт милләтенән булған балаларҙа ошо һыҙаттарҙы күреп әсенәм. Ҡарар ҡабул итә алмайынса, икеләнеп ултырып, алға китеп булмай. Уҡыусыларыбыҙҙы төрлө сараларға, конкурстарға әҙерләп, уларҙың талантын асырға ярҙам итеүҙе бурысым тип һанайым. Балаларҙы киләсәккә ышаныс менән ҡарарға өйрәтергә кәрәк. Уңышҡа ирешер өсөн тырышлыҡ, маҡсатлы булыу, тәүәккәллек, яуаплылыҡ, аралаша белеү кеүек һыҙаттарҙы үҫтереү йүнәлешендә эшләйбеҙ. Уҡыусыларымдың уңышы – минең эшемдең күрһәткесе. Башҡорт телен уҡытыуҙың ҡыйын да, шул уҡ ваҡытта ҡанатландырған мәле лә шулдыр. Һәр уңыш нигеҙендә иңгә-иң терәп башҡарған ҙур хеҙмәт ята. Уҡыусы остазынан юғарыраҡ баҫҡыстарға күтәрелергә тейеш!

***«Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2023»***
***конкурсы сиктәрендә***

**Кәримов Салауат Ғайса улы,**
**«Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле**
**һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы» конкурсының жюри рәйесе,**
**«Башҡортостан уҡытыусыһы» журналының баш мөхәррире**

**«Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2023»**
**төбәк-ара конкурсы «Педагогик эшмәкәрлекте презентациялау»**
**этабына методик кәңәштәр**

Матур традицияға әйләнгән, ысын мәғәнәһендә оҫталыҡ һәм тәжрибә мәктәбе булараҡ танылған “Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы” һөнәри конкурсы йыл да шаулап-гөрләп уҙа.

Ҡалабыҙ Өфөлә тырышып эшләп йөрөгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының алдынғы ҡараштарын, асыштарын, эш тәжрибәләрен күрһәткән рух һәм белем байрамы булараҡ һоҡландыра был конкурс.

Һәр ярышҡа хас булғанса, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ҡатнашҡан был һөнәри конкурстың да үҙенең талаптары, бурыстары һәм баһалары бар. Туған тел уҡытыусылары араһындағы конкурс педагогтар өсөн бер яҡтан һынау булһа, икенсе яҡтан ижади эшмәкәрлекте күрһәтеү ҙә булып тора.

Конкурс, мәғлүм булыуынса, 4-5 этаптан тора. Ҡатнашыусы өсөн һәр этап та оло яуаплылыҡ талап итә. Педагогик оҫталыҡты күрһәткән конкурс өсөн төп ярыш этабы – дәрес үткәреү, әлбиттә. Уҡытыусы һәр этапта ла ныҡлы әҙерлекле ҡатнашырға бурыслы.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һәр эштең дә башы, йәки һөҙөмтәһе булғандай, уҡытыусылар конкурсының да “Педагогик эшмәкәрлегендә визит карточкаһы” исеме менән үткән беренсе аҙымы – конкурста ҡатнашыусы уҡытыусылар өсөн бик мөһим һәм яуаплы һынау мәле, тип әйтергә мөмкин.

Был этапта конкурсанттар үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән ҡыҫҡаса таныштыра, педагогик эшмәкәрлеге хаҡында һөйләп, ниндәйҙер кимәлдә баһа бирә, отошло яҡтарын башҡаларға күрһәтергә тырыша.

Уҡытыусы-конкурсант үҙенең эшмәкәрлеген билдәле бер методик темаға нигеҙләп ойоштора. Ошонан сығып, белем биреүҙәге актуаль һәм стандарт булмаған проблемаларҙы күрә белергә бурыслы. Конкурс башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында барғанлыҡтан, күп теллелек шарттарында уҡыусыларҙы туған (башҡорт) телендә фекерләүен, һөйләшеүен тәьмин итеү һәм үҫтереү, туған телдәрҙе башҡа телдәр менән сағыштырма өйрәнеү, дәрестәрҙә компьютер технологияларын ҡулланыу, предмет-ара бәйләнеш булдырыу кеүек мөһим йүнәлештәргә тәү сиратта иғтибар итергә кәрәк.

Әлбиттә педагогтың телмәр грамотаһына, фекерен уҡыусыларға асыҡ итеп туған телдә еткерә алыуына, һөйләү һәм аңлатыу оҫталығына төп иғтибар бүленә.

Яңы заман уҡытыусыһына һөнәри компетенцияһын күтәреүҙә яңы технологияларҙы, мәғлүмәт сығанаҡтарын һәм белем биреү ресурстарын урынлы һәм оҫта ҡулланыу мөһим. Интернет-платформаларҙы һәм ҡушымталарҙы дөрөҫ файҙаланып, интерактив уйындар аша башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы уҡыусы күңеленә тура юл һала. Туған телебеҙҙе тиҙерәк һәм ныҡыраҡ өйрәнеүгә булышлыҡ итә.

Эш тәжрибәһе менән уртаҡлашып сығыш яһағанда, педагог терминдарҙың дөрөҫ ҡулланылышына иғтибар итергә, фактик хаталанырға юл ҡуймаҫҡа, логик эҙмә-эҙлелектән тайпылмай, ышаныслы сығыш яһарға бурыслы.

Бөгөнгө көндә белем биреү менән бер рәттән тәрбиә эшенә, айырыуса патриотик тәрбиәгә, гражданлыҡ позицияһын формалаштырыуға ныҡлы иғтибар итергә кәрәк. Үҙ белеменең, уҡытыусы һөнәренә ҡарашының киңлеген һәм тәрәнлеген сағылдырған педагогты мотлаҡ уңыш көтәсәк!

Һөнәри конкурс – ҡатнашыусы һәр педагог өсөн эшендә һәм тормошонда ижади майҙансыҡ та, киләсәккә үҫеш баҫҡысы ла ул.

**Йәғәфәрова Гөлназ Нурфаез ҡыҙы,**
**РФА ӨФТҮ ТТӘИ тел ғилеме бүлеге мөдире,**
**филология фәндәре докторы**

## «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2023» төбәк-ара конкурсы «Дәрес» этабына методик кәңәштәр

2023 йыл Рәсәй Федерацияһында “Педагог һәм остаз йылы” тип иғлан ителде. Йыл һайын үткәрелеп килгән “Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы” конкурсының быйылғыһы ошо сараларҙы асып ебәргәндәй булды, уҡытыусы һөнәренә тағы ла бер тапҡыр иғтибар бүлергә мөмкинлек бирҙе, уҡыусыларҙа был профессияға ихтирам уятырға нигеҙ булды.

Быңдай бәйгеләр ғәҙәттә белем, мәғрифәт, ижад байрамына әүерелеүсән, сөнки конкурста ҡатнашыусы һәр бер уҡытыусы үҙ эш тәжрибәһенән иң сағыу, иң отошло, иң уңышлы материалдарын күрһәтергә тырыша. Һөҙөмтәлә дөйөм методик ҡумта байып ҡала, яңы алымдар өйрәнелә, яңыса фекерҙәр ишетелә.

Конкурста жюри составында эшләп, беҙ ҙә матур эш өлгөләре менән таныштыҡ, уҡытыусыларҙың табыштарын, педагогик оҫталыҡты арттырыр миҫалдарын күрҙек. Эш барышында барлыҡҡа килгән ҡайһы бер фекерҙәр менән уртаҡлашмаҡсыбыҙ был яҙыуҙа.

Конкурс дауамында һәр бер уҡытыусының эшмәкәрлеге билдәле бер методик тема нигеҙендә ойошторолоуы – бик уңышлы алым, сөнки был тема конкурстың төрлө

этаптарында – педагогик эшмәкәрлектең визит карточкаһы, дәрес үткәреү, оҫталыҡ класы, педагогик ситуацияны хәл итеү, түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыу – үткәреләсәк сараларҙы бер үҙәккә берләштерергә, методик тәжрибәне бер бөтөн итеп күрһәтергә ярҙам итә. Быйыл күрһәтелгән методик темалар башлыса өс ҙур йүнәлеште үҙ эсенә ала: полилингвизм шарттарында туған телде өйрәнеү, дәрестәрҙә компьютер технологияларын ҡулланыу, предмет-ара бәйләнеш булдырыу. Уҡытыусылар был темаларҙы алып, үҙҙәре уҡытҡан кластарының кимәленә яраҡлаштырып, теманың бер өлөшөн ғәмәлләштереү өлгөһөн һәм һөҙөмтәһен генә күрһәтте, әлбиттә. Шуға күрә башта күрһәтелгән дөйөм методик тема ҡайһы саҡта асыҡланмай ҡалды. Бынан сығып, темаларҙы билдәләгәндә, уларҙы конкретлаштырып, тарыраҡ итеп алырға тәҡдим итер инек. Мәҫәлән, интернет-платформа тураһында һүҙ барғанда, аныҡ ҡына ҡулланылған платформа һәм уның нигеҙендә өйрәнеләсәк мәсьәләләр яҡтыртылһын ине.

Заманаға ярашлы, һәр бер һынау электрон презентация менән оҙатыла килде. Әлбиттә, күп йылғы эш тәжрибәһен 15-20 слайдҡа һыйҙырып бөтөрлөк түгел, йыш ҡына бындай презентациялар уҡытыусының отчеты формаһында тәҡдим ителде. Эш һөҙөмтәһе бик мөһим, һүҙ юҡ, шулай ҙа бәйгеселәр төп иғтибарын уңышлы алымдарға һәм уларҙы тыңлаусыларға еткереүгә йүнәлтһен ине, тигән теләк тыуҙы. Бынан тыш, бындай электрон презентациялар әҙерлек ваҡытында уҡ башҡа кеше тарафынан тикшерелеп, ҡарап сығылһын ине, сөнки яңылыш, хаталы яҙыуҙар филолог уҡытыусыны биҙәмәй, ул һөйләгәндәргә хатта шик тыуҙыра. Унан бигерәк, күпселек кешенең күрмә хәтере яҡшыраҡ булғанлыҡтан, әгәр бындай хаталы яҙыуҙар уҡыусыларға тәҡдим ителә икән, уларҙың хәтерендә лә тап ошондай хаталы яҙылыш һаҡланасаҡ.

Был мәсьәлә менән бергә икенсеһенә лә туҡталып китергә кәрәктер. Айырым уҡытыусылар методик ҡулланмалар әҙерләгән. Әлбиттә, был эш хуплана ғына, уҡытыусының методик яҡтан әҙерлекле булыуын, үҫешен күрһәтә. Ләкин ҡайһы бер ҡулланмаларҙа материалдар (биремдәр) һөйләш теле менән бирелгән (*тексты уҡың, һөйләмде яҙың* формаһында). Диалект һүҙҙәрен ҡулланыу лексиканы үткәндә, һүҙлек запасын байытыу маҡсатында ҡулланғанда бик отошло, әммә уны морфологик норма итеп күрһәтеү, әлбиттә, уҡыусыларҙың эшен ҡатмарлаштыра ғына. Уҡытыу республиканың берәй районында барһа, ерле һөйләш шарттарында алып барылһа, был, бәлки, бик уңышлы алым тип танылыр ине. Ләкин баш ҡала шарттарында, төрлө һөйләш вәкилдәре йәшәгән ерҙә, башҡа милләт балаларына башҡорт теленең әҙәби тел нормаларын өйрәтергә тейешле ерҙә биремдәрҙе һөйләш формаларында биреү үҙ-үҙен аҡламай, беҙҙеңсә.

Дәрес үткәреүҙең төп маҡсаты – белем биреү, булған белемде арттырыу. Хәҙерге заман балалары компьютер технологиялары менән бик оҫта эш итә, ҡайһы берҙә уҡытыусынан яҡшыраҡ хәбәрҙар булалар. Был шарттарҙа яңы технологияларҙы ҡулланыуҙы дәрестә яңылыҡ итеп күрһәтеп булмайҙыр ҙа. Заманса технологияларҙы файҙаланыу уйын үткәреү, лингвистик уйындарҙың материалын булдырыуға ғына ҡоролорға тейеш түгелдер. Әгәр дәрестә был технологиялар ҡулланыла икән, уларҙы ентекле итеп уйлап эшләргә, материалды, бәлки, дәреслектә күрһәтелгәндән саҡ ҡына булһа ла киңерәк алырға, күберәк төшөнсәләр, шул иҫәптән фәнни терминдар йәки фәнни мәғлүмәт индерергә тырышырға кәрәктер. Сөнки “эйе” йәки “юҡ” тигән яуаптарҙы талап иткән уйындар, карточкаларҙан билдәле бер һүрәтте һайлағыҙ кеүек биремдәр үтә ябайлаштырыуға алып килә. Һөҙөмтәлә дәрестең тәьҫир көсө кәмей, уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуы һүнә. Шуға күрә материалды һайлауға айырым иғтибар бүлеү талап ителә.

“Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы” конкурсы – яҡшы традицияға әйләнгән фекерҙәр менән бүлешеү майҙансығы, уҡытыусылар өсөн үҙ-үҙеңде һынау ғына түгел, ә киләсәккә перспектива, үҫеш баҫҡыстарын билдәләү сараһы ла. Бында тупланған тәжрибә, методик асыштар һәм ҡаҙаныштар таратыуға лайыҡ, сөнки баш ҡала уҡытыусыһы статусы үҙе үк бәйгеселәр алдына ҡуйылған яуаплылыҡты, талаптарҙы көсәйтә. Иң уңышлы методик табыштарҙы, әлбиттә, киңерәк планда матбуғат биттәрендә, методика буйынса журналдарҙа күрергә теләр инек: ыңғай тәжрибә таратылырға, артабан үҫтерелергә тейеш.

Дөйөм алғанда, быйылғы конкурс нигеҙендә башҡорт теле уҡытыусыларының төрлө яҡлы, теоретик һәм методик яҡтан әҙерлекле, ысын мәғәнәһендә уҡытыусы - профессионал, уҡытыусы-остаз, уҡытыусы-лидер икәнен күрҙек. Үрҙә күрһәтелгәндәр иһә – эштең сифатын арттырыуға йүнәлтелгән тәкдимдәр.

**Ғәзизова Әлфиә Рәүеф ҡыҙы,**
**58-се лицейҙың башҡорт теле**
**һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**

### «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2023» төбәк-ара конкурсы «Оҫталыҡ дәресе» этабына методик кәңәштәр

Йыл уҡытыусыһы конкурсында дәрес менән берлектә иң яуаплы этаптарҙың береһе ул оҫталыҡ дәресе. Ғөмүмән, был этапты ла еңел генә үткәреп ебәрер өсөн, оҫталыҡ дәресенең асылына төшөнөргә һәм уның төҙөлөшөн, этаптарын асыҡ күҙ алдына килтерергә кәрәк.

Оҫталыҡ дәресен үткәреүсе уҡытыусы коллегаларын яңы технология йәки алым менән таныштыра һәм уны практикала ҡулланырға өйрәтә.

15 минут ваҡыт бының өсөн аҙ, шуның өсөн ул дәрестең һәр этабын минутына тиклем уйлап яҙырға тейеш.

*Оҫталыҡ дәресенең төп үҙенсәлектәре:*

1. Диалоглы эшмәкәрлек, фекер алышыу ойоштороу.
2. Практик йүнәлешле эш-яңы мәғлүмәт менән танышыу ғына түгел, ә эшмәкәрлек алымдарын, технологияларҙы үҙләштереү.
3. Методик яңылыҡлы булыуы
4. Профессионаллек: алып барыусы уҡытыусылар менән бер кимәлдә аралаша.
5. Рефлексияның булыуы.

Оҫталыҡ дәрестәрҙәге төп хаталар:

1. Күп мәғлүмәт бирергә тырышыу, күп һөйләү.
2. Дәрестең төҙөлөшө уйланып бөтөлмәгән, ваҡыт дөрөҫ бүленмәгән.
3. Уҡытыусының коллегаларына уҡыусыларға һымаҡ мөрәжәғәт итеүе.
4. Фокус төркөмдөң актив булмауы.
5. Оҫталыҡ дәресендә ҡуйылған маҡсаттарға ирешмәү.

*Шулай итеп, үрҙә әйтелгәндәргә ярашлы конкурстың был һынауҙа киләһе этаптарҙың булыуы мотлаҡ талап:*

1. Белемдәрҙе актуалләштереү. Проблемаларҙы асыҡлау.
2. Теманы әйтеү, маҡсат ҡуйыу.
3. Фокус төркөм менән практик эш.
4. Технология йәки уңышлы алымдар менән практик таныштырыу (аудитория менән эш).
5. Фокус төркөмдөң эшен күрһәтеү, тема менән бәйләү. Методик теманы асыҡлау.
6. Нығытыу. Һайлап алынған алымдарҙың практик әһәмиәтен күрһәтеү. Аудитория менән диалог ойоштороу.
7. Рефлексия. Метапредмет бәйләнеште күрһәтеү.
8. Йомғаҡлау.

Иң мөһиме, оҫталыҡ дәресенең һәр этабы бер - береһе менән бәйле булып, эҙмә - эҙлекле барырға тейеш. Тик шул ваҡытта ғына дәрескә килгән һәр уҡытыусы үҙенә ниндәй ҙә булһа яңылыҡ алып сығыр, киләсәктә үҙ тәжрибәһендә өйрәнгән алымдарын ҡулланып, оҫталыҡ дәресе асылына төшөнөр.

**Ҡарабаев Мөнир Иҙел улы,**
**Өфө фән һәм технологиялар**
**университеты уҡытыусыһы,**
**филология фәндәре кандидаты**

## «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2023» төбәк-ара конкурсы «Тәрбиәүи сара» этабына методик кәңәштәр

“Йыл уҡытыусыһы” конкурсының мөһим бер этабы – уҡыусылар менән тәрбиәүи сара үткәреү. Был конкурс бәйгесе тарафынан балаларҙы тәрбиәләүгә һәм социалләштереүгә йүнәлтелгән айырым бер формалағы кластан тыш сара ойоштороуҙы күҙ уңында тота: класс сәғәте, төрлө түңәрәктәр, секциялар, клубтар, студиялар һ.б.

Конкурстың талабы буйынса үрҙә билдәләнгән кластан тыш саралар этномәҙәни йөкмәткеле булырға тейеш һәм, әлбиттә, балаларҙа илһөйәрлек тойғоһо формалаштырыу ҙа күҙ уңында тотола.

“Тәрбиәүи сара” бәйгеһенә бөтәһе 20 минут ваҡыт бүленә һәм жюри һорауҙарына яуап биреү өсөн өҫтәлмә 10 минут ҡаралған. Һәр бер конкурс этабы кеүек үк, был сара айырым критерийҙарға ярашлы баһалана. Билдәләнгән талаптар буйынса мөһим тип һаналған күренештәрҙе билдәләп үтергә кәрәк.

1. Конкурстың бөтә этаптарында ла уҡытыусы шәхесенә иң кәрәк булған сифат – уның телмәр мәҙәниәте. Уҡытыусының балаларға еткергән мәғлүмәте аңлайышлы ғына түгел, ә уларҙың телмәрен үҫтереүгә лә йүнәлтелгән булырға тейеш. Сарала һөйләшәсәк материал фәнни яҡтан нығытылған булыуы һәм уның һуңғы ҡаҙаныштарына тап килеүе мотлаҡ. Шуға күрә балаларға тәҡдим ителгән факттар ысынбарлыҡтан ситләшергә тейеш түгел.

2. Заман талаптарына ярашлы конкурста информацион-коммуникатив технологияларҙы ҡулланыуға ҙур иғтибар бирелә. Сара барышында уҡытыусы үҙе биргән мәғлүмәткә ярашлы күргәҙмә материал ҡулланыуы, уның төрлө сығанаҡтарҙан алынған факттарға таяныуы өҫтәлмә балдар менән баһалана.

3. Уҡытыусы тарафынан тәрбиәүи сараның маҡсаттарын, бурыстарын һәм һөҙөмтәләрен аныҡ ҡына билдәләүе, шуларға ирешеүгә ынтылышы ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Сараны ойоштороусы уҡытыусы балаларға асыҡ күрһәтмәләр һәм аңлатмалар бирергә, шулай уҡ бергәләп башҡараласаҡ эштәрҙең ҡағиҙәләрен һәм тәртибен асыҡларға бурыслы. Белем биреү сараларын һәм арауығын рациональ файҙаланыу мөһим.

4. Төрлө методтар һәм ысулдарҙың тәрбиәүи сараның маҡсаттарына ярашлы дөрөҫ ҡулланылыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Бында үткәреләсәк сараның яңылығы, уҡытыусының ижади ҡарашы һәм индивидуаллеге төп талаптар булып һанала.

5. Педагогик һығылмалыҡ күрһәтеү, импровизацияға әҙер булыу, сараның структураһына ҙур булмаған төҙәтеүҙәр индереү кеүек күренештәр сара ойоштороуҙағы уҡытыусыға кәрәк булған мөһим сифаттар булып тора.

6. Сара барышында мотивацияның төрлө ысулдарын эҙмә-эҙлекле ҡулланыу балаларҙа ҡыҙыҡһыныу һәм ғәжәпләнеү тойғоһо уята. Ысынбарлыҡта булған проблемалы ситуацияларҙы тормош тәжрибәһенә һәм уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуҙарына таянып ойоштороу кәрәк.

7. Уҡытыусы менән уҡыусылар араһындағы ихлас мөнәсәбәт, яҡшы мөхит тыуҙырыу тәрбиәүи сараның уңышлы булыуына мөһим шарт булып тора. Һорауҙарҙы

дөрөҫ ҡуя белеү, проблемалы ситуацияларҙы урынлы тыуҙырыу балаларҙың һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

8. Сараның тәрбиәүи һөҙөмтәһе – башҡарылған эш-хәрәкәттәрҙең иң төп маҡсаты, шуға күрә уҡытыусының балалар иғтибарын тормош һәм милли ҡиммәттәргә йүнәлтеүе мөһим. Уҡыусыларҙың мәҙәни төрлөлөккә булған толерантлы ҡараштарын, шәхси уй-фекерҙәрен ихтирам итеү шарт.

9. Тәрбиәүи сара аша уҡыусыларҙы әҙҙләнеү, тикшеренеү  эшенә йәлеп итеү ыңғай һөҙөмтәләрҙең береһе булып һанала. Ҡуйылған маҡсаттарҙың сара һөҙөмтәһе менән тап килергә тейеш.

10. Ойошторолған тәрбиәүи сара өлөштәренең бер дөйөм система рәүешендә формалашыуы бәйгесенең сараға үҙанализ башҡарыуында асыҡ сағылыш таба. Шуға күрә үткәрелгән сараның һәр этабына конкурсант анализ үткәрә, ҡуйылған маҡсаттарҙың томошҡа ашыу йәки ашмауы тураһында һығымталар яһай, сара барышында төҙәтмәләрҙең индерелеү йәки индерелмәү сәбәптәрен дәлилләй.

Жюри ағзаларының һорауҙарына грамоталы, асыҡ һәм тулы яуап биреү тәрбиәүи сараның ыңғай баһаланыуына алып килә.

